*Аҡыллы кеше ниндәйҙер күңелһеҙ хәлгә тарығанда: "Барыһы ла Хоҙай ихтыярында. Тимәк, мин Уның ҡушыуы буйынса бындай хәлгә тарырға тейеш булғанмын", тип үҙ-үҙен йыуата. Ахмаҡ кеше: "Бындай хәл башҡалар менән дә булып тора. Ә минең менән бындай хәл башҡаса булмаясаҡ, уны кисектереү үҙемдең ихтыярымда", тип йыуана. Һеҙ кем - аҡыллымы, ахмаҡмы?*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18 - 24 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№7 (477)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт ҡурайы...**

хәрби хеҙмәттә



5

**Ялғанға ҡаршы торһаң,**

дөрөҫлөктә яҡлаһаң - һин көслө ир



8-9

**"Үәт әй, түбәтәй"ҙе...**

радио төбөндә көтөп кенә ултыралар әллә...



11

**Ҡыҙы бар -наҙлы,**

улы бар - терәкле



12-13

14-15 **Һайлауҙар**

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ БАТЫРЫ...

## донъя чемпионы титулына дәғүә итә

**Американың Лос-Анджелес ҡалаһында йәшәүсе, унда юғары белем алыусы, шулай уҡ эшләп тә, шоу-бизнес менән шөғөлләнеп тә өлгөрөүсе профессиональ боксер Силәбе өлкәһе Арғаяш районы башҡорто Хәбир Сөләймәнов еңеүҙәре менән беҙҙе ҡыуандырыуын дауам итә.**



Күптән түгел яҡташыбыҙ тәжрибәле боксер - мексиканлы Роберто Лопес менән көс һынашты. Ярыш 6 раунд дауам итте һәм Сөләймәнов файҙаһына тамамланды. Боксерҙар араһында "Айбарлы рәсәйле" ("Crazy Russian") ҡушаматы алған Хәбир Лопесҡа тәүге раундта уҡ бик елле "ҡундырғас", тегеһе башҡа раундтарҙа тик ҡасыу яғын ҡараны. Әммә, ҡайҙа ғына ҡасһа ла, Силәбе егетенең "ҡорос" йоҙроғо уны ҡыуып етеп, мәрәйҙәр йыя тора. "Ярышты нокаут менән тамамлауға дәғүәсемдең, ҡәҙимге мексикан боксерҙарына хас булмаған-са, үтә хәрәкәтсәнлеге ҡамасауланы", - тип, тәьҫораттары менән уртаҡлашты донъяның иң көслө ун боксеры исемлегенә ингән яҡташыбыҙ.

Хәбир Сөләймәновтың һәр ваҡыт рингҡа башҡорт милли кейемендә килеп сығыуы Америкала ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра икән. Егеттең әйтеүе буйынса, милли кейем кейгән саҡта уның ҡанында башҡорт айбарлығы ҡабына. Донъя чемпионы титулына дәғүә итеүсе талантлы яҡташыбыҙ берәй мәл тыуған яҡҡа ҡайтыр, төбәк спорты үҫешенә үҙ өлөшөн индерер, тип кемдер өмөт итә икән, был - тәбиғи. Әммә ул бөгөн үҙ өлгөһөндә "ситтән тороп" милләттәштәрҙә спортҡа һөйөү тәрбиәләй, йөрәгендә осТоҡ ҡына ғәм булғандарға милләткә ихтирамлы мөнәсәбәт өлгөһө күрһәтә, быны ла онотоорға ярамай. Шуға күрә, мөмкинлектәр күберәк ерҙә үҙенде ас, киң офоҡтар ҡос, батыр! Башҡорттарың һинең менән ғорурлана!

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ЙӘЙӘҮЛЕЛӘРГӘ...

## урам кәрәк!



**Өфөнөң Ленин урамын автомобилдәр өсөн бер яҡлы хәрәкәтле итеп үҙгәртеү тәрлө фекер тыуҙырҙы. Ләкин үҙгәрештәр автомобиль юлына ғына түгел, ә йәйәүлеләргә лә ҡағылмаҡсы. Һүҙ баш ҡала йәйәүлеләр өсөн генә тәғәйенләнгән урам булдырыу хаҡында бара, сөнки былтыр үткәрелгән һорау алыуҙар буйынса, баш ҡала халҡының күбеһе Өфөнөң тарихи үҙәгендә ошондай урам булырға тейеш, тигән фекер белдергәйне. Шуны күҙ уңында тотоп, ҡала округы хакимиәте өфөләләргә түбәндәге һорауҙарға яуап биреүҙе һорай:**

**Һеҙ Өфөлә йәйәүлеләр өсөн урам барлыҡҡа килеүен теләйһегеҙме? Әгәр шулай икән, түбәндә килтерелгән варианттарҙың ҡайһыһын һайлайһығыҙ?**

- Мостай Кәрим урамы - Революцион урамынан Ҡунаҡһарай йортона тиклем;
- Октябрь революцияһы урамы тулыһынса;
- Ленин урамы - Хөкүмәт йортонан алып Коммунистик урамына тиклем;
- Йә булмаһа, үҙегеҙ теләгән башҡа урамды күрһәтегеҙ.

Тауыш биреү Өфө ҡала округы хакимиәтенең рәсми сайтында ла бара, уның өсөн **http://www.ufacity.info/vote/vote_new.php?VOTE_ID=15** һылтанмаһы буйынса күсергә мөмкин.

**Редакция ҡуйылған һорау буйынса бер-нисә гәзит уҡыусының фекерен белде лә инде.**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ, журналист:** Ҡаланың бер урынында хәрәкәтте кәметеү икенсе урында тығындарҙың күбәйеүенә килтерәсәк һәм ҡала округы хакимиәте ниндәй генә ҡарар ҡабул итһә лә, кемгәлер был оҡшамаясаҡ. Шулай уҡ ниндәй ҙә булһа үҙгәреш ҡаланың өйрәнелгән ритмын боҙасаҡ, ә ул ритм ҡала халҡының холҡона, йәшәү рәүешенә һеңгән, тимәк, үҙгәреш кешенең психологик торошона ҙур йоғонто яһаясаҡ. Шуға күрә барлыҡ был факторҙар күҙ уңынан ысҡындырылмаҫҡа тейеш. Миңә килгәндә иһә, күрһәтелгән варианттарҙың өсөнсөһөн - Ленин урамын һайлайым.

**Регина ХӘЛИТОВА, "Уралсиб" банкының хоҡуҡ белгесе:** Мин Ленин урамын йәйәүлеләр өсөн генә итеп үҙгәртһәләр, бик шат булыр инем. Уның ҡаланың тарихи урынында урынлашыуы ла, яҡын-тирәһендә күп ойошма, уҡыу йорттарының булыуы ла, шулай уҡ Хөкүмәт йорто янында Ағиҙел буйына иҫ киткес матур панорама асылыуы ла ошо вариант файҙаһына, тип уйлайым.

**Радик ЮЛБАЕВ, Өфөнөң 9-сы мәктәбе директоры:** Бындай урам бары тик йәйәү йөрөү мөмкинлеге уңайлығынан сығып ҡына түгел, ә Өфө халҡына һәм баш ҡала ҡунаҡтарына ял итеү, рухи яҡтан камиллашыу мөмкинлеге биргән урын булараҡ та ҡаралырға тейеш. Һанап үтелгән урамдарҙың барыһы ла, тейешле сығым һәм етди проект булғанда, был мөмкинлеккә эйә, тигән фекерҙәмен.

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# АҢ-БЕЛЕМ, ӘҘӘП ҺӘМ РУХ ЙӨРӨТӨҮСЕ...

**ҺОРАУ: "Интеллигент кем ул? Ул ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш тип уйлайһығыҙ?"**

**Зыя ӘБСӘЛӘМОВ, филология фәндәре кандидаты, профессор:** Иң тәүҙә "интеллигент" терминының мәғәнәһен асыҡлайыҡ. Төп өлөшөндә "интеллект", йәғни аң, белем һүҙе ята. Тимәк, философик төшөнсә булараҡ, был - аң-белем кимәле менән көслө кеше. Әммә һүҙгә ошолай ябай ғына аңлатма биреү - айсбергтың һыуҙан күренеп торған башын ғына күргән килеш, уның аҫҡы өлөшө тураһында ла фекер йөрөтөргә маташыу һымаҡ ҡабул ителер ине.

"Интеллигенция вәкиле" тигән төшөнсәне ҡарайыҡ әле. Был исемлеккә фән, мәғариф, техника, сәнғәт өлкәһендә эшләүсе юғары аң, белем эйәләре ҡатламын индерергә кәрәк. Шулай ҙа был - бары шартлы бүленеш, уларҙың барыһын да бер ҡалыпҡа һалыу дөрөҫ булмаҫ. Сөнки "Бер ... һыйыр бөтөн көтөүҙе бысрата" тигәндәй, хатта ошо өлкәлә эшләп тә, "интеллигент" баһа-һүҙенә тура килмәүселәр була бит. Улар - белемле булып та, әҙәп нормаларын һанға һуҡмаусылар, шулай уҡ үҙ өлкәһен яҡшы белеп тә, башҡа өлкәләрҙә әлепте таяҡ тип белмәүселәрҙе был исемгә лайыҡ тип әйтеп булмайҙыр.

Йәнә шуныһы бар: күп осраҡта юғары белеме лә булмаған, алда һанап үтелгән өлкәләрҙә лә эшләмәгән, шулай ҙа әҙәплелеге, бөхтәлеге менән башҡаларҙан айырылып торған кешегә "интеллигент" тип өндәшәләр. Тик был осраҡта ошо исем менән аталыусыға кемдер, ысынлап та, ихлас һоҡлана, ә кемдер ниндәйҙер сәйерһенеү менән ҡарай, хатта йыш ҡына мыҫҡыллы мөнәсәбәт белдерә. Тағы ла, кеше араһында үҙ һүҙен әйтә һалып бармаған, һаҡ йәнле кешеләргә ҡарата ла "интеллигент" ярлығы тағыла. Шул арҡала был төшөнсәгә яңылыш ҡараш барлыҡҡа килә лә инде. Әйҙәгеҙ, интеллигенттарға хас сифаттарға эйә булған бындай кешеләрҙе "интеллигент кеүек кешеләр" тип атап торайыҡ әлегә.

Минең уйымса, интеллигент - төрлө яҡлап белемле, рухи яҡтан бай, әхлаҡлы, итәғәтле, үҙе белгәнде ҡалғандарға ла өйрәтергә тырышыусы, объектив фекер йөрөтөүсе һәм, иң мөһиме, башҡаларҙы үҙенең артынан эйәртә алыусы оло шәхес ул. Шундайҙарҙан мин иң тәүҙә Әхмәтзәки Вәлиди-Туғанды атар инем. Беҙ һанаған сифаттарға эйә булыуы арҡаһында ул хатта башҡорт милләтенең генә түгел, тотош илдәрҙең киләсәгенә ҡарата фараздарын, уларҙың хакимдарына кәңәштәрен әйтеп ҡалдырған.

**Илгиз РӘХИМОВ яҙып алды.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ГӘЗИТТӘГЕ ҺӘР МӘҠӘЛӘ...

## тыуған яғыма яҡынайта

**Баймаҡ тарафтарында тыуып үҫеп, әлеге ваҡытта Америка Ҡушма Штаттарының Нью-Йорк ҡалаһында йәшәйем. Бөгөнгө заманда, Аллаға шөкөр, алыҫта ҡалған атай-әсәй, туғандар һәм дуҫтар менән аралашыу мөмкинлеге күп. Телефон аша ла, интернет селтәре ярҙамында ла бәйләнеш яйға һалынған. Шулай ҙа сит яҡтарҙа көнөлдә болоҡһотҡан һағыныу тойғоларын баҫыу өсөн рухи аҙыҡ та кәрәк. Минең өсөн шундай рухландырыусы көс - "Киске Өфө" гәзите.**

Студент йылдарынан алып уҡыған был гәзит миңә шул тиклем оҡшай. Гәзит биттәрендә баш ҡалаға ғына түгел, ә барлыҡ республикаға ҡағылышлы яңылыҡтарҙың ҡыҫҡаса, күп урын алмай ғына урынлаштырылыуы ла, төрлө ҡыҙыҡлы темаларға һорау алыуҙар ҙа, халыҡ медицинаһы алымдары, хоҡуҡи өлкәгә ҡағылған мәсьәләләргә аңлатмалар бирелеүе лә урынлы һәм файҙалы, тип уйлайым, сөнки кәрәк саҡта барыһы ла ҡул аҫтында. "Киске Өфө"нөң тағы ла оҡшаған яғы - ул милләтебеҙ, республикабыҙ тарихын төрлө яҡлап яҡтыртыу. Тарихҡа ҡағылған мәҡәләләрҙең тик ҡоро факттарҙан ғына тормай, ә ғалим һәм белгестәр тарафынан ентекле, аңлайышлы һәм ҡыҙыҡлы итеп асып бирелеүе уларҙы тағы ла уҡымлыраҡ итә.

"Монолог" һәм "Диалог" рубрикалары хаҡында ла тик йылы һүҙҙәр генә әйтке килә, сөнки улар төрлө өлкәне байҡай һәм фекерҙәштәрҙе, битараф булмаған шәхестәрҙе бергә йыя. Күп осраҡта уларҙың тос һәм үткер фекерҙәрен ҡайта-ҡайта уҡыйым һәм үҙемә бөтмәҫ рухи көс алам. Сәнғәтте яратҡан кеше булараҡ, үҙебеҙҙең йыр һәм бейеүҙәрҙе ҡарауҙан, театрға барыуҙан мәхрүм булыуҙы ауыр кисерәм (интернет селтәре аша ҡарау тере көйөнсә ҡарауға етмәй шул). Шуға күрә сәнғәт өлкәһендәге төрлө премьералар хаҡындағы материалдарҙы уҡып, үҙемде шул ваҡиғалар уртаһында ҡайнаған кеүек хис итәм. Айырыуса Рәми Ғариповҡа арналған "Шағир донъяһына сәйәхәт" мәҡәләһен уҡығас, тиҙерәк ҡайтып, Башҡорт дәүләт академия театрының ошо тамашаһын ҡарау теләге менән янам. Ғөмүмән, гәзиттәге һәр мәҡәлә, һәр һүҙ, һәр автор мине тыуған еремә, Башҡортостаныма яҡыныраҡ итә, меңәр саҡрым араны "елеп" үтерлек мөмкинлек бирә. "Киске Өфө"нөң артабан да милләттәштәребеҙгә ышаныслы дуҫ, ныҡлы таяныс, көс-ҡеүәт биреүсе, изгелеккә әйҙәүсе булып ҡалыуын һәм аҡыл ҡаҙнаһының һайыҡмауын теләйем.

**Гөлгөнә ИСТӘКОВА.**
**Нью-Йорк ҡалаһы.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Бүздәк районының башҡорт теле уҡытыусылары.

Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына шуны еткерәбеҙ: февраль-март айҙарында 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡ менән **(348 һум 24 тин)** 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып буласаҡ. **Һеҙҙе бер аҙ дәртләндереү өсөн шундай тәкдим: февраль айында гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән ике уҡыусыбыҙ башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим" китабына эйә буласаҡ.** Бәхетегеҙҙе һынап ҡарағыҙ ҡана!

**Һәм тағы.** Эргә-тирәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе: 17 мартҡа тиклем яҙылһалар, апрелдән өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө". Индексы - 50665. Өс айға яҙылыу хаҡы - 174 һум 12 тин.

**Әйткәндәй,** почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**, **kiskeufa@ufacom.ru**, беҙҙең сайт: **kiskeufa.ru**, блог: **blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ БР Президенты Рөстәм Хәмитов Өфө ҡала округы Советына депутатлыҡҡа кандидаттар менән осрашыу үткәрҙе. Әле барған һайлау кампанияһы һөйләшеүҙең төп темаһы булып торҙо. Президент Башҡортостандың баш ҡалаһын башҡа миллионлы ҡалалар менән сағыштырҙы, эш урындары, эш хаҡы кимәле, йәлеп ителгән инвестициялар күләме буйынса Өфөнөң бер аҙға артта ҡалыуын билдәләне. Был мәсьәләләрҙе ҡаланың яңы депутаттар командаһы хәл итәсәк. Әммә хәл ҡатмарланды, сөнки яңы командаға көрәш шарттарында эшләргә тура килә. Оппозиция һәр ваҡыт уларҙың эшмәкәрлегенә зыян килтерергә тырыша, тип билдәләне Рөстәм Хәмитов һәм был осраҡҡа берҙәм команда булып эшләү кәрәклеген белдерҙе.

✓ 18 февралдә "Вся Уфа" телеканалында БР Президенты Рөстәм Хәмитов менән тура һөйләшеү үтәсәк. Республика Президенты телевизор ҡараусылар менән ике сәғәт дауамында - 19.30-ҙан 21.30-ға тиклем аралашасаҡ, тип көтөлә. Теләге булған һәр кем Рөстәм Хәмитовҡа тура эфирҙа һорау бирә ала. Бының өсөн Өфөләге 255-90-27 телефонына шылтыратырға, йәки www.allufa.ru сайтында һорау яҙып ҡалдырырға кәрәк. Хәтерегеҙгә төшөрәйек, күптән түгел Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Владимир Путин да ил халҡы менән ошондай аралашыу үткәргәйне. Ошо тура линия барышында Өфөнән дә һорауҙар бирелде, ул ваҡытта күсмә телестудияларҙың береһе Салауат Юлаев һәйкәле янында эшләне.

✓ БР Президенты льготалар менән ҡулланыусы граждандарҙы кәрәкле медицина препараттары менән тәьмин итеү буйынса кәңәшмә үткәрҙе. 2012 йылдың ғинуарында республикала граждандарҙың был категорияһы өсөн медицина препараттарын поставкалауҙа өҙөклөктәр күҙәтелде. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ағымдағы йылда республика 306 мең ташлама менән ҡулланыусыны дарыуҙар менән өҫтәмә тәьмин итеүгә 511 миллион һум аҡса бүлгәйне. Президент был мәсьәләне ентекле тикшерергә ҡушты.

✓ Өфө 2014 йылда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы саммитын үткәреү хоҡуғын алыуға дәғүә итә. Был турала Өфө ҡала округы Советы депутатлығына кандидаттар менән осрашыуҙа БР Президенты Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. Әгәр Өфө саммит үткәреүгә хоҡуғын яҡлай алһа, был ҡала һәм республика имиджына ныҡ йоғонто яһаясаҡ. Өфө бөтә донъяла танылыу аласаҡ, уны алыҫ сит илдәрҙә беләсәктәр. Был ҡала үҫешенә яңы этәргес бирәсәк, уға инвестициялар йәлеп итеү, инфраструктураһын яҡшыртыу мөмкинлеге бирәсәк.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ЕГЕТ КЕШЕГӘ...

## етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ...

**Ысынлап та, кеше етмеш төрлө һөнәргә эйә була аламы? Шунсама һөнәргә эйә булыу мөмкин дә түгелдер, йәғни "етмеш" һүҙе "егет"кә баш хәрефе бер үк булғаны өсөн йә магик көскә эйә ете һанын иҫтә тотоп, символик рәүештә алынғандыр, тип тә уйланыла. Шуға күрә, шунсама һөнәргә эйә булыу мөмкинме-юҡмы икәнен тикшереп ҡарау маҡсаты менән бала саҡтан алып үҙләштергән һөнәрҙәремде теҙеп яҙырға тотондом. Апаруҡ булып китте улар.**



Бәхтиһәң, бала сағымдан алып атайым, әсәйем, ҡарсәйем, өләсәйем, олатайҙарым, уҡытыусыларым, ижадтағы остаздарым, хеҙмәт урынындағы коллегаларым һәм башҡалар мине бихисап һөнәрҙәргә өйрәткән икән. Ҡайһы берҙәрен үҙаллы ла өйрәнеп маташҡанмын. Бер яҡтан ҡарағанда, уларҙы шөғөл, ғәмәл тип тә атарға булыр ине, әммә һәр ҡайһыһын башҡарыр өсөн айырыуса физ-аҡәрлек һәм нескәлек талап ителгәнгә күрә, мин ул шөғөлгәмәлдәремде һөнәр тип тә атай алам. Ни өсөн тигәндә, ул шөғөл-гәмәлдәр кемдәрҙер өсөн ғүмерлек һөнәр ҙә булып тора. Мин уларҙың теләһә ҡайһыны буйынса китеп, ғүмеремде шуға бағышлай алыр инем. Һәр хәлдә, һөнәрһеҙ ҡалмаҫ инем. Түбәндә һанап киткән шөғөлгәмәлдәремдең ҡайһы берҙәрен йәйә эсендә тәфсирләп тә үтермен.

Тәүгеләре, әлбиттә, ир ҡанаты булған атҡа бәйлеләре: ат егеү һәм туғарыу, һыбай йөрөү, атты еккегә һәм менгегә өйрәтеү (тыры өйөр айғырын менгегә өйрәтеүем айырым бер тарих), тирләп янған атты таң ашыбып һыуытыу, мал һуйыу, дуға бөгөү. Атҡа бәйле бер шөғөлөмдө һөнәргә һанамайым, әммә колхозда чабан (чабан һөнәрме?) булып эшләгәндә ағастан эйәр яһап ҡараным. Шул саҡта өлкәндәрҙән һорашып, эйәрҙең бер нисә өлөшө барлығын белдем. Улар: ҡаптал, ҡашаға, ҡум, айыл, күмелдерек, серге, яҫтыҡ, ҡойошҡан, алтартма, өҙәңге, өҙәңге бауы, бауырлыҡ.

Атайым өйрәткәндәре: ҡурай тартыу, гармунда, ҡумыҙҙа (атайымдың бер туған ағаһы Басир олатайым ҡумыҙ һуғырға ла өйрәтте, беҙҙә ҡумыҙ яһауҙы "ҡумыҙ һуғыу", тиҙәр), мандолинала уйнау, йырлау (бер мәжлестә "Абдрахман"ды йырлағас, Заһир ағай Исмәғилев: "Маладис, ҡустым, Заһир ағайыңды илатырлыҡ йырлай алаһың", - тине. Камил Вәлиев шунан һуң минә: "Шиғыр-мығыр яҙып әрәм булып йөрөгәнсе, әйҙә, мин һине сәхнәгә әҙерләп сығарам", - тип ныҡышып та йөрөнө), машина йөрөтөү (ун бер йәшемдән алып), велосипедта, мотоциклда йөрөү. Мандолина уйнарға өйрәнеүемдең айырым тарихы бар. Атайым минең үҙемсә әтмәләп яһап уйнаған думбыраны күргәс, почта аша мандолина яҙҙырып алып бирҙе. Уйнарға ла өйрәтте. Сират скрипкаға етте. Ә думбыраға бәйле әсәйемдең ҡайҙандыр отҡан һамағы былайыраҡ:

*Дум-дум, думбыра,*
*Думбыраны тумырам.*
*Думбыраны ташланым да,*
*Ҡыҙҙар үбә башланым.*

Бесән әҙерләүгә бәйле шөғөлдәр (салғы ашлау, салғы сүкеү һәм яныу, бесән сабыу, күбә яһау, күбә тарттырыу, кәбән ҡойоу, ҡыуыш ҡороу, таған яһау, шөңкәйтмә ҡағыу - мин уларҙың бөтәһен бер бесәнсе һөнәре тип иҫәпләйем), балыҡ тотоу (атайым бесәндә Ҡашҡат, Мәхмүт, Аҡһолтан йылғаларында балыҡ мәскәүләргә, һалдау тотоп сыраҡҡа төшөргә өйрәтте), тәлге бешереү (һарына бутҡаһы, бесәндә саҡта аҡ яуын башланып, ауылға юл өҙөлөп, ризыҡ нәҡыҫлығы башланғанда атайым һарына ҡаҙа торған махсус көрәк-салыр яһап, һарынанан бутҡа бешерергә өйрәтте), тракторсы (атайым менән бергә үҫмер сағымдан алып тракторҙа ер һөрҙөм), комбайнсы (ике йыл атайыма комбайнсы ярҙамсыһы булдым, һәр хәлдә "һоғоноу"ҙың ни икәнен бик яҡшы беләм), балта һаплау, быйма табанлау, тире эшкәртеү, ау, мурҙа үреү, мотобысҡы менән эшләү, бүрәнә әрсеү, йорт штукатурлау, бура бурау, әүеслек һуғыу, утын бысыу, утын ярыу, ер ҡаҙыу, ҡар көрәү, ағас ултыртыу, ҡойма һуғыу, таш сығарыу, йөҙөү, мылтыҡтан атыу (НВП дәресендә винтовканан атҡанда өс атыуҙа 29 мәрәй йыйыуға өлгөштем). Һәр бер башҡорт малайы кеүек үк юна, ян эшләй, уҡтан ата беләм. Колхоз тормошоноң тағы ла бик күп һөнәрҙәрен үҙләштерҙем. Улар: сварщик, һыйыр көтөүсеһе, сөгөлдөрсө, фуражсы, әбйәшник (баҫыу ҡараусы), сәсеүсе, кантарщик (сәскескә иген тейәүсе), тапалайщик (силос, сенаж тапаусы), йөк тейәүсе, сәкмәнсе (һарыҡ акушеры), һыу үткәреүсе, ҡарауылсы.

Әсәйемдән туҡмас, картуф, бауырһаҡ бешерергә, ҡоймаҡ ҡойорға, ҡурмас ҡурырға, еләкемеш йыйырға, кәзә тарарға, ҡаҙ көтөргә, төймә баҫырға, кейем үтекләргә, иҙән йыуырға, картуф күмергә һәм әрсергә, Әбйәлил ҡыҙы Гөлгөнә Ғәйнуллинанан буҙа ҡойорға өйрәндем. Былау, бутҡа, тултырылған тауыҡ, ҡаҙ, мөйкөлдәк (холодец) бешерергә үҙаллы өйрәндем. Халыҡ табибы Марат Ишмөхәмәтов ағай минә һөлөк һалырға, тәндең кардиналь нөктәләрен ҡыҙҙырырға, үләндәр менән организмды таҙартырға өйрәтте. Космоэнергет Рауфан Мортазиндан космоэнергет һабаҡтарын алып,сеанстар үткәрәм, уҡыуымды дауам итәм. Үҙаллы дөрөҫ итеп тын алыу гимнастикаһын үҙләштерәм.

Мәктәпкә барғас, уҡытыусыларым ярҙамында уҡырға, яҙырға, хисапларға, үҙаллы фекер йөрөтөргә, теүәл фәндәрҙән мәсьәләләр сисергә өйрәндем. Физика, математика буйынса район олимпиадаларында ҡатнаштым. Физика уҡытыусым Рәүеф Бикташев етәкләгән түңәрәктә бумеранг яһаныҡ, аулдашым, шағир Рәйес Түләк менән аэросана, Сәмиғулла Нәүширбанов, Хәйҙәр Ғәйетбаевтар менән лампалы тапшырғыс (хәҙерге кеҫә телефоны) яһаныҡ. Саңғыла, конькиҙа йөрөргә, футбол, волейбол, хоккей, шахмат, шашка уйнарға ла өйрәндем. Унынсы класта уҡығанда штанга күтәреү буйынса мәктәптә һәм үҙебеҙҙең урамда минә етеүсе булманы.

Рәми Ғариповтың шиғырҙарын уҡыу, башҡорт халыҡ йырҙары текстарындағы йөкмәтке мине шиғриәткә ғашиҡ иттерҙе. Өфөгә тәүге тапҡыр 1977 йылда аяҡ баҫҡанда Рәми ағай донъяла юҡ ине инде. Рауил Бикбаев, Булат Рафиҡов, Аҫылғужа Баһуманов, Тимер Йосопов кеүек ағайҙарым, Тамара Ғәниева, Таңһылыу Ҡарамышева кеүек апайҙарым минә шиғриәт иленә килергә ярҙам итһә, Рәшит Солтангәрәев, Әмир Әминев, Наил Ғәйетбай кеүек ағайҙарым прозаға дәртләндерҙе. Прозала тәүге аҙымдарымды фантастик әҫәр менән яһаным. Ҡәләмемде тәржемә өлкәһендә лә һынаным, иң күбеһен Ғәзим Шафиҡовтың шиғырҙарын, повестарын, драмаларын башҡортсаға ауҙарҙым. Яҙылған һәм яҙылып ятҡан драматик әҫәрҙәрем дә бар. Журналист һөнәрен дә үҙләштерергә тура килде. Әрмәнән ҡайтҡас,"Ағиҙел" журналында, Башҡортостан радиоһында (репортер), Магнитогорск телестудияһында, Башҡортостан телевидениеһында (тележурналист), "Шоңҡар" журналында эшләнем. Шулай ҙа хәҙер хеҙмәт иткән "Киске Өфө" гәзитендә мин журналист һөнәрен үҙләштереү буйынса байтаҡ ҡына хеҙмәт башҡара алдым кеүек. Совет осоронда машинкала баҫа белһәм, хәҙер компьютерҙа эшләйем. Әрме сафында хеҙмәт иткәндә маршировкаға, йәғни "айт-два"ға баҫырға өйрәндем. Слесарь, сантехник, бетонсы һөнәрҙәре лә минә ят түгел. Был һөнәрҙәрҙе ниндәй кимәлдә үҙләштереүемде белгеләҙ килһә, Вәхит Хызыровтың баҡсаһындағы мунсаһын барып ҡарағыҙ.

Минең шәһәҙәтнамә (документ) менән нығытылған һөнәрҙәрем кочегар (урта мәктәпте тамамлағас, колхоз ҡаҙанлығында бер йыл эшләп алдым), уҡытыусы (1985 йылда институт тамамланым), делопроизводитель (әрмелә штабта хеҙмәт иттем), "В" категориялы водитель, яҙыусы (1992 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзына алдылар), журналист (2006 йылдан Башҡортостан Журналистар союзы ағзаһы). "Хеҙмәт кенәгә"мдә тәүге рәсми теркәлгән һөнәрем "чабан". Әйткәндәй, Сыңғыҙ Айтматовтыҡы ла нәҡ шулай.

Бик ҙур тырышлыҡ һалһам да, үҙем теләгәндәр араһынан ике генә һөнәрҙе үҙләштерә алманым. Ул да булһа, һүрәт төшөрөү һәм бейеү. Ахырыһы, улары өсөн айырыуса һәләт кәрәктер инде. Һөнәрҙәремде теҙеп һанауым, нисектер, маҡтаныу һымаҡ килеп сыҡты. Әгәр ҙә маҡтаныуҙы ла һөнәргә һанаһағыҙ, 99-сы һөнәрем "баймаҡланыу" була инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шөғөл-һөнәрҙәремдең иҫемә төшкәндәре бына ошолар. Уларҙың һәр ҡайһыһы хаҡында тағы ла бик күп тәфсирләргә булыр ине. Ҡыҫҡаһы, быйыл иғлан ителгән "Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы"на ярашлы рәүештә "Етмеш һөнәрле ир-ат" тигән яңы рубрика-конкурсыбыҙҙы иғлан итергә лә ваҡыттыр. Уларҙа ир-аттарыбыҙ белгән һөнәрҙәрен һәм уларҙы үҙләштереүгә бәйле ҡыҙыҡлы тәьҫораттары, хәтирәләре менән уртаҡлашыр тигән өмөттәбеҙ. Конкурсҡа йомғаҡ йыл аҙағында яһаласаҡ. Иң ҡыҙыҡлы һәм фәһемле мәҡәлә авторҙарын иҫтәлекле бүләктәр көтә.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә йәш ғалимдар, йырсылар, спортсылар һәм башҡа активистар Рәсәй Федерацияһы Президенты дипломдарын һәм премияларын тапшырыу тантанаһына йыйылды. Уларҙың барыһы ла "Һәләтле йәштәргә дәүләт ярҙамы" йүнәлеше буйынса "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проект еңеүселәре. 2011 йыл һөҙөмтәләре буйынса улар - 135 кеше. Йәштәр республика һәм бөтә Рәсәй конкурстары, олимпиадалары, ярыштарында ғына түгел, сит илдәрҙә лә Башҡортостан данын күтәргән. Дипломдарға ҡушып, РФ Президенты премияларын ла тапшырылды. 21 кеше - 60 мең һум, 114 кеше 30 мең һум күләмендә премия алды. Һәләтле йәштәрҙе Рәсәй Президенты премияһы менән бүләкләү илдә 2006 йылдың декабренән башлап үткәрелә. Был йылдар эсендә премияға Башҡортостандан 600-ҙән ашыу һәләтле йәш кеше лайыҡ булды.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президенты күрһәтмәләренең үтәлеше мәсьәләләре буйынса видеоселектор кәңәшмәһендә ҡатнашты. Кәңәшмә Дмитрий Медведев рәйеслегендә үтте. Унда Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын торлаҡ менән тәьмин итеү, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендәге айырым мәсьәләләргә хәл итеү, өс һәм унан күберәк балалар тәрбиәләнгән ғаиләләргә ер участкалары биреү буйынса күрһәтмәләрҙең үтәлеше тикшерелде, тип хәбәр иттеләр республика башлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Башҡортостан билдәле летчик, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың тыуыуына 90 йыл тулыуҙы билдәләүгә әҙерләнә. Был иҫтәлекле датаға арналған саралар Илеш районында, Өфөлә, республиканың башҡа ҡала һәм райондарында планлаштырыла. Башҡортостан Хөкүмәте бойороғо менән юбилей сараларына әҙерлек һәм уларҙы үткәреү буйынса ойоштороу комитеты булдырылды. Саралар араһында - тантаналы кисәләр, архив материалдары күргәҙмәһе, ижади эштәр конкурсы, спорт ярыштары, шулай уҡ Муса Гәрәев исеменә бәйле урындарҙы төҙөкләндереү.

✓Әбйәлил районында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың тол ҡатындарының торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға сертификаттар тапшырылды. Уларҙы балалары һәм ейән-ейәнсәрҙәре менән килгән сал сәсле 28 ханым алды. 2011 йылда районда барлығы 54 тол ҡатын торлаҡҡа сертификат алған, әле тағы ла йөҙҙән ашыу ҡатын-ҡыҙҙың торлаҡ сертификаты алыуға әҙерләнгән документтары БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында тикшерелә.

*✓ Хәҙер таҙартылмаған һыуҙы Ағиҙелгә ағыҙыу туҡтатылған. Быға "Өфө ҡалаһы канализацияһы" проектын ғәмәлгә ашырыу һәм быйыл апрелдә 3-сө биологик таҙартыу блогын сафҡа индереү булышлыҡ иткән.*

*АЛДАЙҘАР!*

## БАНК ИСЕМЕНӘН ДӘ МУТЛАШАЛАР

**Рәсәй Банкының тышҡы һәм йәмғәтселек бәйләнеше департаменты хәбәр итеүенсә, халыҡ тарафынан Рәсәй Федерацияһының Үҙәк банкына һатып алынған дарыу, биологик актив өҫтәмә һәм башҡа ҡайһы бер тауар өсөн түләнгән аҡсаларын кире ҡайтарыуҙы юллап мөрәжәғәт итеүҙәр дауам итә.**

Бындай компенсация алыу мөмкинлеге хаҡындағы тәҡдимдәр үҙҙәрен Рәсәй банкы һәм төрлө федераль башҡарма власть органдары хеҙмәткәрҙәре итеп таныҡан, ләкин был ойошмаларға бер ниндәй мөнәсәбәте булмаған мут кешеләр тарафынан эшләнә. Һуңғы ваҡытта мутлашыусылар енәйәт эшмәкәрлеге географияһын күпкә киңәйтеп, халыҡ менән эш итеү тактикаһын да үҙгәрткән. Хәҙер иғтибар күберәк биологик актив һәм башҡа төрлө матдәләрҙе таратыусыларға төшөрөлә. Мутлашыусылар ышандырыуынса, намыҫһыҙ һатыусылар суд тарафынан яуаплылыҡҡа тарттырылһа ла, һатып алынған тауар өсөн аҡсалата компенсацияны ҡайтарыу мөмкинлеге бар. Йәнәһе лә, Рәсәй Банкы иҫәпкә күсереү йәки ҡулаҡса биреү юлы менән тауар өсөн түләнгән аҡсаны компенсациялаясаҡ. Тик бының өсөн ашығыс рәүештә "һалым", "страховка" йәки "дәүләт һалымы" түләү өсөн аҡса күсерергә һәм паспорт мәғлүмәттәрен еткерергә кәрәк.

Рәсәй Банкы был эшмәкәрлеккә бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы булмауын хәбәр итә һәм бындай тәҡдимдәр хаҡында шунда уҡ полицияға мөрәжәғәт итергә саҡыра.

## ҠАРТТАРҘЫ ЭҘӘРЛЕКЛӘЙҘӘР...

**Өфөлә күсемһеҙ милек менән афера ҡылыусы риэлтор контораһы эшмәкәрлеге туҡтатылған. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының ойошҡан енәйәтселек менән көрәшеү бүлеге хеҙмәткәрҙәре тарафынан был контораның пенсионерҙарҙың фатиры менән эшләнгән мутлыҡтарын асыҡлаған.**

Тикшереүҙең версияһы буйынса, енәйәтселәр баш ҡалала йәшәүсе яңғыҙ пенсионерҙарҙы эҙләп табып, уларҙың үлеменән һуң ялған документ эшләп, фатирҙы риэлтор контораһы исеменә күсергән һәм һуңынан һатҡан. Бөгөнгө көнгә енәйәтселәрҙең ошондай ике мутлыҡҡа ҡатнашлығы булыуы хаҡында әйтергә мөмкин, ләкин был исемлек тикшереү барышында күпкә артыр, тип күҙаллай полиция хеҙмәткәрҙәре.

Пенсионерҙарҙы башҡа енәйәтселәр тарафынан эҙәрлекләү осраҡтары ла булып тора. Бына, мәҫәлән, бер пенсионерҙың фатирының ишегенә шылтыратыусы ике ҡатын-ҡыҙ үҙҙәрен пенсионерҙың күршеһенә килеүсе таныштары, тип таныта һәм уның өйҙә булмауына һылтанып, хат яҙып ҡалдырыр өсөн ҡағыҙ һәм ҡәләм һорап мөрәжәғәт итә. Һөйләшеү барышында уларҙың береһе пенсионерға һиҙҙермәй генә уның фатирына инеп сыға. Улар сығып киткәндән һуң пенсионер алтын биҙәүестәренең юғалғанын асыҡлай һәм полицияға хәбәр итә.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*



## ӨФӨ ХӘСТӘРЛЕКТӘРЕ ТОС

**Дим биҫтәһенең 8-се һәм 9-сы биҫтәләрендә ямғыр һыуы канализацияһы төҙөлә башлаясаҡ. Бығаса ҡала урамдарындағы ямғыр һыуҙары ер аҫты йылғаларына ағып төшә торғайны. Канализация ямғыр һыуҙарын таҙартыу ҡоролмаларына йүнәлтәсәк, таҙартылғандан һуң ул йылғаға ағыҙыласаҡ. Был турала баш ҡала округы хакимиәт башлығының беренсе урынбаҫары Владимир Дмитрюк хәбәр итте.**

Бынан тыш, хәҙер таҙартылмаған һыуҙы Ағиҙелгә ағыҙыу туҡтатылған. Быға "Өфө ҡалаһы канализацияһы (киңәйтеү һәм реконструкция, 3-сө сираты)" проектын ғәмәлгә ашырыу һәм былтыр апрелдә 3-сө биологик таҙартыу блогын сафҡа индереү булышлыҡ иткән. Ҡаланың таҙартыу ҡоролмаларында ағып төшкән һыуҙы тәрән эшкәртеү алымдары индерелгән. Быйыл апрелдә ультрафиолет нурҙары ярҙамында дезинфекциялау бинаһын сафҡа индереү планлаштырыла. Ямғыр һыуҙары канализацияһын төҙөүгә 100 миллион һум күләмендә аҡса бүленәсәк.

Владимир Дмитрюк 2012 йылда Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалаштырыуға булышлыҡ итеү фонды ҡатнашлығында 47 күп фатирлы йортта ремонт, шул иҫәптән күп фатирлы 42 йортта комплекслы ремонт үткәреү планлаштырылыуы тураһында ла әйтеп үтте. Былтыр Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалаштырыуға булышлыҡ итеү фондынан был маҡсатта 194 миллион һум бүленгән булған. Был эштәр шулай уҡ йорт хужалары һәм ҡала бюджетынан бүленгән средстволар иҫәбенә башҡарылған. Ошо аҡсаға 39 күп фатирлы йорт ремонтланған, шул иҫәптән 11,5 мең өфөлө йәшәгән дөйөм майҙаны 272 мең квадрат метрлыҡ 11 йортта комплекслы ремонт үткәрелгән.

Бынан тыш, "Рәсәй ҡалаларының яңы юлдары" адреслы программаһының финанслауы арҡаһында Өфөлә 537 йорт һәм уларҙың 144 подъезы ремонтланған. Былтыр ҡала урамдарын капиталь ремонтлауға айырым иғтибар бирелгән. Дөйөм майҙаны 493 мең квадрат метрлыҡ 25 урам яңыртылған. 253 мең квадрат метрҙа соҡорҙар ямалған. Зәки Вәлиди, Пушкин, Цюрупа, Р.Зорге, СССР-ҙың 50 йыллығы, Сипайловская, Киров, Карл Маркс, Пархоменко, Обская, Плеханов бульвары һәм Рәсәй урамдарындағы машина юлдары киңәйтелгән. Ремонтлағанда заманса материалдар файҙаланылған, шул иҫәптән Сипайловоға төшкән урында һәм Зәки Вәлиди урамында ваҡ таш менән мастика ҡушылған асфальт һалынған. Әлеге мәлдә белгестәр япмаларҙың төрлө температураларҙа үҙен нисек күрһәтеүен тикшерә. Әгәр һөҙөмтәләр уңышлы тип табылһа, бөтә ерҙә лә ошондай асфальт файҙаланыласаҡ.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## АБИТУРИЕНТ ҠОЛАҒЫНА...

**Юғары уҡыу йортона уҡырға инеү тураһындағы яңы тәртипкә ярашлы, льготалары булған абитуриенттар был өҫтөнлөк менән бер вузда ғына файҙалана аласаҡ. Ҡалған уҡыу йорттарында улар дөйөм нигеҙҙә конкурс үтәсәк.**

Эш шунда: быға тиклем сығарылыш уҡыусылары - олимпиада еңеүселәре, бер нисә университетҡа документ тапшырып, шунда уҡ исемлек башына күтәрелә торғайны. Шуға бәйле уҡырға инеү һәм конкурсҡа бәйле аңлашылмаусанлыҡтар барлыҡҡа килә, дөйөм конкурс буйынса уҡырға инеүсе абитуриенттар ситтә тороп ҡала.

Документтарҙы әүәлгесә өс йүнәлеш буйынса биш университетҡа бирергә мөмкин. Билдәләнгән лимитты үтеп булмаясаҡ: быйыл сығарылыш уҡыусылары тураһындағы мәғлүмәт Федераль мәғлүмәт базаһына индереләсәк. Унда Берҙәм дәүләт имтихандарының һөҙөмтәләре, шулай уҡ абитуриент документтарын биреп өлгөргән вуздар асыҡ күренәсәк.

2012 йылда республика вуздары бюджет нигеҙендә көндөҙгө, ситтән тороп уҡыу бүлектәренә, киске уҡыу формаһына һәм магистратураға 11,5 мең кешене ҡабул итергә планлаштыра. Вуздарҙа маҡсатлы ҡабул итеүгә квоталар иҫәбе кәмейәсәк: быйыл бындай уҡыусылар бюджет нигеҙендә белем алыусылар иҫәбенең 15 процентын тәшкил итәсәк.

Башҡортостан вуздары сайттарында 2012 йылда абитуриенттарҙы ҡабул итеү ҡағиҙәләре урынлаштырылған да инде. Унда юғары уҡыу йортона ингәндә кәрәк булған документтар исемлеге, документтар ҡабул итеү һәм имтихандар үткәреү сроктары, шулай уҡ конкурс, ҡабул итеү имтихандарын үткәреү һәм вузға ҡабул итеү тәртибе бар. Ҡағиҙәләргә ярашлы, вуздар ҡабул итеү буйынса кәм тигәндә өс һынау, шул иҫәптән рус теле һәм профилле предмет буйынса имтихан үткәрергә тейеш. Әгәр абитуриенттар туған тел һәм әҙәбиәт менән бәйле "педагогик белем" һәм "филология" һөнәрҙәре буйынса уҡырға теләһә, вуздар һынауҙарҙың береһен туған тел һәм әҙәбиәт буйынса имтиханға алмаштыра ала.

## ТЕШ ҠУЙҘЫРЫРҒА ТЕЛӘЙҺЕҢМЕ?

**Башҡортостанда ташлама менән теш протездары ҡуйҙырыу программаһы тормошҡа ашырыла башланы.**

БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, медицина күрһәткестәре буйынса теш протездары ҡуйҙырыуға мохтаж һәм пенсияһына социаль өҫтәмә алыусы республика территорияһында даими йәшәгән өлкән йәштәге граждандарға өс йылға бер тапҡыр субсидия формаһында льготалы теш протездары ҡуйҙырыуға йәки теш протездарын ремонтлауға хоҡуҡ бирелә. 2012 йылда был субсидияның күләме 5220 һумға тиң.

Программала йәш критерийҙары аныҡ билдәләнгән. Шулай итеп, унда 58 йәштән өлкән ҡатын-ҡыҙҙар һәм 63 йәштән уҙған ир-егеттәр ҡатнаша ала. Бынан тыш, льготалы теш протездары ҡуйҙырыу программаһында ҡиммәтле металдарҙан, хаҡы буйынса ҡиммәтле металдарға тиңләштерелгән металл-керамиканан һәм башҡа төрлө ҡыйбатлы материалдарҙан теш протездары эшләү һәм уларҙы ремонтлау ҡаралмаған.

Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, республика буйынса уртаса алғанда 7500 һумға теш протездары ҡуйҙырырға мөмкин.

2012 - 2014 йылдарҙа ташлама менән теш протездары ҡуйҙырыу программаһында 17 мең пенсионер ҡатнашасаҡ, тип күҙаллана. Республика бюджеты иҫәбенә дөйөм финанслау күләме - 127,8 миллион һум. Быйыл был маҡсатҡа 43 миллион һумдан ашыу аҡса бүленәсәк.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында буласаҡ әсәләр форумы үтте, уны БР Ҡатын-ҡыҙҙар союзы һәм төбәктең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ойошторҙо. Тәүге тапҡыр ойошторолған был форумдың маҡсаты - ҡатын-ҡыҙҙарҙы бергә йыйып, уларҙың проблемаларын тикшереү. Бында шулай уҡ республика министрлыҡтары һәм ведомстволары белгестәре ҡатнашлығында консультациялар биреү майҙансығы ойошторолдо. Теләгән һәр кем тормошта осраған проблемалар буйынса бушлай консультация ала алды. Буласаҡ әсәләр өсөн махсус баҫма продукцияның презентацияһы үткәрелде.

✓Төбәктә "Йылмайыуың менән бүлеш!" республика фотоконкурсы старт алды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан күргәҙмә компанияһынан. Ул "Мәғариф. Фән. Карьера-2012" күргәҙмәһе сиктәрендә үтәсәк. Ойоштороусылар иҫәбендә - Өфө округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы һәм Башҡортостан күргәҙмә компанияһы. Бәйгелә 18 йәшкә тиклемге балалар һәм йәштәр ҡатнаша ала. Һәр ҡатнашыусы төрлө жанрҙарҙа иң күбе өс фото ебәрергә тейеш. Эштәр 16 мартҡа тиклем "Фотоконкурс!" билдәһе менән onk@bvkexpo.ru электрон почтаһы буйынса ҡабул ителә.

✓2013 йылда Өфөлә үтәсәк VI Халыҡ-ара балалар уйындарының рәсми сайтында бәйгенең талисманы өсөн исем һайлау буйынса тауыш биреү дауам итә. Айыу өсөн алты исем тәҡдим ителә. Әлегә Батыр исеме беренсе килә. Уның өсөн 176 кеше тауыш биргән (41,61%). Икенсе урында Топтыжка - 78 тауыш (18,44%). Тәүге өсәү иҫәбенә милли вариант - Айыухан да инә - 67 тауыш (15,84%).

✓Өфөлә Ф.И.Шаляпин исемендәге 9-сы асыҡ ҡала йәш вокалсылар конкурсына әҙерлек башланды. Бәйге Төбәк-ара Шаляпин үҙәгенең Өфөләге бүлексәһе менән берлектә ҡала округы хакимиәтенең Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы ҡатнашлығында үткәрелә. Быйыл ул 26-28 апрелдә үтәсәк. Гала-концерт 28 апрелдә З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының Ф.И.Шаляпин исемендәге концерт залында ойоштороласаҡ.

✓ *Ҡурайымдың да әрмегә "алыныуы" ҡыҙыҡ ҡына булды. Әрмегә барғас та анкета тултырттылар һәм минең ҡурайҙа уйнауымды белеп ҡалған бер полковник тиҙ арала тыуған яҡтарҙан ҡурай килтертергә ҡушты.*



*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ ҠУРАЙЫ...

## хәрби хеҙмәттә



**Интернет селтәре беҙгә төрлө мәғлүмәт алыуҙа, таныштарҙы эҙләп табыуҙа, алыҫта йәшәүсе туғандарҙың хәлен белеп тороуҙа ҙур ярҙамсы ролен үтәй. Бөгөн һүҙ барасаҡ егетте лә интернет селтәрендә тап иттем. Социаль селтәрҙәрҙең береһендәге фотоһүрәттән һалдат кейемендә, ҡулына ҡурайын тотҡан танышым йылмайып ҡарап тора ине. Эште оҙаҡҡа һуҙмай, уның менән бәйләнешкә инеп, әрме хеҙмәте һәм сит тарафтарҙа башҡорт ҡурайының "йәшәйеше" хаҡында һүҙ ҡуҙғаттым. Шулай итеп, һүҙ әрме хеҙмәтен үтәп йөрөүсе профессиональ ҡурайсы, Әлшәй районы егете Рөстәм Ғүмәровҡа:**

- Хәрби хеҙмәткә былтыр алындым һәм Новосибирск ҡалаһына эләктем. Хәрби хеҙмәттең үҙ ауырлыҡтары менән бер рәттән, күңелле һәм иҫтәлекле ваҡиғалары күп. Һалдат тормошон минең менән бергә хеҙмәт иткән башҡорт һәм Башҡортостандан килгән башҡа егеттәр бермә-бер еңелләштерә, сөнки сит тарафтарҙа яҡташтарың яҡын туғаныңа әйләнә икән. Шулай уҡ әрмелә лә ҡурайымдан айырылмайым, был минә ҙур рухи терәк. Күңел бошонған саҡтарҙа ҡурайымды ҡулыма алып, бер һыҙҙыртып ебәрһәм, йөрәк ҡанатланып-талпынып китә, үҙемде тыуған яҡтарҙа йөрөгәндәй хис итәм. Ҡурайымдың да әрмегә "алыныуы" ҡыҙыҡ ҡына булды. Әрмегә барғас та анкета тултырттылар һәм минең ҡурайҙа уйнауымды белеп ҡалған бер полковник тиҙ арала тыуған яҡтарҙан ҡурай килтертергә ҡушты. Бактиһәң, минән алда хеҙмәт иткән бер егет тә ҡурайҙа уйнаған һәм уның уйнауы ла, ҡурай моңо ла барыһына ла оҡшап ҡалған икән. Башҡортостандан ҡурай килтерткәс, аҙна һайын концерттарҙа әрме сәхнәһенән ҡурай моңо яңғырай башланы. Быға тиклем ҡурайҙы белмәгән-ишетмәгән башҡа милләт егеттәре йыш ҡына яныма килеп, минең уйнауымды һорай. Улар ҡурайҙы тотоп ҡарай, өрөп маташа, ҡурай хаҡында күберәк белергә тырыша. Ә ҡурай хаҡында һөйләү, тимәк, минең туған халҡым, милләтем тураһында ла мәғлүмәт биреү бит инде ул, сөнки ҡурай менән башҡорт - айырылғыһыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милләт хаҡында уның бер вәкиленә ҡарап ҡына ла фекер йөрөтөргә мөмкин, сөнки тәүге тәьҫорат нәҡ беренсе осраҡтан кешенән сығып билдәләнә. Алыҫ ҡалала, Рәсәйҙең күп төбәгенән йыйылған төрлө милләт егеттәрендә, халҡының ысын улы булған Рөстәмгә ҡарап, башҡорттар тураһында бары тик йылы фекер генә ҡаласағына шик юҡ.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ҠЫШҠЫ УРМАНҒА БАРЫП,

## ихтыяр көсөнә һынау үткәрәйек!

**Ҡышҡы поход тураһында ишеткәнегеҙ бармы һеҙҙең? Булмаһа, әйҙәгеҙ, юлланайыҡ урманға. Ҡышҡы урман үҙенә генә хас матурлыҡҡа эйә. Ул кәйефте күтәрә, илһамландыра. Өшөтә лә, тиһегеҙме? Өшөмәү сараһын күрәйек. Нисек итепме?**

Иң тәүҙә тарихҡа күҙ һалайыҡ. Ололар һөйләүе буйынса, борон ҡышҡы урманда йөҡлау ир-егеттәр өсөн бер проблема ла тыуҙырмаған. Башҡорт йылҡы малы өсөн бесән әҙерләмәгән, быуаҙ бейәләрҙе һәм ҡолондарҙы ғына ҡышҡы көртләп тотҡан. Ә ҡалған йылҡы ҡарҙы соҡоп, көҙҙән ҡалған үлән менән туҡланған. Бер-нисә һыбайлы ир-егет, малай-шалай төндә тибендә йөрөгән йылҡы малын бүренән ҡарауыллаған. Мөмкин тиклем ҙур һәм ҡыҙыу итеп усаҡ яғылған, шунан усаҡтың көлө ситкә һеперелеп, шул урынға ылыҫлы ағас ботаҡтары ваҡлап түшәлгән. Ошондай "түшәктә" толоп ябынып, алмашлап йоҡлай торған булған ир-егет. Шулай ярағлашҡан да инде боронғолар һыуыҡ Урал климатына.

Хәҙер ҡышын урманда йылҡы көтмәйбеҙ, тимәк, урманда йоҡлау ихтыяжы ла юҡ, тип кенә ҡуйыр кемдер. Ә шулай ҙа был гәмәлдең романтикаһы бөрөүҙе лә ҡыҙыҡтырмаймы ни? Ҡыҙыҡтыра икән. Ҡышҡы урман походына - мәңгелек кеүек тойолған тынлыҡ иленә беҙҙе Илнур исемле егет әйҙәмәксе. Күптән түгел генә бер иптәше менән булған ул ҡышҡы урманда.

- Бер иптәшем тәҡдим итте был походҡа барыуҙы, - тип һөйләп китте ул. - Ул үҙе быға тиклем бер-нисә тапҡыр ҡышҡы походҡа сыҡҡаны булған. Барлыҡ кәрәк-яраҡтарҙы - йоҡлар өсөн ҡапсыҡтар, бәләкәй палатканы ла ул үҙе йүнләне...

Шулай итеп, ике йәш егет электричкала Силәбе тарафтарына юллана. Күпмелер юл үткәс, бер станцияла төшөп ҡалып, урман юлы буйлап атлайҙар. 35-40 кг самаһы ауырлыҡтағы ҡапсыҡты алмаш-тилмәш күтәреп, бер-нисә саҡрым юл үтә былар. Бер шишмә буйында палатка ҡоралар. Тирә-яҡтан сытыр ташып, усаҡ яғылғас, бысҡы менән кипкән ағас бысып, утҡа ҡыҙыулыҡ өҫтәйҙәр. Тамаҡ ялғап алғас, кәйеф күтәрелеп китә. Илнур походҡа сығыр алдынан һыуыҡ тейҙергән була. Әммә саф һауала йөрөүҙән һауығып китеренә ышанған егет күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй. Кис еткәс, усаҡ эргәһендәге асығыраҡ урынға сытырҙар түшәп, уның өҫтөнә палатка ҡоралар. Күҙ алдына килтерегеҙ: ҡышҡы урманда бысҡып ҡына усаҡ яна, тып-тыныс. Уның эргәһендәге палатка эсендә махсус ҡапсыҡтарҙа туристар йоҡоға талған. Иртәгәһенә килгән юл буйлап ҡайтырға сығалар. Егеттәрҙең башында бер ниндәй уй ҙа, борсолоу ҙа юҡ: әске донъялары тантаналы һиллек кисерә.

Әйткәндәй, Илнур әлеге походҡа ял итеү өсөн генә түгел, ә үҙендәге икеләнеү, һәлкәүлек, ялҡаулыҡты енер, шулай уҡ ҡыйыулығын, ихтыяр көсөн һынар өсөн дә сығыуы тураһында әйтеп ҡуйҙы. Ҡыҙыҡ. Ә бит беҙ ир-егетлеккә эшендә - уныш, спортта - еңеү, фәндә асыштар яһағандарҙы ғына индерәбеҙ. Ҡышҡы урманда йоҡлау ҙа шул ир-егет ихтыярын һынау алымы түгелме һуң? Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

*ӘРМЕ МАЖАРАЛАРЫ*

# ҮҘ-ҮҘЕНДЕ РАҪЛАУҘЫҢ...

## төрлө ысулы бар

**Мин Калининград өлкәһе Балтийск ҡалаһында дингеҙ пехотаһы ғәскәрҙәренең десант-штурмлау батальонында огнеметсы булып хеҙмәт иттем. Ғәҙәттә, дингеҙ пехотаһына сәләмәт, мөһабәт кәүҙәле, оҙон буйлы егеттәрҙе алалар. Сәләмәтлегем яҡшы булһа ла, буйым башҡаларға ҡарағанда бер-ике башҡа тәпәшерәк булып сыҡты. Шуға баштан уҡ ҡалғандарҙан көсһөҙөрәк түгел икәнемде иҫбат итеп алырға тура килде.**

Бер ваҡыт телевизор ҡарап ултырабыҙ. Чечнялағы ваҡиғаларҙы күрһәтәләр. Егеттәр миңә боролоп ҡараны ла (бөтәһе лә урыҫтар): "Усман, һин дә мосолман бит, тимәк, һин дә террорист, кеше үлтереү һинә лә бер ни тормайҙыр", - тип бәйләнә башланылар бит. Асыулы йөҙҙәренән артабанғы ниәттәре аңлашылып тора. Ҡул көсө менән генә уларға ҡаршы тора алмаясағымды шунда уҡ аңлайым. Һәр береһенең буйы ике метрҙан ашыу. Шул ваҡыт тәүәккәлләнем дә, ярһып, ҡулға автомат алдым: "Эйе, мин мосолман, хәҙер бөтәгеҙҙе лә атып үлтерәм. Тиҙ генә ергә ятырға! Мин шаяртмайым!"- тип ҡысҡырам тегеләргә. Ҡурҡыштарынан ни эшләргә лә белмәне егеттәр. Шау-шыуға командир килеп инде. Аҙактан кәрәгемде бирҙеләр биреүгә. Әммә шунан һуң, Усман менән һаҡ булырға кәрәк, тигән мөнәсәбәт нығынды.

Минең мосолманлыҡтан файҙа ла күрҙеләр аҙаҡтан. Дингеҙ пехотаһы - ерҙә лә, һауала ла, һыуҙа ла эш итеүсе берҙән-бер ғәскәр төрө. Шуға беҙгә күп ерҙәрҙә йөрөргә, сит илдәрҙә күрергә лә насип булды. Бер илдә туҡтағанда бер нисә һалдат менән ҡала күрергә сыҡтыҡ. Һалдат кеҫәһе иң тәүҙә ризыҡҡа төшә бит инде. Беҙ ҙә юлыбыҙҙа осраған тәүге кафеға инеп сығырға булдыҡ. Кафеның хужаһы ғәрәп булып сыҡты. Минең мосолман икәнемде белеп ҡалды ла, ҡайҙан килеүемде һораша башланы. Башҡортостандан булыуымды белеп ҡалғас, ҡыуанды, республикабыҙ тураһында ишетеп тә, уҡып та белеүе тураһында әйтте. Беҙҙе тәмле ризыҡтары менән һыйлап, бер тин аҡса алмай, хөрмәтләп оҙатып ҡалды. Батальонға ҡайтҡас, был хәлде егеттәр шатлана-шатлана ҡалғандарға һөйләне. Минең абруй китте күтәрелеп.

Мажаралар күп булды инде ул. Ә шулай ҙа ошо хәлдәр иҫтә ныҡ ҡалған. Быныһы ситтәр араһында үҙ-үҙеңде мосолман булараҡ та, башҡа милләт вәкиле булараҡ та раҫлауҙың бер миҫалы бит инде.

**Тамъян УСМАНОВ. Учалы ҡалаһы.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Атеросклероз



**Энәлек (боярышник)** артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә, яҡшы йоҡлата. Ул йөрәк мускулын яҡшырта, ҡан әйләнешен көсәйтә, тын ҡыҫылыуҙы, йөрәктең йыш тибеүен, баш әйләнеүен кәметә. Энәлектән яһалған препараттарҙы ҡулланыу (бигерәк тә климакс осоронда) атеросклерозды дауалауҙа яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Бының өсөн уны даими ҡулланырға кәрәк.

**Энәлек сәскәләре төнәтмәһе.** 1ҡалаҡ сәскәне 1 стакан ҡайнар һыуҙа 15 минут төнәтергә. Ашар алдынан йылы көйөнсә өс тапҡыр эсергә.

**Энәлек емештәре төнәтмәһе.** 20 грамм энәлек емештәренә (киптерелгән булһа ла ярай) 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтергә һәм 5 минут ҡайнатырға. Ашар һәм йоҡлар алдынан 200 мл төнәтмә эсергә.

**Энәлек емештәре экстракты.** 1 стакан емешкә 500 мл ҡайнаған һыу, 2 ҡалаҡ шәкәр һалып, һүрән утта 40 минут ҡайнатырға. Һыу яртылаш кәмергә тейеш. Килеп сыҡҡан массаны һөҙөп тормайынса, һыуыҡта һаҡларға. Ашар алдынан 1 ҡалаҡ, йоҡлар алдынан 2-шәр ҡалаҡлап эсергә. Көҙ көнө был емештәрҙән файҙалы ризыҡ әҙерләргә мөмкин. Бының өсөн 0,8 кг шәкәрҙе 20 грамм лимон кислотаһы менән болғатырға һәм 1 кг энәлек емеше һалып иҙергә. Емештәрҙе быяла банкаға тултырырға, өҫтөнә шәкәр һибергә һәм спиртка тығып алынған ҡағыҙ өҫтөнән быяла ҡапҡас менән ябырға. Банканы һыуыҡта һаҡларға. Ҡыш буйына был тәмле "ҡайнатма" менән сәй эсегеҙ һәм шул уҡ ваҡытта һаулығығыҙҙы ла нығытырһығыҙ.

**Шалфей (йылан тамыры)** - атеросклерозды дауалау өсөн бик файҙалы. Әммә уны оҙайлы ваҡыт ҡулланырға ярамай, ул ашҡаҙандың лайлалы тиресәһенә тәьҫир итә һәм уны ҡуҙғыта. Шуға ла шалфейҙы башҡа үләндәр менән бергә ҡулланыу яҡшыраҡ: 90 грамм шалфей, 800 мл араҡы һәм 400 мл һыуҙы ябыҡ быяла һауытта 40 көн яҡтыла тоторға. Иртән яртылаш һыу менән шыйыҡландырып, 1 ҡалаҡ төнәтмәне ашар алдынан эсергә. Был төнәтмә оло кешеләргә нервылар системаһына көс биреү өсөн ҡулланыла. Киптерелгән шалфей бер йыл үткәндән һуң үҙенең файҙалы сифаттарын юғалта.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ Аҫалы балаҫ, матур итеп ҡоралған түшәктәр йәйелгән урындыҡ өҫтөндә ап-аҡ һаҡаллы, түбәтәйле, кәзәкейле Сәлих бабай ултыра. Тәҙрә төптәрендә гөлдәр гөрләп сәскә атҡан. Нағышлы тәҙрә пәрҙәләренән дә сафлыҡ бөркөлә.



ҺАБАҠТАР



# ҒҮМЕР БУЙЫ ӨЙРӘНӘБЕҘ

## Нурлы йорт

**Беҙ бәләкәйерәк саҡта кешеләр ҙә "бәләкәйерәк", йәғни ябайыраҡ, бер-береһенә ҡарата изгелеклерәк һымаҡ ине. Хәҙер ҡоймалар ҙа, ҡапҡалар ҙа бейегерәк, көнитмешебеҙ ҙә яҡшыраҡ, ризыҡ та мул. Унының ҡарауы, изгелек кәмегәндәй, күңелдәр тарығайғандай, ҡатыланғандай...**

...Беҙҙең күршелә бик ҡотло бер йорт булды. Йомабикә инәй менән Сәлих бабайҙыҡы ине ул. Тыштан дә, эстән дә бик ҡупшы, йыйнаҡ һәм таҙа була торғайны ул өй. Ингәндән инге генә килеп торор ине. Ысын-ысындан нурлы, ҡотло йорт. Унының бер яғында буйынан-буйына урындыҡ. Урындыҡтың бер ситендә аллы-гөллө ҡаралды - аҫалы балаҫтар, ҡорамалы түшәктәр, эре биҙәкле тыштар кейҙерелгән мендәрҙәр өйөлгән һандыҡ. Аҫалы балаҫ, матур итеп ҡоралған түшәктәр йәйелгән урындыҡ өҫтөндә ап-аҡ һаҡаллы, түбәтәйле, кәзәкейле Сәлих бабай ултыра. Һәр кесаҙнала әсәйем апайым менән икебеҙҙе таҙа итеп кейендереп, 10 йәки 15 тинлек аҡсалар тоттороп, шул йортҡа хәйер бирергә индерә. Намаҙын ҡалдырмаған, дини йолалар башҡарған Сәлих бабай саҙаҡаны ҡабул итеп, доға ҡыла, унан башыбыҙҙан һыйпап, сәс араларына өрә. Беҙгә шул тиклем рәхәт... Йомабикә инәй бәлеш телеме йә май һыланған икмәк тоттора һала. Ҡулды буш сығармай.

Йорттоң төпкө яғындағы мейес үҙе бер сәнғәт әҫәре кеүек - ҡәҙимгесә дүрткел түгел, өсмөйөш һымағыраҡ ине ул. Шәм, самауыр ултырта торған урындары ла бар. Ә мейес үҙе ап-аҡ, күҙ сағылмалы. Өй сынъяһау итеп йыйыштырыла. Тәҙрә төптәрендә гөлдәр гөрләп сәскә атҡан. Нағышлы тәҙрә пәрҙәләренән дә сафлыҡ бөркөлә. Йомабикә инәйҙең өҫтөндә лә һәр ваҡыт әллә нисә япмалы матур биҙәкле күлдәк. Яулыҡты һәр ваҡыт яҙып ябынып ине.

Быларҙы һөйләүем әлеге лә баяғы күңел киңлегенә, изгелек төшөнсәһенә бәйле бер ишеткәнемә барып тоташтырыу өсөн. Инәй менән бабайҙың килендәре Таңһылыу еңгәйҙең һүҙ ыңғайында ғына ҡушып ебәргән бер кәлимә һүҙе сәбәпсе булды ҡәләмгә тотонорға. Шул иҫемә төшкән һайын Сәлих бабай менән Йомабикә инәйгә ҡарата ихтирамым нығына ғына.

- Ҡәйнәмдәр менән бергә йәшәгәндә, аш бешерһәк, ҡәйнәм бер сеүәтә ашты айырып, мейес плитәһе өҫтөнә ултыртып ҡуя торғайны. Килен, был аш ошонда ултырһын, Хәжирә (минең әсәйем) һыуыҡта арып, асығып эштән ҡайтып барһа, тәҙрә шаҡып индерербеҙ, үҙәк ялғап, һурпа эсә һалып сығыр, исмаһам, ауыр эштә эшләй бит, ти торғайны, - тигәйне күрше еңгәй.

Ошо бөйөк ябайлыҡ хәтеремдән сыҡмай... Әсәйем ул мәлдәрҙә фермала эшләй торғайны. Ҡышҡы сатлама һыуыҡта ла резина итек кейеп, ферманан сәсәй-сәсәй ҡайтып ингән мәлдәре хәтерҙә. Хәйер, өйгә ингәнгә тиклем ҡураһындағы ишле малын ҡарап, уларға бесән һалып, һыу эсереп өлгөрә. Ауыл ерендә яңғыҙ донъя көтөүҙәре, ай-һай, ауыр булғандыр. Ғаилә лә ишле генә, биш бала бер әсәйгә ҡарап тора.

Бер мәлде әсәйемдең сусҡа бәрәсе һатып алғаны хәтерҙә. Файҙа күрҙекме-юҡмы, унының миңә ҡараңғы. Ләкин Сәлих бабайҙың әсәйемә: "Сусҡа аҫырама, һиңә ярамай", - тигәнен ишетеп ҡалдым. Күрәҙәлеге лә булдымы икән бабайҙың, сөнки әсәйем, шөкөр, олоғая килә дин юлында.

...Теге нурлы йорт хәҙер юҡ инде. Ләкин ул өй ҙә, унда йәшәгән изге күңелле кешеләр ҙә минең күңелемдә йәшәй. Эйе, өйҙәр бәләкәйерәк булһа ла, күңелдәр бөйөгөрәк булған икән элегерәк, тип уйлап ҡуям...

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**

**(Дауамы бар).**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# БӘЛТЕРӘГӘН ЕГЕТТӘН...

## рәтле һалдат сыҡмай шул...

**Ауылдан килеп, сәй эсергә ингән бер ағай менән телевизор ҡарап ултырабыҙ. Бер мәлде һалдатҡа китергә әҙерләнгән егеттәрҙе күрһәтә башланылар. Экранға теклəп торҙо ла телгә килде ауылдашым:**



- Кит, бынауы малай-шалайҙар ҡайһылай ябыҡ, сәпсим быстыҡ ҡыналар, - тине әлегеләй тапшырыуҙы беренсе тапҡыр күргәндәй. Беҙҙең тирәлә "быстыҡ" һүҙе үтә лә бәләкәй, ныҡ сибек тигәнде аңлата. - Шулар ҙа булдымы ил һаҡсыһы! Турникта ике тапҡыр күтәрелеп, метр ярымға ла һикерә алмаған ошо егет йораттарынан ни көтәһең...

Мин өндәшеүен өндәшмәйем, тик барыбер унының ише эстән генә үҙ баһамды биреп ултырам. Хәҙер бит хеҙмәткә саҡырылыуҙы егеттәрҙе частарына йыйылыу пунктында уҡ кейендереп оҙаталар. Бына әлеге "быстыҡ"тар үҙҙәренә тәғәйен һалдат формаһын һайлап алып, кейенә башланы. Күптәренә ул кейем ҙур булып сыҡты - еңе-балаҡтары һәлпелдәп, аҫылынып тора. Ауылдашым тел шартлатып, башын сайҡаны ла тағы мыҫҡыллы көлөп ҡуйҙы. Минең: "Бәй, кейемде ҡайһылай ҙур итеп теккәндәр бит әле", - тиеүемә, ағай былай тине:

- Ай-һай, хикмәт кейемдә түгелдер ул, ҡустым. Бер журналда уҡығайным. Баҡтиһәң, һалдат кейеменең дә үҙ стандарты бар, 18 йәштәгеләргә иҫәп тотоп, форманы таманлап тегәләр икән. Ваҡытында беҙ ҙә кейҙек бит һалдат кейемен. Беҙҙең заманда салбар-гимнастерка былай кеше ҡурҡытырлыҡ булмай торғайны. Кәүҙәң хөрт, тәнеңдә ит йораты, беләктә мускул булмағас, кейемгә генә һылтап булмай шул...

Эйе, ағай хаҡлы. Мин әле 50-60-сы йылдарҙа уҡ оҙон буйлы, киң күкрәкле ауылдаш ағайҙарҙың егет ҡорона инеп хеҙмәткә киткәнен, аҙаҡ армиянан ир ҡорона инеп ҡайтып төшкәнен хәтерләйем. Һалдаттың исеме есеменә тап килеүҙең дә үҙ сәбәптәре, нигеҙҙәре булғандыр. Ауылдыҡылар ғына түгел, хатта ҡала үҫмерҙәре лә йәш кешегә тейеш булған, өлөшөнә төшкән эштәрҙе эшләп, ауырлыҡтар алдында баш эймәҫкә, ҡойолоп төшмәҫкә өйрәнеп, сынығып китерҙәр ине ил һаҡларға. Етмешенсе, хатта һикһәненсе йылдар баштарында хеҙмәткә саҡырылған быуындың өлөшөнә лә яҙҙы әлеге сынығыуҙар. Маҡсат тыуҙырҙы был мөхитте. Алға китеп булһа ла, шуны әйтеп ҡуяйым. Элекке быуын егеттәре бала саҡтан уҡ күңелдәренә, хеҙмәткә барабыҙ, ул мотлаҡ бурыс, ир кеше өсөн зарури, тигән уйҙы һалды, ә һуңғы йылдарҙағы үҫмерҙәрҙең башында бер генә хәстәр - нисек тә хеҙмәткә бармау, тиҫтәләгән сәбәбен, сараларын табып ҡотолоу! Шуға ҡарап, ынтылыш та башҡаса: оло һынауға әҙерләнеү юҡ, сынығыу, ихтыяр көсө тәрбиәләү хаҡында әйтеп тә тормайбыҙ инде...

Ауылдашымдың һүҙенә тағы кире ҡайтайыҡ. Әлегеләй сабый сырайлы, ата-әсә ярҙамынан башҡа бер аҙым яһамаған, яһағанда ла ҡулынан килмәгән, үҙ аллы ҡарар ҡабул итеүҙән йыраҡ, сибек, "быстыҡ" егеттәр ҡайҙан килә һуң? Ҡайҙан булһын, шул үҙебеҙҙең ғаиләләрҙә тәрбиәләнә, балалар баҡсаларына йөрөй, мәктәптәребеҙҙә уҡый. Бер зат та уларҙы йыһандан килтереп ташлап китмәгән бит.

Бер-ике йылдан ил һаҡларға китәсәк үҫмерҙәрҙең классик һынын һүрәтләйек. Кәүҙә, һын, тән ағзалары тотошо - йыл әйләнәһенә бер төрлө булыр. Мәҫәлән, кәүҙә муйын тәңгәленән бөкөрәйгән, ҡулбаш төшөп, ҡулдар аҫҡа һәленеп, һәр саҡ аҫылынып тора. Әйткәндәй, ҡул йәйен күлдәк, ҡышын куртка ендәренән сыҡмай. Ул ҡулдарға һелтәнеү, ҡәҙимге хәрәкәт итеү бәхете татымаҫ - ул бахыр ағзаларҙың кеҫәләргә кереү хоҡуғы ғына бар. Атлап йөрөүҙәре айыуҙарҙыҡына тартым. Хәҙерге быуын үҫмерҙәре өсөн ашығыу, ҡабаланыу, нимәгә булһа ла энергия сарыфлау - аҡылһыҙлыҡ иҫәбендә, үткән заман ҡалдығы. Нишләп ашыҡһындар инде, улар өсөн ата-әсәләре, туған-тыумасалары йүгерешә, ут йота. Йөҙ-йөҙ илле метр араны атлап үтеү - оло проблема, йәйәү йөрөү - үлемескә, оло ҡазаға бәрәбәр хәл...

Һис кенә лә үҫмерҙәрҙең, йәш егеттәрҙең барыһы бер ҡалыптан, заман шауҡымының ҡолдары, тип әйтергә йыйынмайбыҙ. Бынамын тигән үҫмерҙәребеҙ, йөрөгән ерҙәрендә ут сығарған егеттәребеҙ ҙә бихисап, дандарын да ишетеп, күреп йөрөйбөҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тәүгеләре күберәк, хәл-торошто ла шулары билдәләй, йәштәргә лә баһа әлегеләренә ҡарап бирелә шул.

Фекеребеҙҙе тағы ла "быстыҡ" үҫмерҙәргә төбәйек. Ғаиләнән башҡа физик күнекмәләрҙе балалар баҡсалары ла, мәктәптәр ҙә бирергә тейеш, буласаҡ һалдат үҫтереү ҙә уларға ҡағыла, тигән талап ҡуйырға ла өйрәнгәнбеҙ. Хаҡлыҡ юҡ түгел, әммә ғаиләлә алынмаған күнекмәләрҙе, физик камиллыҡҡа ынтылышты һуңғылары атҡара алырмы? Үтәүен үтәр, тик һәммәһе лә мәжбүрләүгә, ҡаты талапҡа ҡоролор, йәғни ихтыярһыҙлыҡҡа нигеҙләнгән сараның файҙаһы ла, фәтеүәһе лә булмаҫтыр. Халыҡ әйтмешләй, көсләп астырған күҙҙең нуры юҡ...

Мәктәптәрҙәге аҙнаһына бер-ике тапҡыр үткәрелгән физкультура дәрестәренә ышаныу ҙа бер ҡатлылыҡ ҡына. Дәрестәре дәрес

*✓ Юрматылар үҙҙәренең бик боронғо сарматтарға барып тоташыусы башҡорт ырыуынан икәнлектәрен белеп, быының менән ғорурланып йәшәһендәр ине, тип әйткем килә һүҙемде йомғаҡлап.*

кеүек үтеп, балалар көс сарыф итһә, тәндәрен яҙһа, хәрәкәттәре йәненә файҙа килтерһә, бер хәл әле. Мәктәптәге ир балалар, һалдат буласаҡ үҫмерҙәр физкультура дәрестәрендә, был миңә бер нисә йылдан кәрәк буласаҡ, тип шөғөлләнә тиһегеҙме? Ауылдашым әйтмешләй, үҫмерҙәр турникта бер-ике тартылырға, йөҙ-йөҙ илле метр араны саңғыла үтергә йыбанышып, бала-саға ҡулынан килер оҙонлоҡҡа, бейеклеккә һикерергә дәрт таба алмай торғанда, ысын һалдат, илең һаҡсыһы хаҡында борсолмай булмай.

Наркотик, эскелек, тәмәке тартыу ише алама ғәҙәт, шаҡшы ҡылыҡтарҙың буласаҡ һалдаттың һушын алыуы, организмының үҫеүен тотҡарлауы, психикаһын ҡаҡшатыуы хаҡында меңәрләгән миҫалдар килтерергә, тикшереүҙәргә нигеҙләнеп иҫбатларға мөмкин. Хәрби форма кейерҙән ун йыл алда уҡ һыра һемергән, асыҡтан-асыҡ тәмәке көйрәткән, араҡынан ауыҙ итергә өлгөргән үҫмерҙән ниндәй ил һаҡсыһы сыҡһын инде?..

Тәмәке тигәндәй, тағы бер күҙәтеүемде гәзит уҡыусы хөкөмөнә сығарайым әле. Мин йәшәгән йорт эргәһендә профессиональ училище урынлашҡан. Уҡыу корпусы мөйөшөндә яҙын-көҙөн, ҡышын тәмәке борҡотҡан ун дүрт-ун биш йәшлек үҫмерҙәрҙе егерме биш йылдан ашыу күҙәтәм. Тәнәфес һайын өйкөлөшөп, йүгереп килеп сығалар ҙа саф һауа һуларға бирелгән ваҡытта үпкәләренә ағыу тултырып, кире инеп китәләр. Йылы мәлдә ярар ҙа, ә бына ҡышҡы һалҡындарҙа бөкөрәйешеп, күгәрешеп торалар...Шул ваҡыт арауығында нисә мең ҡап тәмәке тартылыуын, күпме бала, егет үпкәһен ағыулауын күҙаллағанда ғына ла сәстәрең үрә торор. Иң аптыратҡаны шул: сирек быуат эсендә бер генә педагог та, мастер ҙа уларҙы сығып киҫәтмәне, тыйманы...

Бөгөн "бәлтерәгән" һалдат проблемаһын күтәргәндә, унының физик әҙерлеге, психологик, һаулыҡ торошо хаҡында һөйләгәндә, ғәйепте ата-әсәгә, ғаиләгә генә түгел, дәүләткә лә һылтарға тейешбеҙҙер. Һеҙҙең ғаиләлә ир-ат, буласаҡ һалдат, ил һаҡсыһы үҫә икән, тип, дәүләт тарафынан унының йән-тән сәләмәтлеген, һаулығын һаҡлау, аҡыл камиллығын үҫтереү буйынса хәстәрлек күрһәтелгәне бармы? Ҡыҙғаныска ҡаршы, бер ғаиләнән дә һеҙ ыңғай яуап ала алмаҫһығыҙ. Тамағы рәтләп туймаған, юҡлыҡ, мохтажлыҡ арҡаһында һәрҙәйем көсөргәнешлек тойған, аҙмы-күпме кеҫә аҡсаһы эшләүҙән, үҙ көсөн файҙаға, изгелеккә сарыф итеүҙән мәхрүм егеттең үҙ иленең патриоты булырына, хеҙмәт ише мөҡәддәс бурысына мөкиббән китеүенә, билләһи, шикләнәм мин. Иленә һөйөү тойғоһонан алда дәүләт яғынан башҡасараҡ хәлдәрҙең, мәсьәләләрҙең ыңғай хәл ителеше зарури бит әле. Шул саҡтарҙа ғына, бәлки, һалдат хеҙмәте ауыр йөк, ғаиләгә килер хәсрәт булыуҙан туҡтап, изге, маҡтаулы бурысҡа әүерелер...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фекерҙәремде ил һаҡлаған һәм һаҡлаясаҡ ир-егеттәрҙе кәмһеткәндән әйтмәнем, ә фәҡәт дөрөҫлөктөң күҙенә ҡарарға батырсылыҡ итеүем. Һалдат булырға өлгөргәндәр минең фекерҙәремә ҡул ҡуйыр, моғайын. Йәшермәйек, илебеҙгә, ысынлап та, бәлтерәгән, хәлһеҙ, йәнен саҡ аҫраған түгел, ә ҡыйыу, физик яҡтан көслө, камил аҡыллы, иң мөһиме, ысын патриот һалдат кәрәк. Заман быны үҙе талап итә...**

**Юнир КИНЙӘБАЕВ.**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# ЮРМАТЫЛАРМЫ?

## Шул уҡ сарматтар улар!

**Яңыраҡ булған бер һөйләшеү юрматылар тураһындағы ошо мәҡәләне яҙырға сәбәпсе булды. Әңгәмәсемдең, Өфөлә тыуып үҫкән урыҫ телле башҡорт егетенең ата-әсәләре Ишембай районынан, шуға был егет тә үҙен юрматы башҡорто һанай. Әле һуңғы күрешкәндә юрматылар тураһында һүҙ сыҡты ла, әңгәмәсем үҙҙәренең ырыуының сығышын венгрҙар менән бәйләп ҡуйҙы. "Был мәғлүмәттәр ҡайҙан?" тигән һорауыма бер ниндәй дәлилһеҙ: "Был ни, күптән билдәле инде", - тип яуапланы.**

"Юрматыларҙың ата-бабалары уғыр телле мадъярҙар", тигән ҡараш һуңғы дәүерҙәрҙә тыуған миф ул. XVIII быуат аҙаҡтарында, бигерәк тә XIX быуатта мадъярҙар буржуаз милләт булараҡ ойоша башлағас, уларҙа милли үҙаң ныҡ көсәйә һәм улар үҙҙәренең тамырҙарын юллай башлай. Боронғо яҙмаларҙа һаҡланған мәғлүмәттәргә таянып, уларҙың ғалимдары үҙҙәренең эҙҙәрен табырға тырышып, башҡорттар араһына ла килеп сыға. Сөнки мадъяр халҡын ойоштороуҙа ҡатнашҡан ете ырыуҙың береһе "дьярмат" тип аталған була. Ошо "дьярмат"тың башҡорттоң юрматыһы менән бәйле булыу ихтималлығы "башҡорттоң юрматыһы уғыр телле мадъяр сығышлы булған", тигән хата ҡарашты формалаштыра. Ысынында иһә, хәл бөтөнләй икенсерәк булғандыр, тип уйларға урын бар. Мадъярҙарҙың формалашыуында ҡатнашҡан дьярматтарҙы "башҡорт телле боронғо башҡорт ырыуы", тип ҡарарға кәрәктер. Улар тағы бер нисә башҡорт ырыуы менән бергә хәҙерге Венгрияға барып сығып, мадъяр халҡын формалаштырыуҙа ҡатнашып, христиан диненә күсеп, мадъярҙар араһында юҡҡа сығалар. Хәҙер "Венгрия" тигән илдә уларҙың булғанлығына "Дьярмат" тигән бер нисә ер-һыу атамаһы һәм боронғо венгр ҡулъяҙмалары ғына ишара. Был дьярматтар (юрматылар) иң боронғо башҡорт ҡәбиләләре булып, сығыштары беҙҙең дәүерҙәргә тиклем үк Көньяҡ Уралда, уға яҡын ерҙәрҙә көн күргән иран телле ҡеүәтле сарматтарға барып тоташалыр. Көньяҡ Уралда төрки телле ырыуҙар күбәйеп, юрматыларҙың ата-бабалары ла төрки теленә күсә һәм башҡорт халҡын формалашыуҙа ҡатнашҡан иң эре ҡәбиләләрҙең береһе булып тора. Ана шул төрки телле дьярматтар (юрматылар) мадъяр халҡын формалаштырыуҙа ҡатнашалар һәм хәҙерге телсе ғалимдарҙың "мадъяр телендә 800-ҙән артыҡ сыуаш теленә тартымыраҡ төрки һүҙе бар", тигәнен "Ул һүҙҙәр боронғо башҡорттарҙан, шул иҫәптән юрматыларҙан да ҡалған", тип аңларға кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта, телсе ғалимдар күпме генә тырышмаһын, башҡорт телендә мадъяр һүҙҙәрен әлегәсә тапҡандары юҡ. Был нимә тураһында һөйләй һуң? Тимәк, "башҡорттоң формалашыуында уғыр телле мадъярҙар ҡатнашҡан", тигән ҡарашты әле иҫбатланмаған бер уйҙырма ғына тип ҡарарға кәрәк.

Боронғо замандарҙа башҡорттарҙың Венгрияла булыуы бер кем тарафынан шик аҫтына алынмаған тарихи факт. Быны бөтәһе лә таный. Ошо тарихи факттарҙы баштүбән әйләндереп, дөрөҫ аңламау арҡаһында башҡорт юрматыларын мадъяр телле яһап ҡуйҙылар һәм был мифик ҡараш әле булһа йәшәүен дауам итә. Ысынында иһә, беҙҙең юрматылар тамырҙары боронғо сарматтарға барып тоташыусы бик боронғо ырыу. Быға дәлил рәүешендә уларҙың ер-һыу атамаларының ҡайһы берҙәренә иғтибар итергә була.

Мәҫәлән, йырҙарҙа данланған Һәләүек йылғаһының атамаһы боронғо Иранда батшалыҡ иткән беҙ урыҫсанан "Селевкиды" тип уҡып белгән батшалар династияһының исеме менән бер мәғәнәләлер. Шулай уҡ "Ашҡаҙар" атамаһын да иран телдәренән аңлатып була. Иран теле белгестәренең хеҙмәттәренән күренеүенсә, был һүҙҙең бөтә билдәле мәғәнәләре лә шундай: ниндәйҙер бер хәбәр, мәғлүмәт менән һыбай сабыусы, илсе, хәбәр ташыусы хеҙмәтен башҡарыусылар туҡтап ат алмаштыра торған урын, йәиһә йылға кисеүе. Билдәле булыуынса, Стәрлетамаҡ ҡалаһы Ырымбур яғынан Өфө тарафына илткән бик боронғо юлда урынлашҡан. Шуға күрә, Ашҡаҙар буйында сапҡын сабыусылар туҡтап ял иткәндәрҙер, тип уйларға була. Стәрлетамаҡ ҡалаһына исем биргән "Эстәрле" - "Стәрле" йылғаһының мәғәнәһе лә иран телдәренән бик анһат аңлатыла икән. Был һүҙ иран (мәҫәлән, боронғо авеста, парфяндар, пехлеви, яңы фарсы) телдәренән "эре мал", "ат йәиһә дөйә кеүек менеп йөрөй торған мал", "эшсе мал", "йылҡы малы" тигән мәғәнәләр менән бәйле. Ишембай ҡалаһы аша ағып ятыусы Тәйрүк йылғаһының атамаһын да иран телдәренән аңлатырға була. "Тай, дай" тигән өлөшө һинд-иран телдәрендә "һыу" тигәнде аңлатһа, "рух, рукс" тигәне "саф, таҙа" тигән мәғәнәне бирә. Йәғни, "Тәйрүк" "саф, таҙа һыу" була хәҙерге телебеҙгә әйләндергәндә.

Ә боронғо "сармат" атамаһы нисек итеп "юрматы"ға әйләнеп киткән һуң, тигән һорауға тел ҡанундары яуап бирәлер. Телдә й-ж-дж-дь-ч-с өндәре алмашыныу күренеше бар. Ошонан сығып һүҙ йөрөткәндә, "сармат" та, "юрматы" ла фонетик яңғырашы төрлөсәрәк булған бер үк атамалыр һәм "сармат"тың "йорматы", "юрматы" формаһы булыуы аңлашыла. Бында икенсе нәмәне лә онотторға ярамай. Тарихсылар "сармат" тип атап йөрөткән халыҡ үҙен нисек атаған, беҙ быны белмәйбеҙ. Уларҙы беҙ "сармат" тип боронғо антик авторҙарға эйәреп атайбыҙ. Бәлки, беҙ "сармат" тип атап йөрөткән ҡәүем үҙен тап башҡортса "юрматы" тип атағандыр? Әлбиттә, бәләкәй генә гәзит мәҡәләһендә сарматтарҙың, юрматыларҙың ҡатмарлы тарихын яҡтыртып бөтөп булмай. Был бәхәсһеҙ. Башҡорттоң формалашыуында ҡатнашҡан боронғо сармат (юрматы) ҡәүеменең тарихы ныҡлап өйрәнеүҙе көтә. Был бәләкәй генә мәҡәлә иһә, "юрматылар фин-уғыр сығышлы булған" тигән фәнни яҡтан бөтөнләй иҫбат ителмәгән, бер ниндәй дәлилһеҙ ялған ҡараштың халыҡ араһында таралып, нығыныуына борсолоп, яуап формаһында яҙылды. Тарихи ысынбарлыҡ, әгәр ныҡлап эҙләнһәң, бөтөнләй икенсе төрлөрәк икән дә. Юрматылар үҙҙәренең бик боронғо сарматтарға барып тоташыусы башҡорт ырыуынан икәнлектәрен белеп, быының менән ғорурланып йәшәһендәр ине, тип әйткем килә һүҙемде йомғаҡлап.

**Закирйән ӘМИНЕВ, ғилми хеҙмәткәр.**



Плюшар А.А. "Башҡорттарҙың бөркөт һунары", 1938й.

# ЯЛҒАНҒА дөрөҫлөктө яҡлаһаң -

**Беҙҙең редакцияға килгән кеше мотлаҡ журналистарыбыҙ менән аралашып, сәй эсеп, донъя хәлдәре тураһындағы гәбе, фекерҙәре менән уртаҡлашып сығып китә. Был беҙҙең йолабыҙға әйләнгән. Әле бына Бөрйән районынан халыҡ табибы Марат Ишмөхәмәтов килгәс тә ир-егеттәребеҙ уның тирәләй йыйылып, уға әллә күпме һорауҙар биреп, гәп ҡороп ебәрҙе. Сәләмәтлек, халыҡ медицинаһы алымдары тураһындағы һорауҙарына яуап алып бөткәс, ир-егеттәрҙең һөйләшеүе тағы ла етдиерәк темаларға төшөп китте. Уларҙың ир-егеттең көсө һәм көсһөҙлөгө, ирҙәр дуҫлығы һәм башҡа донъяуи һорауҙар буйынса әңгәмәһен 23 февраль байрамы алдынан сығарылған ошо һанда уҡыусыларыбыҙға ла тәҡдим итергә булдыҡ. Әйҙәгеҙ, тыңлайыҡ.**

**Артур Батыршин:** Ир-егетте көслө зат, тиҙәр. Ғөмүмән, көслө зат тигән төшөнсәгә нимә инә һуң? Минеңсә, көслө ир-егет үҙ өлгөһөндә башҡаларҙы файҙалы эшкә, изгелеккә йәлеп итә алыусы, йәғни уға ҡарап, башҡаларҙа ла "Уның кеүек булһаң ине!" тигән теләк тыуырға тейеш. Шулай уҡ көслө зат рәтенә мин үҙендә тормош ауырлыҡтарын йырып сығырлыҡ рухи көс табыусыны, аңлы, айыҡ ҡарашлы һәм үҙенең фекерен кешегә аңлата һәм шуға ышандыра алған ир-егетте индерәм. Үҙенең тәртипле, тәрбиәле, дәрәжәле һәм абруйлы йәшәү рәүеше, матур ғаилә тормошо менән башҡа ир-атҡа өлгө булырҙай уҙаман - ул һис шикһеҙ көслө зат. Йәғни ир-ат ни тиклем көслө - ул шул тиклем бәхетле.

**Илгиз Ишбулатов:** Үҙенә алмашҡа ысын ир-егет тәрбиәләп үҫтергән кешене көслөләр рәтенә индерәм. Шулай уҡ тормоштағы төрлө ваҡиға һәм хәлдәргә объектив баһа бирә белгән ир-егет тә көслө, ә был һәләттең юҡлығы иһә унда физик һәм рухи көстөң самалы булыуы хаҡында һөйләй. Ғөмүмән, беҙҙең халыҡ "Ир" һүҙенә бик һаҡ ҡарай һәм һирәктәргә генә был исемде хаҡлы рәүештә күтәреп йөрөү бәхете тейә. "Ир йә бар, йә юҡ", тигән ҡаты, ләкин ғәҙел әйтелгән һүҙҙәр тулыһынса был һорауға яуап бирә, тип уйлайым.

**Әхмәр Үтәбай:** Илгиздең фекерен дауам итеп, шундай миҫал килтергем килә. Үҙ заманында мәҙрәсәһе булған, әллә күпме магазин тотҡан, шәкерттәрен үҙ иҫәбенә ашатып-эсереп уҡытҡан Зәйнулла Рәсүлевтың 67 йәшендә дүртенсе ҡатынынан кинйә улы тыуған. Бына ошо миҫалдан сығып ҡарағанда, үҙенең интеллектуаль, рухи һәм физик көстәр гармонияһында олоғайған ир кешене көслө ир-ат, тип әйтергә була. Ошо өс күрһәткестең береһе юҡҡа сыҡһа, ҡалғандары ла юғала.

**Мөнир Иҡсанов:** Ир кешенең көсө, тәү сиратта, башҡарған эшендә сағыла. Шуға ирҙәрҙең көсөн холҡона, тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап түгел, ә бары тик эшләгән эштәренән сығып ҡына баһаларға мөмкин. Ләкин эше ни тиклем бөйөк булып та, кешегә зыян килтерә икән, уның башҡарыусыһын "Көслө кеше" тип әйтә алмаҫ инем. Көс тигән һүҙгә тик ыңғай, яҡшы мәғәнә һалырға кәрәктер. Көслө ир-егеттән изге эштәр генә көтөргә мөмкин. Беҙҙең өсөн иң сағыу, өлгө алырлыҡ, идеаль образ - ул Урал батыр.

**Марат Ишмөхәмәтов:** Ә хәҙер мин һеҙгә ирҙәр көсө тураһында икенсерәк, физиологик юҫыҡта аңлатып үтәйем. Тәү сиратта, ирҙәрҙең көсө өсөн тестостерон "яуаплы" һәм ул ир-егеттә булған энергияның ҡайһы тарафҡа йүнәләсәген һәм үҫәсәген билдәләй. Организмдағы тестостерон ир-егеттәргә ниндәйҙер бейеклеккә күтәрелергә ярҙам итә, алға хәрәкәт иттерә, әйҙәй, ҡатын-ҡыҙ күңелен яулау мөмкинлеге бирә, яуызлыҡ һәм изгелектең башында тора. Тестостероны етерлек кимәлдә булған ир-егет тәбиғәте менән тотороҡло, үҙ аҡылында, үҙ-үҙен тота белә - былар көслөлөк билдәһе лә инде.

**Әхмәр Үтәбай:** Был һүҙҙәр менән килешәм, йәғни ир-егеттәр физик көскә, юғары аҡылға, ғилемгә йәки башҡа төрлө үҙенсәлеккә эйә булып та, уларҙа нәҫел дауам итеү көсө булмаһа, алда һанап үтелгән көстәрҙең бар ҡиммәте юғала.

**Марат Ишмөхәмәтов:** Шулай уҡ ир-аттың көслөлөгө гендар тарафынан да билдәләнә. Йәғни, тейешле тәрбиәлә бар яҡтан да көслө ир булып үҫеүгә ҙур йоғонто яһай.

**Мөнир Иҡсанов:** Бында тағы ла бер сифатты әйтергә була. Ул - юморҙы аңлап ҡабул итеү, шуҡлыҡ, шаянлыҡ. Был сифат кешенең оптимист булыуын, күберәк аҡ донъяға тартылыуын, ышаныслы булыуын күрһәтә, ә ышаныслы булыу көслөлөктән килә.

**Илгиз Ишбулатов:** Ҡайһы берәүҙәр буталсыҡ ваҡиғалар араһында иң мөһимдәрен һайлап, уларға иғтибарын күберәк бүлә белеүе менән көслө. Дөрөҫлөк битлеге артына йәшеренгән ялғанды айыра белеп, унан баш тартырға, ә ҡайһы саҡта ялған булып күренгән, әммә киләсәк күҙлегенән ҡарағанда дөрөҫлөк булған хәл-ваҡиғаларҙы йәки төшөнсәләрҙе билдәләргә көс тапҡан ир-ат та көслө. Етәксе вазифаһындағы ир-егеттәребеҙ, мәҫәлән, ошондай сифатҡа эйә булһа, эргәһендә ҡымжыштан ялағайҙар ауына ҡапмаясаҡ, тип уйлайым.

**Марат Ишмөхәмәтов:** Мин ошо урында ир-егеттәрҙең бер көсһөҙ яғын билдәләп үткем килә - ул үҙенә, үҙенең һаулығына бармаҡ аша, ҡул һелтәп ҡарау. Ул, ғәҙәттә, йүткермәй, сөскөрмәй генә эшләп йөрөй икән, үҙен 100 проценты менән һау тип иҫәпләй, ә дауаханаға барып, тикшерелеп, тейешле дауалау курсы алыуҙы көсһөҙҙәр һәм ауырыуҙар шөғөлө тип һанай. Мәҫәлән, минең төрлө ерҙә уҙғарған дауалау курстарыма күбеһенсә ҡатын-ҡыҙ йөрөй, йәғни миңә мөрәжәғәт иткән ун кешенең туғыҙы - ҡатын-ҡыҙ һәм береүһе генә ир-егет була. Ошонан сығып, мин ир-егеттәрҙе киләсәккә күҙ һалмай, бөгөнгө көн менән генә йәшәй, тип әйтер инем, ә ундайҙарҙы мин көслө кеше, тип һанай алмайым.

**Әхмәр Үтәбай: Һүҙебеҙ үҙенән-үҙе ир-егеттәрҙең көсһөҙлөгөнә күсте, ахры. Әйҙәгеҙ, фекерләшәйек.**

**Илгиз Ишбулатов:** Көсһөҙ ир - ул ваҡиғалар ағышын үҙ контролендә тота алмаған кеше. Бәлки, ул үҙенең был етешһеҙлеген аңлайҙыр ҙа, әммә холоҡ үҙенсәлеге, булмышы арҡаһында хәлде ыңғайға үҙгәртә алмай.

**Артур Батыршин:** Тәү сиратта, көсһөҙҙәр рәтенә мин үҙ-үҙенә ҡул һалыусыны индерәм. Шулай уҡ үҙен хәйер һораусы хәленә тиклем алып барып еткереүсе лә көсһөҙ кеше. Тағы ла ҡатынын, ғаиләһен һәм туғандарын ихтирам итмәгән һәм шулай уҡ үҙен ихтирам иттерерҙәй шарттар тыуҙырмаған кешене лә мин көслө тип әйтә алмайым. Шулай уҡ үҙ-үҙенә ышанмаған, әйткән һүҙендә тормаған һәм ниндәйҙер эште башлап та, аҙағына тиклем еткермәгән ир-егет тә көсһөҙҙәр сафында.

**Марат Ишмөхәмәтов:** Бөгөн Рәсәйҙә ир-егеттәр һаны ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда 10 миллионға кәмерәк. Бындай күренеш донъяның башҡа бер илендә лә юҡ. Ни өсөн шулай һуң? Сөнки беҙҙә ир-егеттәр үҙҙәренең көсһөҙлөгө арҡаһында, тормошта үҙ урынын таба алмауҙан ҡырыла. Психологик яҡтан көсһөҙ булыуҙары уларҙы үлемгә алып килә.

> ***Бөтә эҙемтәләрҙең дә сәбәбе була. Бөгөнгө көндә илдә ир-аттың күпкә әҙ, шулай уҡ көс яғынан ҡойто булыуы XX быуат башынан алып бөгөнгәсә һуҙылған ирҙәрҙе юҡ итеүгә ҡоролған ваҡиғаларға бәйле. Төрлө революция, репрессия, Бөйөк Ватан һуғышы, һуңынан торғонлоҡ йылдары ваҡиғалары, шул уҡ эскелек - барыһы ла Рәсәйҙә ир-аттың һан һәм, иң мөһиме, сифат яғынан ҡырҡа кәмеүенә килтергән факторҙар. Бар яҡтан да көслө ир-аттарҙы юҡ итеү геноциды әле күҙәтелгән бер енесле ике кешенең ҡушылыуы, свингерлыҡ һәм башҡа төрлө кире күренештәрҙең барлыҡҡа килеүенә килтергәндер, тип фаразларға мөмкин.***

**Әхмәр Үтәбай:** Бөтә эҙемтәләрҙең дә сәбәбе була. Бөгөнгө көндә илдә ир-аттың күпкә әҙ, шулай уҡ көс яғынан ҡойто булыуы XX быуат башынан алып бөгөнгәсә һуҙылған ирҙәрҙе юҡ итеүгә ҡоролған ваҡиғаларға бәйле. Төрлө революция, репрессия, Бөйөк Ватан һуғышы, һуңынан торғонлоҡ йылдары ваҡиғалары, шул уҡ эскелек - барыһы ла Рәсәйҙә ир-аттың һан һәм, иң мөһиме, сифат яғынан ҡырҡа кәмеүенә килтергән факторҙар. Бар яҡтан да көслө ир-аттарҙы юҡ итеү геноциды әле күҙәтелгән бер енесле ике кешенең ҡушылыуы, свингерлыҡ һәм башҡа төрлө кире күренештәрҙең барлыҡҡа килеүенә килтергәндер, тип фаразларға мөмкин.

**Артур Батыршин:** Ундай геноцид кемгә кәрәк булған һуң?

**Әхмәр Үтәбай:** Көсһөҙ ир-атҡа. Барыһы ла нәҡ улар тарафынан уйланыла, башҡарыла, тормошҡа ашырыла. Тимәк, бөгөнгө көндә ысын ир-егеттәрҙең, ғөмүмән, ирҙәрҙең әҙ булыуында ир-ат үҙе ғәйепле"донъяның аҫтын-өҫкә килтереүгә алып бармаймы икән? Тимәк, "Ир-аттың көсһөҙлөгөндә ҡатын-ҡыҙ ғәйепле", тигән фекерҙә дөрөҫлөк бар?

**Марат Ишмөхәмәтов:** Әлбиттә, бар һәм быны төрлө яҡлап дәлилләп була. Мәҫәлән, ҡатыны "Унда ултырма", "Әйберенде ташлама", "Ни өсөн улай иттең?", "Ни өсөн былай иттең?" һәм башҡа төрлө итеп гел генә ирен игәп, уның энергияһын баҫып, һүндереп торһа, иртәме-һуңмы, ул ирҙең түҙемлеге һынып, өйҙән сығып китеүе йәки ҡаты ауырыуға һабышыуы, йәки үҙ-үҙенә ҡул һалыуы ихтимал. Шулай уҡ ҡыҙҙарҙың урам буйлап яланғас тиерлек йөрөүе лә ирҙәрҙе енси яҡтан көсһөҙлөккә алып барыусы факторҙарҙың береһе бит.

Эйе, ысынлап та, бөгөнгө көндә ир-егетте баҫыуға, уның тормоштағы ролен кәметеүгә күп факторҙар булышлыҡ итә, тик шулай ҙа барыһын да йәмғиәткә һәм феминизация күренешенә генә ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ түгел. Ғәйеп, күбеһенсә, ирҙәрҙең үҙҙәрендә. Тормошта булған күпселек күңелһеҙ күренештәр һәм ваҡиғалар заман ир-егеттәренең күбеһе дусар булған эскелек менән бәйле. Шулай уҡ ирҙәрҙең ялҡаулығы, үтә лә тиҙ төшөнкөлөккә, битарафлыҡҡа бирелеүе лә уларҙың ошондай хәлгә ҡалыуында мөһим роль уйнай. Тирә-яҡҡа ҡарағыҙ әле, ҡатын-ҡыҙҙар ниндәй юл табып булһа ла аҡса эшләргә, донъяһын көтөргә, балаһын үҫтерергә ынтылғанда, ҡарар күҙгә абруйлы ғына ирҙәр ҡул ҡаушырып, аптырап, "ҡаты уйҙарға" батып өйҙә ята, ә теләк булғанда, эш тә табырға, аҡса ла эшләргә була. Шулай уҡ психологик тотороҡлолоҡ юҡ замана ир-егеттәрендә. Ошондай "портретлы" ир-егеттәргә балаларҙың, илдең киләсәген нисек ышанып тапшырырға? Улар нимәгә өйрәтә ала? Ҡатын-ҡыҙ тормош юлдашын һайлағанда ла өҫтөнлөктө ышаныслы, аҡыллы ир-егеттәргә бирә, ә көсһөҙҙәр, булдыҡһыҙҙар ишһеҙ, тимәк, киләсәкһеҙ тороп ҡала.

**Әхмәр Үтәбай: Ҡатын-ҡыҙ беҙҙе һайлай тинек, ә бына һеҙ аҡыллы, уңған, бар яҡтан да килгән һылыуҙың күңелен яулар өсөн ни эшләр инегеҙ?**

**Илгиз Ишбулатов:** Әгәр ҙә ир-егет ундай юғарылыҡта торған ҡыҙҙы үҙенә ҡарата алам, тип уйлай икән, тимәк, үҙен дә ошондай уҡ бейеклектә, тип ҡабул итә һәм, тырышһа, уңышҡа өлгәшәсәк. Ә үҙен был юғарылыҡҡа дәғүәле, сөнки бындай юҡ итеү геноцидын ҡатын-ҡыҙ үткәрмәй.

Шул уҡ ваҡытта, ирҙәрҙең тормош позицияһы көсһөҙ булыуында нескә заттың да роле бар, тип әйтергә була. Тормошта "көслөлөк" тигән вакант урын бар, йәғни ғаиләлә, тормошта көслө булыуҙы күҙаллаусы, билдәләүсе буш урын ул. Был урын бер генә кешенеке булырға мөмкин һәм донъя яралғандан алып ул ир-егеттеке һаналып, быуаттар дауамында һаҡланып килгән. Ә бөгөн иһә ул урынды ҡатын-ҡыҙҙың яулап алыуы, нескә заттың бар йәмәғәт тарафынан да ошо урынға килтерелеүе, күтәрелеүе, йәғни донъяуи закондың боҙолоуы, ир-аттың ситкә тибелеүенә килтерҙе. Ир-егет тәбиғәт тарафынан көслө булыу өсөн яратылған һәм бөгөн килеп ошо хәҡиҡәттең юҡҡа сыға барыуы

✓ *Ғаилә ҡороп, ғүмерлеккә бергә ҡала алыу ҙа сыҙамлыҡ һәм аҡыл талап итә, сөнки быға тиклем идеал булып күренгән ишеҙең бик үк ыңғай булмаған сифаттары ла асыла башлаясаҡ бит.*



итерлек түгел тип уйлаусы йә был эшкә бөтөнләй тотонмаясаҡ, йә ҡыҙҙың күңелен яулау өсөн төрлө яҡлап үҫә, камиллаша башлаясаҡ. Ә үҙенә юғары талаптар ҡуйып, шуларҙы атҡарып сығырға тырышҡан ир-егет бары тик маҡтауға һәм хуплауға лайыҡ.

**Марат Ишмөхәмәтов:** Кешегә, әйтеп киткәнемсә, тоҡом һаҡлау инстинкты һалынған. Кеше һәйбәтме, насармы, матурмы, йәмһеҙме, аҡыллымы, иҫәрме - барыһы ла ғаилә ҡороп, балалар үҫтереү законына буйһоноп йәшәй. Тик тормош ҡапма-ҡаршылыҡлы итеп ҡоролған һәм барыһы ла беҙҙең теләк буйынса ғына башҡарылмай. Шуға күрә, һин кемгәлер оҡшайһың, ә ысын мөхәббәт менән теләк араһындағы айырманы аңларға кәрәк тәүҙә ир-егеткә.

**Артур Батыршин:** Ир-егеттең булмышына "яулап алыу", бойһондороу принцибы һалынған. Һәр ир-егет үҙе теләгән ҡатын-ҡыҙҙы яулай ала, тип уйлайым. Ләкин уны яулап алғандан һуң, уның менән ғаилә ҡороп, ғүмерлеккә бергә ҡала алыу ҙа сыҙамлыҡ һәм аҡыл талап итә, сөнки быға тиклем идеал булып күренгән ишеңдең бик үк ыңғай булмаған сифаттары ла асыла башлаясаҡ бит. Шуға күрә, ҡатын-ҡыҙҙы яулап алыр өсөн барыһын да эшләргә мөмкин, ләкин башта барыбер ҙә был енеүҙең кәрәкме-юҡмы икәнен асыҡлау мөһим.

**Артур Батыршин:** Мин Илгиз менән тулыһынса килешәм. Ысын дуҫтарҙың бер-береһенән йәшерен сере булмай, үҙҙәренең барлыҡ мәсьәләһен уртаға һалып тикшерәләр. Ә ҡатын-ҡыҙҙар менән ундай асыҡ мөнәсәбәт ҡороп булмай. Уларға бары тик теге йәки был мәсьәлә буйынса анығыраҡ һорауға яуап алыр өсөн генә мөрәжәғәт итәһең, йәғни сикле бәйләнеш кенә булдыраһың, тимәк, был мөнәсәбәттәрҙе бик нисек тә ысын дуҫлыҡҡа һанап булмай.

**Әхмәр Үтәбай:** Улай ҙа булһын, ти. Ләкин был мөнәсәбәткә ысын дуҫлыҡ тип ҡараған кеше – ҡатын-ҡыҙмы ул, ир-егетме – һөйөү тойғоһонда янһа ла, бер ҡасан да дуҫлыҡ Дуҫлыҡ - коллективлыҡтың иң юғары күрһәткесе.

**Илгиз Ишбулатов:** Ир-егеттәр араһында ысын дуҫлыҡ була, тигән фекерҙәмен, сөнки ниндәйҙер тормош һынауҙары үтергә мәжбүр булғанда ла, ниндәйҙер мөһим эш башҡарғанда ла уның янында мотлаҡ арҡа терәр кешеһе була. "Яу яланында бер кеше һуғышсы түгел", тигән һүҙҙәр быны асыҡ дәлилләй.

**Әхмәр Үтәбай:** Дуҫлыҡтың икенсе яғы ла бар. Бөтә кеше лә бер тигеҙ булмай һәм ике дуҫтың береһе мотлаҡ үҙенән көслөрәк булған дуҫының ҡоло була. Ул көслөнөң абруйын файҙаланып, үҙенең йәмғиәттәге мохтажлығын ҡаплар өсөн көслө дуҫына һыйына,

**Ул - ағай менән ҡусты мөнәсәбәте. Бөгөнгө көндә туғанлыҡ ептәре тарҡалып, туғандар араһында аңлашылмаусанлыҡ, төрлө ҡытыршылыҡтар артҡан тө̇слө. Һеҙҙең был мәсьәләгә ҡарашығыҙ нисек?**

**Артур Батыршин:** Беҙҙең халыҡ өсөн туғанлыҡ изге һәм көслө төшөнсә. Мин үҙемдең дуҫтарыма ла туғаным кеүек ҡарайым, йәғни бер туған ағайыма һәм дуҫтарыма мөнәсәбәтем бер төрлө. Уларҙың шатлығын, уңыштарын һәм борсолоуҙарын барыһын да үҙемдеке кеүек ҡабул итәм.

**Әхмәр Үтәбай:** Башҡорттоң "Айыуға ағайың менән бар", тигән мәҡәле бар. Айыуҙы ҡурҡытып өңөнән сығарырға маташҡанда ул ҡапыл килеп



# ҠАРШЫ ТОРҺАҢ,

## һин көслө ир

һинең күңеленә башҡа берәү яҡын, һәм - киреһенсә. Ләкин быны трагедияға әйләндерергә кәрәкмәй, сөнки бөтәһенең дә ерҙә Хоҙай тарафынан билдәләнгән үҙ ише бар һәм, иртәме-һуңмы, уларҙың юлы ҡушыласаҡ. Ә инде һиндә бик тә бик кемдеңдер күңелен яулау теләге булһа, төрлө юлдар менән маҡсатыңа өлгәшергә тырышырға кәрәк, тик ул алымдар әхлаҡи ҡағиҙәләр сиген үтмәҫкә тейеш. Ләкин яулап алыу барышында бер нәмә тураһында оноторға ярамай: бәлки, баш баҫып, төрлө юлдар менән үҙеңә ҡаратырға тырышҡан ҡатын-ҡыҙ булмышы менән һиңә тура килмәйҙер һәм нәҡ шуның өсөн ул һиңә күҙ һалмайҙыр. Тимәк, ул һинең ишең түгел. Шуға күрә, бар ҡаршылыҡтарҙы еңеп яулап алған ишең бәхетһеҙлегең булырға ла мөмкин, сөнки "Көсләп асылған күҙҙең нуры булмай". Шуға күрә уйлап һәм һаҡ эш итергә кәрәк ишеңде һайлағанда.

**Мөнир Иҡсанов:** Бында ҡатын-ҡыҙҙы яулап алырға теләүҙең ниндәй маҡсаттан сығып башҡарылғанлығы ла мөһим. Бар күңеленде һалып, бөтә йөрәгеңде биреп яратып, ғүмерлеккә уның менән бергә булырға ынтылыу менән ул ҡыҙға бары тик ниндәйҙер теләктәреңде ҡәнәғәтләндереү маҡсатында ғына яҡынайыу араһында айырма ҙур. Йәғни

**Әхмәр Үтәбай:** Был һорауға ҡағылғанда ир-егеттәрҙең бер хатаһын әйтеп китеү кәрәк. Уларҙың күбеһе ҡатын-ҡыҙҙы яулап алыуҙы бары тик физик яҡынлыҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдыра. Был дөрөҫ түгел. Миненсә, тәү сиратта ҡыҙҙың йөрәген, күңелен яулау мөһим.

сиген үтмәйәсәк. Ул һәр саҡ дуҫына ярҙамға килергә әҙер, барлыҡ ҡайғы-шатлығын уртаҡлаша, кәрәк саҡта дуҫының янында була, тик быны ул мөхәббәт тойғоһона йәки енси мөнәсәбәткә дәғүә итеп эшләмәй. Улар араһында бары тик рухи бәйләнеш көслө була.

**Артур Батыршин: Ирҙәр дуҫлығын да ҡарап үтәйек. Уларҙа дуҫлыҡ тигән төшөнсә бармы?**

**Марат Ишмөхәмәтов:** Мин үҙемә дуҫтарҙы кешенең ҡу- уның арҡаһына ышыҡланып йәшәй. Шуға күрә дуҫлыҡ ептәре бәйләгән ир-егеттең икеһе лә көслө булыуына ышанмайым һәм ике дуҫтың берәүһенең мөнәсәбәте барыбер ниндәйҙер иҫәпкә ҡоролған була.

Тағы ла шуны әйткем килә. Көсһөҙ кешенең генә дуҫтары күп була. Дуҫтарының күплеге менән маҡтанған кешенең ысынында дуҫтары юҡ, сөнки ысын дуҫ берәү генә була һәм

сығып ташланырға мөмкин. Ошо ваҡытта барлыҡ кеше араһынан тик ағайың ғына һине ташлап ҡасмаясаҡ, тип тулы ышаныс менән әйтеп була. Йәғни, нәҡ экстремаль ситуацияла туғанлыҡ ептәренең ныҡлығы беленә. Ниндәй ваҡытта ла ҡан тартыуы кешене ташламай һәм ҡайһы берҙә ваҡытлыса килеп тыуған аңлашылмаусанлыҡтар ҙа ниндәйҙер ваҡиғалар шауҡымында юйылып, үҙ әһәмиәтен һәм мәғәнәһен юғалта.

**Илгиз Ишбулатов:** Бер туған ҡусты менән ағай араһындағы аңлашылмаусанлыҡҡа уларҙың ҡатындары сәбәпсе булырға ла ихтимал, йәғни ике туғандың араһына ҡатындарының килеп ҡыҫылыуы мөнәсәбәттәрҙе теге йәки был яҡҡа ҡырҡа бороп, күпте үҙгәртергә мөмкин. Ләкин нисек кенә булмаһын, башҡорттоң көсө - туғанлыҡта икәнлекте оноторға ярамай.

***Тормош ҡапма-ҡаршылыҡлы итеп ҡоролған һәм барыһы ла беҙҙең теләк буйынса ғына башҡарылмай. Шуға күрә, һин кемгәлер оҡшайһың, ә һинең күңеленә башҡа берәү яҡын, һәм - киреһенсә. Ләкин быны трагедияға әйләндерергә кәрәкмәй, сөнки бөтәһенең дә ерҙә Хоҙай тарафынан билдәләнгән үҙ ише бар һәм, иртәме-һуңмы, уларҙың юлы ҡушыласаҡ. Ә инде һиндә бик тә бик кемдеңдер күңелен яулау теләге булһа, төрлө юлдар менән маҡсатыңа өлгәшергә тырышырға кәрәк, тик ул алымдар әхлаҡи ҡағиҙәләр сиген үтмәҫкә тейеш. Ләкин яулап алыу барышында бер нәмә тураһында оноторға ярамай: бәлки, баш баҫып, төрлө юлдар менән үҙеңә ҡаратырға тырышҡан ҡатын-ҡыҙ булмышы менән һиңә тура килмәйҙер һәм нәҡ шуның өсөн ул һиңә күҙ һалмайҙыр. Тимәк, ул һинең ишең түгел.***

**Артур Батыршин: Гүзәл заттың күңелен яулау - ул һөйөү, мөхәббәт бит инде ул. Ә ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ араһында бары тик дуҫлыҡ мөнәсәбәте була аламы?**

**Марат Ишмөхәмәтов:** Улар араһында дуҫлыҡ түгел, ә бары тик енси партнерлыҡ мөнәсәбәте генә булырға мөмкин.

**Илгиз Ишбулатов:** Ир-егет менән ҡатын-ҡыҙ араһындағы дуҫлыҡта уларҙың кемелер был мөнәсәбәткә дуҫлыҡ, ә икенсеһе мөхәббәт күҙлегенән сығып ҡараясаҡ.

лындағы һыҙыҡтарға ҡарап һайлайым, сөнки ҡул - кешенең паспорты. Тормошта үҙ шәүләһенән ҡурҡып йәшәүсенең дә, үҙ-үҙен һәләк итергә ынтылғандың да, енәйәтсенең дә булмышы алдан программалаштырылған, йәғни ҡулына яҙылған була. Шуға күрә ҡулдағы һыҙыҡтар миненң өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

**Әхмәр Үтәбай:** Индивидуаллек өҫтөнлөклө булған халыҡта, ғөмүмән, дуҫлыҡ төшөнсәһе юҡ, ә коллективлыҡ тойғоһо көслө булған йәмғиәттә дуҫлыҡ мөнәсәбәте лә көслө. үҙенең дуҫлығы өсөн ниндәйҙер баһа йәки хаҡ һорамай.

**Артур Батыршин:** Әхмәр ағайҙың һуңғы фекере менән килешмәйем. Тормошта көслө кешенең дә дуҫтары күп булырға мөмкин. Бер үк маҡсатлы кешеләрҙе үҙ янына йыйыр, туплар ҙур көскә эйә дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре барлыҡҡа килтереүсене мин көслө кеше, тип әйтер инем. Дуҫтар бер маҡсатҡа өлгәшергә тырыша, бер юлдан атлай һәм бергәләп күберәк эштәр атҡара ала.

**Әхмәр Үтәбай: Егеттәр, тағы ла бер һорауҙы күтәрәйек әле.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Көслө ир-егет исемен йөрөтөү өҫтөнлөктәр генә бирмәй, ә бурыстар һәм йөкләмәләр ҙә йөкмәтә. Уларҙың барыһын да күтәрергә мөмкинлек биргән, шулай уҡ тормоштоң төрлө баҫымына ҡаршы торорлоҡ эске көскә эйә булыусы ир-егет кенә ниндәйҙер бейеклектәр яуларға һәм үрҙәргә артылырға мөмкин. Ялғанлыҡҡа ҡаршы тора алырлыҡ һәм дөрөҫлөктө яҡларлыҡ көскә эйә булыусы ир-егеттәр күберәк кәрәк бөгөн тормошта.**

**Әңгәмәне
Гөлназ САФУАНОВА
тыңланы.**

МОСТАЙ НӘСИХӘТТӘРЕ



# ИҢ ҘУР БАЙЛЫҒЫМ - ҺҮҘ, унырһы ла халыҡтыҡы...

● "Дуҫлыҡтан да өҫтөн туғанлыҡ бар - ҡан ҡәрҙәшлек".

● "Әжәлеңде сәбәләнмәй генә көтә белеү - үҙе ирлек түгелме?"

● "Бәхетһеҙлектең бер төнгә һуңлап ҡалыуы, бәхеттең бер төнгә китмәй тороуы кеше өсөн үҙе ҙур бүләк түгелме ни?"

● "Күмәк булғанда таштар ҙа, ҡояштан алған йылыны үҙ-ара бүлешеп, оҙаҡ заман һыуынмайҙар икән".

● "Әҙәм ҡарғышы төшһә, гүреңдә лә урын табалмаҫһың".

● "Бала күңеленә хәҙер асыу сәсһәң, һуңыраҡ нәфрәт урырһың".

● "Тик өҙөлгән өмөт менән ҡалған хәтер генә төҙәлмәй".

● "Яҡшы күңелле матур кешенең йәмһеҙ үлеүе мөмкин түгел".

● "Кешенең күңеле ҡайҙа һуңғы төйәген таба, шул ер - уның рухи Ватаны".

● "Һүҙҙең һөйәге була, һөйәк эсендә елеге була".

● "Бәндә күңеле түгел, ана, Тәңре күңеле күктә гел үҙгәреп тора".

● "Атһыҙ кешенең ярты мөлкәте сабатаға китә".

● "Уҡыған берәү мулла булмаҫ, суҡыған берәү ҡарға булмаҫ".

● "Тере саҡта бөтә кеше лә йәшәй, донъя ҡуйғас, яҡшылар ғына иҫән ҡала".

● "Ҡара урманға һорауһыҙ ҙа инеп була, кеше күңеленә рөхсәтһеҙ ҡағылыу ярамай".

● "Оло гонаһтарығыҙ өсөн дә, кесе ғәйептәрегеҙ өсөн дә үҙ ваҡытында яза алып ҡалырға тырышығыҙ!"

● "Танылған хаталарыбыҙ, хатта ғәйептәребеҙ тормошта беҙҙең кәңәшселәребеҙгә, ярҙамсыларыбыҙға, шулай итеп, бара торғас, талапсан дуҫтарыбыҙға әйләнәләр, ә танылмағандары йәки йәшереп килгәндәре дошмандарыбыҙ булып ҡала".

● "Мөхәббәт яҙыҡ түгел. Мөхәббәтһеҙ уйнаш яҙыҡ".

● "Әҙәмдең ҡайһы саҡ шулай күҙе тейешһеҙҙе күрер, ҡолағы тейешһеҙҙе ишетер була".

● "Ир намыҫы бил ҡайышы түгел, береһен һалдырып алһалар, икенсеһен быуып булмай".

● "Ҡатындар күңеле төпһөҙ даръя, төбөндә ниҙәр ятҡанын ҡайҙан беләһең?"

● "Серҙең ҡанаты етеҙ. Бер ысҡынһа, илде тиҙ урап сыға ул".

● "Әҙәм балалары әсәнән яртышар ғына булып тыуа".

● "Һәр кешенең үҙ хәҡиҡәте була, әммә бөтә әҙәм өсөн уртаҡ, һәр кемдең ғүмерлек таянысы булған, бөтә хәүеф-хәтәрҙәрҙән ҡурсалай торған тағы бер хәҡиҡәт бар. Ул хәҡиҡәттең исеме мөхәббәт!"

● "Кешене үҙ йортонан ситкә хыял йәки әрнеү алып китә, ә һағыш алып ҡайта".

● "Бәхеттең шаһиты булыу - үҙе бәхет икән!"

● "Сыҙамлыҡ менән сабырлыҡ - фатихаға бәрәбәр".

● "Тәүҙә кешенең күҙҙәре донъянан ваз кисә, унан - үҙе!"

● "Матур ахмаҡтан да аяныс нәмә юҡ. Тәбиғәттең иң ҙур хатаһы шул..."

● "Ғашиҡ булышыу - сирҙең иң яманы".

● "Донъяныҡы донъяла ҡайтырға тейеш".

● "Ләкин был фани донъяла ғәриплек менән дә, матурлыҡ менән дә һатыу итеүҙәр бар шул әле".

● "Һәр шәхестең төп үҙәге, уның рухи донъяһының тотоп торған бер терәүе була. Минеңсә, иң ныҡлы, иң ышаныслы терәү, бәлә-ҡазаларға бирешмәҫ иң ҡаты үҙәк - мөғжизәләргә ышаныу ул!"

**Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ әҙерләне.**




- Ярай, ышандырҙың, ҡалғанын үҙең ҡара, улайға китһә, бешереп-төшөрөүгә үҙең дә сымрыһың.

- Ҡунаҡ һыйлап өйрәнелгән. Хәл иттек!

- Ҡарсыҡ, бүләкләр алдынан сәхнәгә саҡыралар бит инде. Нимә тип әйтәйем икән, ундай урындарҙа һүҙ тотоп өйрәнелмәгән...

- Ә һин яҙып ал да, сәхнәгә сыҡҡас, түш кеҫәңдән сығар ҙа уҡы.

- Ә нимә тип яҙырға һуң?

- Уныһын инде, үҙең ҡара... - Разия оҙон итеп иҫнәп ҡуйҙы.

- Йоҡлайыҡ. Тыныс йоҡо. - Нур ятты ла түшәктә тумһайып йәйелгән ҡатынының ян-тирәһен юрған менән ҡымтыштырғандан һуң, йомшаҡ, йылы кәүҙәне ярым ҡосаҡлап тынып ҡалды. Бер аҙҙан Разияның тигеҙ, тәрән итеп тын алып мышнауы ишетелде. Уға шул ғына кәрәк ине лә, йәһәтләп торҙо, шәүләләй йомшаҡ баҫып йөрөп кейенде, аяҡтарына карауат эргәһенә ҡуйылған шипатайҙарын ҡатты һәм йоҡо бүлмәһенең ишеген тауышһыҙ ғына ябып, залға сығып утты ҡабыҙҙы.

Өҫтәлдә, гәзит-журналдар өҫтөндә ятҡан күҙлеген ҡырлас танауына атландырып йәйланы, шкафтан соҡоноп эҙләп дәфтәр сығарҙы, шунда уҡ ҡуйылған шкатулканан авторучка алып ба-рмаҡтарына ҡыҫтырҙы һәм ҡарашын түшәмгә ҡаҙаны. Алдында ҡағыҙ, ҡулында ҡәләм, теҙеп ал да кит, юҡ бит, яҙыры кинәт хәтеренән сыҡты, көсөргәнеүҙе ҡабул итергә теләмәгән, тел осондағын да көтмәгәндә онотторҙоп интектергән оло кешегә хас зиһене таралды ла ҡуйҙы. "Был яҙыусы халҡы ҡайһылайтып ҡалын-ҡалын китаптар яҙа икән? Яҙып ҡына ҡалмайҙар бит әле, йөрәккә үтеп инерлек тапҡыр, урынлы ҡулланған һүҙҙәр менән арбайҙар, әсир итәләр, мөғжизәле әкиәт иленә алып китәләр..."

Нур мәктәп йылдарындағы ҡылығы буйынса авторучканы ирендәренә тигеҙеп алды ла, беренсе һүҙбәйләнеште сыймаҡланы: "Хөрмәтле йәмәғәт!" Ә нишләп йәмәғәт, коллегалар, тиһә, дөрөҫөрәк булмаҫмы? Юҡ, кисәгә бит оло ҡунаҡтар ҙа киләсәк, коллегалар тип ябай ташсы уларҙы үҙе менән йәнәш ҡуя алмай, һөмһөҙлөк, тәрбиәһеҙлек билдәһе булыр ул хәбәрҙе ысҡындырһаң. Йәмәғәт тә иҫкергән һүҙ һымаҡ яңғырай, элеккесә итеп, иптәштәр, тиһә, йәтеш яңғырар. Һыҙып ырғытылғандың өҫтөнә яңыларын теҙҙе лә, ҙур эш башҡарғандай, маңлайын ыуып, уйға ҡалды. "Мин, ауылда үҫкән малайға, был тиклем дә юғары хөкүмәт наградаһын алыу күктән төшкән бәхет һәм мәртәбә. Президентыбыҙға, хөкүмәт етәксеһенә рәхмәтемде белдерәм..."

Китте бит йәйлап, яҙылған фекергә эйәреп яңыһы моронланы, килешһеҙерәк, ҡорораҡ сыҡһа ла һүҙ һүҙгә ялғанды. Үҙе өсөн үтә лә мөһим ижади шөғөлөн ослағас, бер бит самаһы сығышын ҡулына алып, көҙгө ҡаршыһына баҫты. Унда сағылған һалынҡы майка, тубыҡтарына тиклем төшкән ғаилә трусигы кейгән, ҡамыт, йөнтәҫ аяҡлы, бүлтегерәк ҡорһаҡлы, сырыш тире аша тарамыштары беленгән арыҡ муйынға ултырған ялбыр башлы тере ҡараҫҡыға тартым һын үтә лә күрмәлекһеҙ һәм өркөткөс ине. Был килеш сығыш яһауы мөмкин түгеллеген аңлағанға, шифоньерҙағы ҡунаҡҡа йөрөү өсөн тәғәйенләнгән кейемен кейҙе, апаруҡ һирәгәйеп пеләше күренә башлаған түбәләге өтөрөй сәсен төкөрөкләп артҡа һыпырҙы. Урынына кире баҫып, тамағын ҡырып алғас, яҙмаһын шыбырҙап уҡырға кереште. Беренсеһе насар һымаҡ тойолһа ла, икенсе, өсөнсө, дүртенсе тапҡыры ишетер ҡолаҡҡа апаруҡ аһәңле, яғымлы яңғыраны, бара-тора һүҙ араһында текстан айырылып, килешле, образлы итеп яңы һөйләмдәр ҡыҫтырып ебәрер хәлгә етте.

Ниһайәт, ярты төн ауғас ҡына түшәгенә ятты, тик күҙҙәренә йоҡо төйөлмәй, урынында әйләнгеләне. Атҡаҙанған исемен ауылда заманында колхоз рәйесенә биргәйнеләр, башҡаларға эләккәне юҡ әлегә. Ул икенсе була инде. Ишетһәләр, моғайын да, ҡәҙерләп ҡунаҡҡа саҡырырҙар, ауылдың Почетлы гражданы итеп ҡабул итерҙәр... Бына эштәр ҡайҙа бара... Өмөтлө йылмайған килеш әүелйеп китте, ә ирендәре ихтыярынан тыш сығышындағы һүҙҙәрҙе ятлай ине: "Бәләкәй генә хеҙмәтемде ололап баһалауығыҙ өсөн рәхмәт... рәхмәт..."

Нур һәм Разия ең һыҙғанып буласаҡ тантанаға, ҡунаҡ ҡаршыларға әҙерләнә башланы. Ремонтты ла ҡулдарынан килгәнен - үҙҙәре, булдыра алмаҫтайҙы оҫталар саҡыртып эшләттеләр. Сафланып, таҙарып, яҡтырып киткән бүлмәләргә яңы ҡаралты өҫтәлгәс, фатир тағы ла күркәмләнде, уға эске йылылыҡ бөрккән ҡот яғылды. Һәммәһе лә әҙер булғас, магазинға барып, Нурға кейемһалым һатып алдылар. Ҡайтҡас, костюм-салбарҙы, крахмалдан ҡыштырҙаған аҡ ҡарҙай күлдәкте, ялтыр туфлиҙарҙы кейеп, Нур көҙгө ҡаршыһына баҫты. Унан уға күпкә йәшәреп, күҙҙәре оҫҡонланып киткән лайыҡлы ир ҡарай ине.

- Нисек? - Көйәҙлеген баһалатҡыһы килгәнгә һораны быны.

- Бөтәһе лә урынында һымаҡ, - ҡәнәғәтләнеүе йөҙөнә сыҡҡан Разияһы былай ҙа тәнгә һылашҡан костюмды ҡаҡҡылады-һуҡҡылады, - өҫтәп бынау галстукты тағып ебәрһәң...

- Күршенең студент малайына әйтмәһәк, быны сырмау өсөн дә оҫталыҡ кәрәк бит әле.

- Бер юлы йоҡа пальтоңды, эшләпәңде кейеп, шарфты һалып та күрһәт инде, - тине Разияһы. Әйткәне үтәлгәс, һоҡланыуын йәшермәне:- Бигерәк кәттә күренәһең, бай сауҙагәр, тиерҙәр танып-белмәгәндәр! Теге Ғәфүргә ышанып етмәһәм дә, утһыҙ төтөн сыҡмай, тигәндәй, һиңә тегендә ниндәйерәк бүләк бирерҙәр икән? Атҡаҙанғанды ҡаҙарҙармы түшеңә, әллә берәй ҡиммәтле бүләк тотторорҙармы!

- Эш бүләкләүҙәме ни, онотмайынса саҡырыуҙары мөһим! - Шулай тиһә лә, күҙҙәре икенсерәк тойғо белдерә ине. Быны ҡатыны һиҙһә лә күрмәмешкә һалышып йөпләне:

- Дөрөҫ әйтәһең, тағы бер һылтауҙан балаларҙы саҡырып алабыҙ. Уларҙың килеп ҡайтыуы беҙҙең өсөн икеләтә байрам!

* * *

Ҡунаҡтар әйтелгән ваҡытҡа, төш мәленә иномарка машиналарына тейәлеп килеп тә еттеләр. Фатир эсе шау-шыуға тулды. Күптән күрешмәгәнгә, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй, килтергән күстәнәстәре, бүләктәре менән фатирҙы тултырып ташланылар.

Өҫтәл артына ултырышҡас, Разияһы ҡарашы менән һөйләшергә саҡырып, аш бүлмәһе яғына ымланы.

- Нишләйбеҙ, ҡарт, саҡырыу сәбәбен алдан әйтәйек тә ҡуяйыҡмы әллә? Раушания көтмәгәндә-уйламағанда йыйып алыуыбыҙға аптырай.

- Сәбәп күрмәйем. Хәҙер һәммәбеҙ ишектәрҙе тимерҙән эшләтеп, тәҙрәләргә рәшәткә ҡатып, донъябыҙға бикләндек тә ябай ғына саҡырыуҙы ла ятһынып ҡабул итәбеҙ. Әүәле беҙҙең атайәсәйҙәр бәлеш кенә бешерһәләр ҙә күршеләрен йыйыр ине. Бик тә ҡыҙыҡһынһалар, әйт бөтәһенә лә - һеҙҙе осраштырғыбыҙ килде, һәм бөттө-китте. Ҡалғанын мәле еткәс белерҙәр!

Ихлас, күтәренке генә барған табындың уртаһы яҡынлағас, ғаилә башлығы ҡапыл йыйына башланы:

- Бер-ике сәғәткә барып киләһе ерем бар, мине юғалтмағыҙ. Камил, табын дилбегәһен һиңә тапшырам!

Ҡаршылау мәшәҡәттәре менән мәшғүлләнеп һуңғараҡ ҡалған икән, ул килгәндә театр фойеһының ишектәрен ябырға йыйыналар ине. Партер ауыҙындағы ҡыҙ уны ситкәрәк алып китте:

- Алданыраҡ ҡуҙғалһағыҙсы, Өфөнән саҡырылған ҡунаҡтар әле генә килде, улар инеп урынлашмай тороп, залға үтеү ҡәтғи тыйыла.

- Һылыу, мин саҡырыу буйынса...

- Бында бөтәһе лә саҡырыу буйынса. Көтөргә тура килер. - Открыткаға күҙ һалғас өҫтәне. - Урынығыҙға ла икенсе кешене ултырттыҡ, һеҙгә ултырғыс табып, үҙегеҙгә урынлашырға ҡала.

- Мин Мәхмүтов. Нур Мәхмүтов...

- Ғәфү итегеҙ, ваҡытым юҡ! - Ҡыҙыҡай, яҡынлай күрмәгеҙ, тигәндәй, уны тағы ла ситкәрәк этте лә эш урынына йүгерҙе.

Абруйлы ҡунаҡтар сәхнәләге президиум артына үткәнсе, көс-хәл менән инеп урынлашты ла йүгермәләүҙән бышлығып тирләгән маңлайын ҡул һырты менән һыпырҙы. Эргәһендәге йомшаҡ креслоға ҡунаҡлаған ханым уның яғына ризаһыҙ һирпелде лә ыҡсым танауын йыйырҙы. "Тауис ҡошолай ҡабарып, кәрәкле әҙәмдәй ҡуҡырайһаң да беҙҙең төҙөлөштә ҡатнашың юҡ бит һинең, тәтәйбикә, моғайын да бухгалтерия тирәһендә, йә эшем эйәһе секретарь урынында үткәрәһеңдер көндәреңде!" Тегенең йәшерен, түбәнһетеүле мөнәсәбәтенә күңеленән шулай уҫал яуапланы ла иҫе китмәгән ҡиәфәттә иғтибарын алға йүнәлтте, ыңғайы бер, теүәлләп, түш кеҫәһенә һалынған сығышын да ҡапшап ҡуйырға онотманы. Сәхнә түре гөлтләп яна: алғы планға биҙәкләп яҙылған һикһән һанын, артҡараҡ тотош стенаны күп ҡатлы йорттар, шаулы төҙөлөш барған күренеште һүрәтләгән банер элгәндәр. Президиум өҫтәле, трибуна затлы материалдан, сифатлы итеп эшләнгәнлеге күҙгә ташлана. "Килештерәләр, элек шаршауға ҡағыҙҙан әтмәләнгән саҡырыуҙар яҙып элеү һәм өҫтәлгә ҡыҙыл туҡыма ябыу менән генә сикләнерҙәр ине. Улар заманында иң беренсе эшкә иғтибар иттеләр, шунан ғына шаулы йыйылыштар. Хәҙер - киреһенсә... "

**(Дауамы бар).**

✓ *Күптән түгел бер башҡорт теле уҡытыусыһы "Ҡара йөҙҙәр" повесының авторы кем?" тигән һорауға "Зәйнәб Биишева" тип яуап бирҙе. Үҙебеҙ генә түгел, микрофондар ҡыҙарып киткәндәй булды хатта.*



*ТУРА ЭФИРҘА...*

**Иртән торғас та радиоалғыстарын ҡабыҙып ебәрә һалыусы таныштарығыҙ барҙыр, моғайын. Минекеләр биттәрен йыумаç элек үк "Юлдаш" радиоһы тулҡындарында "бәүелә" башлай. Бер көн шулай тыныс ҡына "күҙгә шырпы ҡыҫтырып", "Иртәнге сәфәр" тапшырыуын тыңлай-тыңлай сәй эсеп ултырғанда, ҡолаҡтар ҡарп итеп ҡалды. Тура эфирға шылтыратҡан бер уҡытыусы ҡолаҡҡа ятмаҫтай хәбәр әйтеп һалды бит. Баҡтиһәң, Башҡортостан Композиторҙар союзы рәйесе Заһир Исмәғилев икән! Ошо ише яуаптарҙан "Үәт әй, түбәтәй!" уйынын алып барыусы Филүс ҠАСИМОВ менән Марсель БАЙДӘҮЛӘТОВтың сәстәре үрә торамы икән? Үҙҙәренән һорайыҡ.**



# "ҮӘТ ӘЙ, ТҮБӘТӘЙ"ҘЕ...

## радио төбөндә көтөп кенә ултыралар әллә...

➔ **Тәү сиратта тура эфир алып барыусы журналистарға ошондай һорау бирге килә: һеҙ тыңлаусылар әүҙемлеге менән ҡәнәғәтһеҙме?**

**Ф. Ҡасимов:** Үтә ҡәнәғәтбеҙ. Мәҫәлән, Бүздәк районында йәшәүсе Клара апайҙың өйөндә "Юлдаш" радиоһы көн дауамында яңғырап тороун, хатта һыйыр аҙбарында ла радиоалғыстары булыуын беләбеҙ. Шулай уҡ Күгәрсен, Янаул, Ҡырмыҫҡалы, Өфө, Баймаҡ, Әбйәлил райондарынан даими тыңлаусыларыбыҙ күп. Ғөмүмән, халыҡ "Иртәнге сәфәр"ҙәге бөтә бәйгеләрҙә лә әүҙем ҡатнаша.

**М. Байдәүләтов:** Бер йыл элек, "Иртәнге сәфәр" программаһы проектын тура эфирға сығарырға йыйынған осорҙа беҙ, халыҡ әүҙем булмаç, тип шикләнгәйнек. Әммә тыңлаусылар тап ошо иртәнге минуттарҙа барған тапшырыуҙың һәр рубрикаһында теләп ҡатнаша былып сыҡты. Беҙҙең "Үәт әй, түбәтәй!" уйынына килгәндә инде, ҡасан шылтыратырҙар, тип көтөп ултырғаныбыҙ юҡ.

➔ **Әйткәндәй, "Үәт әй, түбәтәй!" уйыны барышында ҡыҙыҡ яуаптарҙы йыш ишетергә тура киләме?**

**М. Байдәүләтов:** Ҡыҙыҡ яуаптар көн дә булып тора. Мәҫәлән, әле күптән түгел бер башҡорт теле уҡытыусыһы "Ҡара йөҙҙәр" повесының авторы кем?" тигән һорауға "Зәйнәб Биишева" тип яуап бирҙе. Үҙебеҙ генә түгел, микрофондар ҡыҙарып киткәндәй булды хатта. Әммә тура эфирҙа көләргә лә, аптырарға ла ярамай. Һәр һүҙебеҙҙе үлсәп кенә тигәндәй, тынлыҡты боҙорға тура килә.

**Ф. Ҡасимов:** Был юҫыҡта радио тыңлаусыны бер аҙ аҡларға ла кәрәктер. Ул, бәлки, радиоға үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр шылтыраталыр. Тулҡынланыуҙан үҙендең исемендә лә онотторға мөмкин бит. Беҙ үҙебеҙ ҙә тулҡынланабыҙ. Бына, мәҫәлән, бер алып барыусыбыҙ менән булған хәл. Ул эфирға сығыр алдынан сценарийына үҙенең исем-фамилияһының тәүге хәрефтәрен генә яҙып ҡуйған. Тура эфир башланған, әлеге хәрефтәргә килеп төртөлгәс, коллегабыҙ уны нимә тип уҡырға белмәй, аптырашта ҡалған. Аҙаҡ ҡыҙыҡ итеп һөйләп йөрөнө.

➔ **"Үәт әй, түбәтәй!" кеүек уйынды алып барыусының белеме ниндәй кимәлдә булырға тейеш?**

**М. Байдәүләтов:** Беҙҙең үҙебеҙгә, әлбиттә, кәмендә юғары белемле булыу талап ителә. Уйын һорауҙарын үҙебеҙ әҙерләмәйбеҙ һәм уларҙың яуаптарын да алдан белмәйбеҙ. Шуға һорау төбәлгән кешегә ниндәй йүнәлеш бирергә белмәй тулҡынланған саҡтар ҙа була. Юғары интеллектлы тыңлаусыларыбыҙ ҙа күп. Улар тапшырыу тамамланғас шылтыратып, хаталарыбыҙҙы төҙәтә. Физика, химия уҡытыусылары бергәләп йыйылып тыңлайҙармы икән әллә, белмәйем. Һәр холдә, ошо өлкәгә ҡараған һорауҙарҙа хаталар табып, ҡәнәштәрен еткерә улар.

**Ф. Ҡасимов:** Иртәгә буласаҡ уйын һорауҙарына бер көн алда күҙ йүгертеп сығырға тырышабыҙ. Араһында ауырлыҡ тыуҙырғандары осраһа, төрлө китаптар, ҡамустар аҡтарып, әҙерләнеп киләбеҙ.

**М. Байдәүләтов:** Сөнки "Ҡара йөҙҙәр"ҙең авторын белмәһәң, яуап биреүсе башҡорт теле уҡытыусыһын яңылыш хуплауың да бар.

➔ **Радио тыңлаусыларҙың белеме, башҡорт телендә аралашыу кимәле буйынса ни әйтер инегеҙ?**

**М. Байдәүләтов:** Белем кимәле төрлөсә. Бер ниндәй махсус юғары белеме булмайынса ла бөтә өлкәлә лә хәбәрҙар булғандар һоҡландыра. Юғары белемле кешенең дә, үҙ өлкәһендә генә соҡоноп ултырып, башҡаларынан артта ҡалғаны була. Башҡорт телендә аралашыуға килгәндә, элегерәк был тәңгәлдә ауырлыҡ һиҙелә ине. Хәҙер тыңлаусылар яңылыш бер генә рус һүҙе әйтеп ысҡындырһа ла, үҙҙәрен үҙҙәре төҙәтергә ашыға. Үҙебеҙ ҙә уларҙың телмәр хаталарына йомшаҡ ҡына, һиҙҙермәйсә генә төҙәтмәләр индереп ебәрәбеҙ. Һәр хәлдә, беҙҙең тура эфирҙағы тапшырыуҙар тыңлаусыларҙа телмәр культураһын үҫтереүгә лә булышлыҡ итәләр, тип ышанам.

**Ф. Ҡасимов:** "Үәт әй, түбәтәй!"ҙең һорауҙары әллә ни ауыр түгел бит инде. Америка асып ултырмайбыҙ. Һорауҙарҙың барыһы ла мәктәп программаһынан алына, яуап биреү өсөн тыңлаусыға институт бөтөрөргә кәрәкмәй. Туғыҙ синыф уҡып алған белем дә етә.

➔ **Иртәнге эфирҙы алып барыусы журналистың төп бурысы нимәнән ғибәрәт?**

**М. Байдәүләтов:** Иртәнсәк халыҡ менән бергә уянабыҙ, яҡшы кәйеф бүләк итергә тырышабыҙ. "Иртәнге сәфәр" менән йоҡоһонан тороп, "Аулаҡ"ты тыңлап йоҡлап китеүсе тыңлаусыларыбыҙ көндәренең уңышһыҙ үтеүенә зарланғаны юҡ әле.

**Ф. Ҡасимов:** Ғөмүмән, беҙ үҙебеҙ, эшкә нисек тә йоҡлап ҡалмаҫҡа, тигән хәүеф менән йөшәйбеҙ. Әтәс йоҡлаһа, тауыҡтар ҙа иртә тормай. Халыҡты йоҡоһонан уятып, күңелле хәбәрҙәргә ылыҡтырып, иртән иртүк баштарын эшләтергә мәжбүр итеп, көнө буйы күтәренке кәйеф менән йөрөтөү - беҙҙең маҡсат.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Юҡҡа ғына бер аҡыллы кеше: "Ауырлыҡ күтәреп, мускулдар нығына, радио тыңлап, ҡолаҡтар нығына," - тимәгәндер. "Үәт әй, түбәтәй!" уйынын көн дә тыңлай торғас, белем кимәлемде самалай башланым әле. Баҡтиһәң, ябай ғына һорауҙарға ла яуап биреүе еңел түгел икән. Шулай булғас, тулҡынланыу тигән ғәләмәт тә барлығын иҫәпкә алып, һорауҙарға дөрөҫ яуап бирмәгәндәрҙе ғәйепләргә ашыҡмайыҡ, тип әйтмәксемен.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*БЕҘҘЕҢ ЗАМАН ГЕРОЙЫ*

# УЛАР ИСЕМҺЕҘ,

## әммә беҙҙең арала...

**Заман еле тарих биттәрен туҙҙыра. Ваҡыт үтеү менән аҡсалар үә батшалар менән бер ҡатар ҡиммәттәр ҙә алышына, йүнәлештәр ҙә үҙгәрә, урам аша һүҙылған ҡомастарҙың өндәмәләре төрләнә. Кисә табынған ҡибла шул уҡ өйҙәң башҡа мөйөшөндә булып сыға, иртәгә йәнә кире урынына ҡайтыуы ла ихтимал. Һәм, әлбиттә, ижтимағи, сәйәси, социаль сайҡалыуҙар, зауыҡтар тирбәлеүе үҙ сиратында герой төшөнсәһен дә яңыса төҫмөрләтә.**

Әлбиттә, һис үҙгәреүһеҙ ҡалған геройҙар ҙа бар. Быныһы - тәбиғи. Әйтәйек, Салауат Юлаев. Ә бына беҙ үҫкән саҡта өлгөлө шәхестәр исемлегендә Шәйехзада Бабич та, Зәки Вәлиди ҙә юҡ ине. Ысынында, уларҙың яҡты образы халыҡ күңеленән һис юйылманы. Әммә беҙ шул уҡ Зәки Вәлиди образын китаптарҙан тиҫкәре герой булараҡ уҡып үҫтек. Бында Зәки Вәлидиҙең дә, беҙҙең дә ғәйеп юҡ. Ғәйеп - идеологияла. Шуға ла идеологик геройҙар менән ысын халыҡ геройҙарын бик үлсәп ҡарарға кәрәктер. Ҡайһы саҡта улар тап килә. Мәҫәлән, шул уҡ Салауат Юлаев, Юрий Гагарин, Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин. Шул уҡ Павка Корчагин минең өсөн мәңге герой булып ҡаласаҡ. Ә ул заманда һәр ферманың, цехтың, мәктәп класының ҡыҙыл мөйөштәрен биҙәп торған политбюро ағзаларын хәҙер кемдәр иҫләй икән?! Ә Рәми Ғарипов булды, бар һәм буласаҡ.

Бөгөнгө геройҙарҙың ҡайһылары, моғайын, ваҡыт үтеү менән тарих төпкөлөнә юл алыр. Яңы осор яңы шәхестәр күтәрер. Тик барыбер һуңғы башмағын һуйып, шуның аҡсаһына халҡыбыҙ ижады гәүһәрҙәрен йыйырға сығып киткән Мөхәмәтша Буранғолов герой булып ҡаласаҡ. Уға һаман һәйкәл юҡ, тиҙәр. Дөрөҫ. Кәрәк! Мотлаҡ! Әммә ул сәсәндән "Урал батыр" эпосын яҙып алып, халҡына тапшырыуы менән үҙенә лә, халҡына ла мәңгелек һәйкәл ҡуйҙы.

Ә бөгөнгө көн геройҙары? Улар исемһеҙ... Минең өсөн кем артыҡ сәбәләнмәй, ярһып күкрәк туҡмамай; эсеп, юлдан яҙып йөрөмәй, ата-әсәнен ихтирам итә, туғандарын ситкә ҡаҡмай; малын да табып, болон да юллап, кеше араһында кәм-хур итмәй, етеш кенә итеп ғаиләһен ҡарай; инсафлы, тәүфиҡлы, телен, илен, халҡын һөйөр балалар тәрбиәләй - шул герой. Илде лә, милләтте лә, асылда, шулар тота. Һәр ауылда, бөтә ҡалаларҙа ла бар ындай геройҙар. Китапта ла, телевизорҙа ла түгел, күктән дә төшмәгәндәр, һыуҙан да сыҡмағандар - улар беҙҙең арала. Баҫалҡы ғына итеп һәүетемсә генә донъя көтәләр. Мин уларға һоҡланам, улар менән ғорурланам.

Тағы ла шәхсән үҙемдең бер геройымды айырып күрһәтер инем. Ул - әсәйем. Кешелеклелектән дә, кеселеклелектән дә иң бөйөк өлгөһө ул минең өсөн. Атайым мәрхүм булғас, ул утыҙ ике йәшендә дүрт бала менән ҡала. Ошонан һуңғы ҡалған бөтә ғүмере тотош үҙ-үҙен ҡорбан итеү: балалары өсөн яныу, көйөү (ихластан таныйым: яндырҙыҡ та, көйҙөрҙөк тә, ғәфү ит, әсәй), улар өсөн "ут йотоу", төндө - көнгә, көндө - төнгә ялғау һәм... теште ҡыҫып түҙеү. Сабырлыҡтың да, түҙемлектең дә иң бөйөк өлгөһө ул минең өсөн. Оҡшарға тырышмайым уға. Бары иҫән сағында уны ризалатырға ине...

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ,**
**шағир, "Шоңҡар" журналының**
**баш мөхәррире.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТОРЛАҠТЫ ЙЫШ АЛЫШТЫРЫУ...

## сәләмәтлекте ҡаҡшата

■ Һуңғы ваҡытта сәстәрҙе таҙартыуҙың яңы ысулы - co-washing ҙур популярлыҡ яулай бара. Был осраҡта сәстәрҙе шампунь менән түгел, ә кондиционер менән йыуырға кәрәк. Косметологтар белдереүенсә, бары тик кондиционерҙы ғына йәлләргә ярамай. Ул күбекләнеп торһон тиһәгеҙ, бер аҙ һыу ҡушырға була. Иң мөһиме, кондиционер составында силикон булмаһын. Был ысул көсһөҙ һәм ҡоро сәстәрҙең торошон яҡшырта, уларҙы тарауы еңелләшә. Уның тәьҫирен яҡшыртыу өсөн кондиционерға зәйтүн майы, бал, бер-ике тамсы сәй ағасы майы йәки бөтнәк өҫтәргә була.

■ Миҙгелдәр алышынған мәлдә мунсаға йөрөгөҙ, тип кәңәш итә табиптар. Мунса был ваҡытта көстәрҙе тулыландырыу өсөн иң яҡшы сара булып тора. Миндек тирелэге, мускулдарҙағы, тире аҫтындағы кҿҙәнәктәрҙә ҡан әйләнешен яҡшыртып ҡына ҡалмай, тын юлдарына ла ыңғай йоғонто яһай, бынан тыш, матдәләр алышыныуы тиҙләнә. Миндектән тыш, белгестәр бесән вағы быуының да файҙалы булыуын белдерә. Бесән еҫе һәм ҡайнар быу бактерицид тәьҫиргә эйә, ул һауалағы һәм тирелэге бактерияларҙы шунда уҡ юҡҡа сығара. Мунсалағы ҡайнар быу һәҙәмтәһендә кеше йышыраҡ һәм тәрәнерәк тын ала башлай, тимәк, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына күнекмә яһала.

■ Асығыуҙың синтетик аналогы грелин яман шеш менән сирләүсе ауырыуҙарҙа йышыраҡ осраған аппетит булмауы проблемаһын хәл итә аласаҡ. Грелин эсәктәрҙә барлыҡҡа килә һәм асығыу тойғоһо өсөн яуап бирә. Японияның Осаки университеты ғалимдары был гормондың эшмәкәрлек механизмын тикшереү һөҙөмтәләре артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусыларға ярҙам итер тиған маҡсатта үткәрә. Әммә әлегә уларҙың хеҙмәте уңышҡа өлгәшмәгән, шулай ҙа был гормон химиотерапия үткәреүселәрҙең тормошон еңеләйтеү мөмкинлеге бирәсәге асыҡлана.

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейененң дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһы ла кәүҙәне һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртәнге мәл - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авив университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Профессор Даниэль Якубович әйтеүенсә, иртән мотлаҡ шоколад ашаһаң, көнө буйы татлы ризыҡтар ашағыһыҙ килмәйәсәк.

■ Ата-әсәләре менән бер туҡтауһыҙ торлаҡ алыштырып йөрөргә мәжбүр булған балалар йышыраҡ ауырый, ти белгестәр. Былдай һығымта Шотландияла үткәрелгән тикшеренеүҙәр ярҙамында яһалған, унда 15, 35 һәм 55 йәштәге 850 кеше ҡатнашҡан. 20 йыл буйына уларҙың барыһының да йәшәү рәүеше, сәләмәтлеге, ғәҙәттәре күҙәтеп барылған. Тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың бишәүһе йәшәү урынын бер тапҡыр ҙа алыштырмаған, 59 проценты бер йәки ике тапҡыр алыштырған, 21 проценты гел күсенеп йөрөгән. Кем үгәй атай менән йәшәгән, улар араһында күсенеүселәр йышыраҡ булған. Ике йәки өс бала тәрбиәләүселәр ҙә йәшәү урынын күберәк алыштырған. Дөйөм алғанда, кемдәрҙең бала сағы бер урында ғына үтмәгән, уларҙың һаулығы менән дә проблемалар йышыраҡ осраған, улар тиҫтерҙәренә ҡарағанда көсһөҙөрәк булған, йышыраҡ психологик стресс кисергән, эскән һәм тәмәке тартҡан.

ҒАИЛӘ ҠОРО

**Башҡорт эстрадаһында сәхнәлә лә бергә ижад иткән, тормошта ла бер йән булып, ғаилә ҡороп йәшәгән ишлеләр байтаҡ ҡына. Бөгөнгө ҡорҙа ҡатнашыусы Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары Лилиә Ишемйәрова менән Урал Мортазин ошондай ғаиләләрҙең береһе. Йәш ғаилә Зөлхизә исемле ҡыҙ, Арыҫланбай менән Ишморат атлы улдар тәрбиәләй. Ҡала шарттарында күп балалы ғаилә статусын күтәреү еңелме, ижад кешеһенең ғаиләһенә ваҡыт ҡаламы - Мортазиндар бөгөн ошо һәм башҡа ғаилә серҙәре менән уртаҡлаша.**

# ҠЫҘЫ БАР - НАҘЛЫ,

## улы бар - терәкле



**➔ Башҡорт тәбиғәте менән йырсы һәм бейеүсе булһа ла, профессиональ сәхнәгә артыҡ ынтылып бармай. Дөрөҫөн әйткәндә, уларҙы етди һөнәр итеп ҡабул итмәй ҙә шикелле. Һеҙ икегеҙ ҙә сәнғәт кешеһе, сәхнәгә һеҙҙе ниндәй юлдар алып килде?**

**ЛИЛИӘ:** Мин мәктәптә уҡыған саҡта уҡ йыр буйынса төрлө конкурстарҙа ҡатнаша инем, әммә атайымдың "Ҡыҙым, һине Сибайға алып барам, уҡытыусыға уҡытам", тигәненә күнеп, уҡытыусы булырмын тип уйлап йөрөнөм. Минә ун дүрт йәш тирәһе булғанда "Башҡортостан" радиоһы конкурс үткәрҙе һәм мин "Халыҡ йыры - 91" бәйгеһендә гран-при яуланым. Шул саҡта Сәрүәр апай Сурина, Ришат ағай Рәхимов минә: "Һылыу, һинә Өфөлә уҡырға кәрәк, сәнғәт училищеһына кил", - тип саҡырып киттеләр. Ошо ваҡиғанан һуң өйгә ҡайттым да, мин артист булам, тинем. Әсәйем, артистың тормошо ауыр, балам, унын ғаиләһе лә, балалары ла, өйө лә булмай, юлда йөрөй ҙә ята, тиғән булды. Шулай ҙа минең телэгемә ҡаршы килмәнеләр, атайым үҙе Өфөгә алып килеп, мине Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға ҡалдырып китте. Һөнәр нескәлектәренә Әлфиә Мәсәлимова төшөндөрҙө, ул мине үҙ балаһындай ҡарап, ярҙам итеп уҡытты, композитор Салауат Низаметдинов менән таныштырҙы. Шулай студент саҡтан Салауат ағайҙың студияһында эшләп, унын менән гастролдәргә йөрөй башланым. Ул мине башлап профессиональ сәхнәгә сығарҙы - минең өсөн "Һағын мине" тигән йыр яҙҙы һәм беҙ уны икәүләп тәүге тапҡыр Яңы йыл тапшырыуында йырланыҡ.

**УРАЛ:** Лилиәне тыңлап ултырам да, көнләшеп ҡуям, сөнки минең сәнғәткә юлым улай шыма ғына булманы. Мин ҡала интеллигенцияһы ғаиләһендә тыуғанмын. Бәләкәйҙән бейеүгә ынтылышым булһа ла, атайым үҙе математик булараҡ, минең башҡа һөнәр һайлауымды күҙ алдына ла килтермәй ине. Ул бейеү етди шөғөл түгел, тип иҫәпләне, ә әсәйем, киреһенсә, мине гел хупланы, Комаров исемендәге пионерҙар һарайына бейеү түңәрәгенә йөрөттө, артабан Башҡорт дәүләт университетында уҡыған саҡта "Ирәндек" бейеү ансамблендә бейеүемә лә ихтирам менән ҡараны.

Хәҙер үҙем атай булғас, атайымдың һөнәренең атайҙан - улға, улдан - ейәнгә күсеп, тотош математиктар династияһы булдырыу телэгенең изгелеген аңлайым, сөнки һәр атай улының үҙ юлын дауам итеүен теләй. Тик урыҫтар: "Талант балаларҙа ял итә" тейме әле? Шулай ҙа мин математика факультетына уҡырға барҙым. Ғөмүмән, математика - ул шундай фән, мин уны ысынлап та бөтә фәндәрҙең батшаһы тип иҫәпләйем, сөнки математиканы тормоштоң бөтән өлкәләрендә лә ҡулланырға була. Мәҫәлән, беҙ атайым менән ултырып, төрлө темаға һөйләшкәндә, теге йәки был ваҡиғаға аналитик анализ бирәбеҙ, үҙебеҙсә ниндәйҙер фараздар ҙа ҡылабыҙ.

БДУ-ны тамамлағас, Рәсәй Фәндәр академияһының Иҡтисад һәм социология институтына стажер-тикшереүсе булып эшкә лә урынлаштым. Атайым шул саҡта, бында ла эшең бармай, йә математиканы, йә бейеүҙе һайла, тип, минең алдыма һорау ҡуйҙы, һәм мин бейеүҙе һайланым. Ололарҙың бәндәне яҙмыш та, ризыҡ та йөрөтә тигәненә мин ышанам хәҙер. Тап шул ваҡытта "Ирәндек" ансамбленең художество етәксеһе Гөлназ Аҡназарова Сибай филармонияһына эшкә киткәйне, ул мине Сибайға саҡырҙы.

**➔ Математика фәненең бөтә нескәлектәрен өйрәнеү тормошто аңларға ярҙам иткән кеүек, математик ир-егеткә ҡатын-ҡыҙҙы аңлауы һәм яулауы ла еңелерәктер инде? Нисегерәк таныштығыҙ, ғаилә ҡорҙоғоҙ?**

**ЛИЛИӘ:** Урал эшкә килгәндә, мин Нәсимә һәм Азамат Тимеровтар, Сәғиҙулла Байегет, Сулпан Асҡарова, Илшат Яхин, Нәсимә Ғиззәтуллиналар менән филармонияла ике йыл эшләп өлгөргәйнем. Дөрөҫөн әйткәндә, минә Урал беренсе күреүҙән бөтөнләй оҡшамаңы, бигерәк ете, бер ҡасан да йылмаймай. Һуңғараҡ, Өфөлә гастролдә саҡта бер табынға эләктек тә, шунда ғына яҡындараҡ таныштыҡ һәм мин уға ғашиҡ булдым. Уртаҡ темалар күп булыу асыҡланды, унын яғымлы итеп һөйләшә белеүе оҡшаны. Оҙаҡ дуҫлашып йөрөмәнек, Францияға гастролгә барып ҡайтҡандан һуң, өйләнештек. Ғаилә ҡороуыбыҙға 15 йыл булып китте инде.

**УРАЛ:** Математик булыуым тормошта ярҙам итә лә, тик ҡатын-ҡыҙ бер ниндәй ҙә математик формулаға йәки ҡанунға һыймай шул. Уларҙың нимә эшләрен, нимә әйтерен алдан белеп булмай, был уйҙар һәм ҡылыҡтар логикаға ла буйһонмай. Башҡалар ҙа иғтибар итәләр, бына тап ошо сәбәптәр арҡаһында һуңғы арала юлда йөрөүе ауырайҙы, сөнки ҡалала машина йөрөтөүсе ҡатын-ҡыҙҙар күбәйҙе. Шулай ҙа дөрөҫ итеп йөрөргә өйрәнеп алһа, юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен гүзәл заттан да теүәл үтәгән кеше юҡ, тиҙәр, әммә эмоциональ ситуациялар килеп тыуһа, уларҙы аңлап булмай инде.

**➔ Гәзит уҡыусылар һеҙҙе күп балалы атай һәм әсәй итеп тә белә. Элек ауылдарҙа ғына күҙәтелгән был күренеш, ҡала ерлеге өсөн дә тәбиғи була башланы. Өс бала тәрбиәләү өсөн өсләтә көс кәрәк, нисек эшләп тә, балалар тәбиәләп тә өлгөрәһегеҙ? Ҡыҙ һәм малай тәрбиәләү араһында айырма бармы?**

**ЛИЛИӘ:** Бер ҡасан да күп бала табыуҙан ҡурҡырға ярамай. Мәҫәлән, "Күп баланы нисек ҡарарбыҙ һуң?" тигән уй бер тапҡыр ҙа башҡа инеп сыҡҡаны булманы. "Һәр бала үҙ ризығы менән тыуа" тигән бик боронғо мәҡәл бар, ул ысынлап та шулай икән. Ошоға тиклем ниндәйҙер матди ҡыйынлыҡтар тыуғаны ла булманы.

**УРАЛ:** Аҡса етмәй, тип мыжып, зарланып йөрөһәң, бер ҡасан да етмәй ул. Аҡсаның бик ҡыҙыҡ бер үҙенсәлеге бар: һин уға ниндәй мөнәсәбәттә, ул да һинә шулай, шуға ҡәнәғәт була белергә кәрәк.

**ЛИЛИӘ:** Зөлхизә тыуғанда бөтөнләй йәш булғанбыҙ, ә малайҙарыбыҙ үҙебеҙ ҙә бер аҙ олоғая төшөп, бала тәрбиәләүҙә ярайһы тәжрибә туплағас тыуҙы. Бөгөн мин бала үҫтереүҙең тәмен бөтөнләй икенсерәк тоям. Ҡыҙ бала итәкҡә йәбешеп үҫә лә китә, малайҙарға айырыуса иғтибар кәрәк икән. Ғөмүмән, ҡыҙ атайға яҡыныраҡ булһа, малайҙар әсәйҙәргә яҡын була, тиҙәр, быны мин ҡәйнәмә ҡарап та әйтә алам. Унын ике улы кеүек, олоғайған көнөмдә улдарым менән өсөн өҙөлөп торһа, минән дә бәхетле кеше булмаҫ ине. Ишморатҡа йәш ярым ғына әле, шуға мин улдарым менән күберәк өйҙә ултырам, уларға нимә насар, нимә яҡшы икәнен йышыраҡ минә төшөндерергә тура килә. Әкиәттәрҙе күп уҡыйбыҙ.

**УРАЛ:** Атай өсөн ҡыҙҙар ныҡ яҡын була икән шул. Зөлхизәнең бәләкәй сағын шул тиклем һағынам, үҙе бәләкәй генә, ә үҙе, атай, атай, тип өҙөлөп күҙенә генә ҡарап тора. Әлбиттә, хәҙер үҫә

✓ *Мин үҙемде тыумыштан уҡ теләһә ниндәй ҡурҡыуҙарҙан, кире уйҙарҙан һәм кәмселектәр комплексынан өҫтөн булғаным өсөн лайыҡлы баһалайым. Мин үҙемде яратыусы Аллаһы Тәғәләнең ҡәҙерле бер балаһы булғаным өсөн яратам.*



килә арабыҙҙа мөнәсәбәттәр башҡасараҡ була бара, минән йәшергән серҙәре барлыҡҡа килде. Атай кеше өсөн быны кисереүе ауыр, имеш. Ҡатын-ҡыҙ бәләкәй саҡтан уҡ бик сыҙамлы була, үҙен-үҙе һаҡлап ҡына йөрөй. Ә малайҙарҙы бәйҙә тотоп тороуы ауыр, улар барыһын да үҙҙәре аша үткәрмәйенсә туҡтамай. Ҡыҙ һәм малайҙар араһында ғына түгел, малай менән малай араһында ла айырма була икән.

**ЛИЛИӘ:** Ишморатым Уралға оҡшаған, ҡәйнәм дә шулай ти. Хатта Урал ниндәй ризыҡ ярата, ул да шуны ларатып ашай. Ә Арыҫланбай үтә һайлана, бешеп ултырған ризыҡтың еҫе генә оҡшамаһа ла, аш бүлмәһенә инеп тә тормай. Ул хислерәк, ҡапыл тоҡана, ә Ишморат тыныс. Сәләмәтлек яғынан ҡыҙҙар түҙемлерәк.

**УРАЛ:** Ир-ат бала булыуҙан бер ҡасан да туҡтамай ул. Нимә генә тимәһендәр, ул һәр ваҡыт үҙенә әсәйҙе алыштырырҙай кешене эҙләй. Ир-ат ҡатынды әсәйгә оҡшатып һайлай, тигәндәре лә дөрөҫ.

Ҡатын-ҡыҙ йылы һүҙҙәр ярата, быны махсус рәүештә улдарым алдында эшләйем, сөнки әсәләренә ниндәй баһа биреүем, уны нисек ҡабул итеүем, уға мөнәсәбәтем улар өсөн бер тәрбиә өлгөһө булып тора.

**➔ Балаларығыҙҙың сәнғәт йүнәлешенән китеүен теләйһегеҙме, әллә ҡартатай уларҙан математик яһарға хыялланамы?**

**УРАЛ:** Балаларҙың һөнәр һайлауына ҡыҫылмаясаҡбыҙ, әммә йүнәлеш бирәсәкбеҙ. Үҙенден киләсәгенде тойғолар тәьҫирендә генә түгел, ә айыҡ аҡыл менән уйлап төҙөргә кәрәк. Әгәр ҙә улдарым йәки ҡыҙым килеп, мин теге йәки был эш менән шөғөлләнергә уйлайым, тиһә, мин уларҙан, бөгөнгө заман теле менән әйткәндә, бизнес-план һораясаҡмын һәм ул мине ышандыра алһа, фатихамды бирәсәкмен. Кеше үҫә килә уның хыялдары үҙгәрә, иң мөһиме, уның үҙен шәхес итеп тойорлоҡ ятраҡан эше булһын.

**ЛИЛИӘ:** Зөлхизә менән - һигеҙ, Арыҫланбай менән ете айға тиклем сәхнәлә йырлап йөрөгәс, ҡорһаҡта саҡта уҡ уларҙа йыр-бейеүгә һөйөү һалынғандыр, тим. Сәнғәткә тартымдары бар былай...

**УРАЛ:** Малайҙар әле бәләкәй, ә бына Зөлхизәгә артист һөнәренең ауырлығын аңлатабыҙ. Сөнки алҡыштарҙан тыш, сәнғәт донъяһының кухняһы ла бар. Иң мөһиме - ошо кухняла түҙә алыу. Алҡыштар - наркотик кеүек, артист унһыҙ йәшәй алмай. Тамашасы ҡул сабып, һине юғарыға сөйә башлаһа, ерҙә торһаң да, осоп киткән кеүек булаһың. Һин шуны яратаһың, ошонан айырыла алмайһың. Әммә был һөйөүҙе ҡара тирең менән яуларға кәрәк.

**➔ Мортазиндар ғаиләһендә кем баш, кем муйын? Кем кемдең таҡмағына бейей?**

**УРАЛ:** Башҡорт ғаиләһендә, ғаилә башлығы мотлаҡ ир кеше була, тигән яҙылмаған ҡанун бар, мин үҙем дә шундай ғаиләлә үҫкәнмен, үҙемдең ғаиләмдә лә ошо традицияны һаҡлайым. Баш булыу - ғаиләң өсөн тулы яуаплылыҡты үҙ иңеңә алыу, тип аңлайым. Шулай ҙа муйын булыу күпкә ауырыраҡтыр, сөнки ҡатын-ҡыҙҙан күп нәмә тора, ул ирҙе күтәрә лә, төшөрә лә ала. Мин был йәһәттән Лилиәгә рәхмәтлемен, кәләшем ысын мәғәнәһендә беҙҙең ғаиләбеҙ усағының ҡото.

Ғаиләлә бәхетле булыу өсөн бер нәмәне аңларға кәрәк: һәр кемдең бәхете үҙенең өйөндә һәм үҙенең ҡулында. Бөгөнгө тормош ниндәйҙер бер сериалға әйләнеп барған кеүек. Кеше ниндәй машинала йөрөй, ниндәй фатирҙа йәшәй, ҡайҙа ял итә, нимә ашай, быларҙың барыһы ла ситтән бик ентекләп, етмәһә, көн һайын күҙәтелә һәм һөйләнелә. Шуның арҡаһында йәмғиәттә сәләмәт булмаған көнләшеү барлыҡҡа килә. Ә себендән фил яһау өсөн күп кәрәкмәй, әгәр ҙә ҡатын башҡаларға ҡарап, иренә бер туҡтауһыҙ мыжый, унан нимәлер таптыра башлай икән, был ваҡлыҡтар барыһы ла ғаиләне тарҡатыу көсөнә эйә.

**➔ Ҡалала милли йолаларҙы, үҙенсәлектәрҙе һаҡлап ҡалыуы ҡыйынраҡ, шуға ла телгә, илгә һөйөү йышыраҡ ғаилә эсендә тәрбиәләнә. Һеҙҙең ғаиләлә быға иғтибар биреләме?**

**УРАЛ:** Беҙ рус телендә уҡыһаҡ та, атайым бер ҡасан да өйҙә русса һөйләштермәне. Балаларыбыҙ менән башҡортса һөйләшәбеҙ, уларҙы йышыраҡ ҡартатай менән өләсәй янына йөрөтәбеҙ. Бик яҡын аралашалар, атайым "Минең улдарым килгән икән, әйҙә, бергәләп сәй эсәйек", тип ололап өндәшеп, тегеләрҙең күңелен үҫтереп ебәрә. Атайым бигерәк тә уларҙың башҡортса һөйләшеүе менән ғорурлана. Ир бала ҡартатай өсөн яҡын була икән, сөнки улар уның тоҡомон дауам итеүселәр.

Һин башҡорт икәнһең, үҙеңдең милләтеңде күтәрә белергә, милләттәштәреңдән бер ниндәй файҙа көтмәйенсә, уларға ярҙам итергә кәрәклекте ғаиләлә өйрәтергә кәрәк. Мине атайым шулай тәрбиәләне, мин үҙемдең малайҙарыма, ҡыҙыма шуны һеңдерергә тырышам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғаилә тормошонда ятраҡан кешеңдең уйҙары, тойғолары, инаныуҙары, ынтылыштары менән иҫәпләшергә кәрәк, тиҙәр. Мортазиндар ғаиләһендәге кеүек, бер маҡсат менән йәшәп, бала тәрбиәләгәндә бер һүҙле булғанда тағы ла бәхетлерәк булырға мөмкин икәнлеген тойғанһығыҙҙыр, ҡәҙерле уҡыусылар. Уларға ижади үрҙәр, илһөйәр улдар һәм ҡыҙҙар тәрбиәләүҙә уңыштар теләп ҡалайыҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аҫҡы аң

**Һеҙ гений һәм зиһенегеҙ тураһында күберәк белгегеҙ килә. Аң менән яҡшы танышһығыҙ инде. Уҡығанда, хәрәкәт иткәндә һәм визуаллаштергәндә уны файҙаланаһығыҙ. Әммә аҡылдың аңлатып булмаған башҡа формалары тураһында бер нәмә лә белмәйһегеҙ.**

Ғәҙәттә, эшмәкәрлектең ҡайһы бер төрҙәрен аҡыл менән бәйләйҙәр. Ғәмәлдә, аңлатып булмаған нәмәләр ике төргә бүленә: аҫҡы һәм юғары аңға. Аҫҡы аң хәтирәләр һаҡлай һәм тәндең автоматик функциялары менән идара итә. Юғары аң, Һеҙҙең Юғары минегеҙ бөтөн киңлекте тултырған дөйөм кешелек аңы менән бәйләнеште кәүҙәләндерә.

Аңдың өс өлөшөнөң яҡшы аналогы булып ҡул суҡтары тора. Уларға ҡарағыҙ һәм үҙегеҙҙе - бер, мине икенсе бармаҡ итеп күҙ алдына килтерегеҙ. Һеҙ һайлаған бармаҡтың тырнағы уның башҡа участкаларынан айырылып тора. Уны аҫҡы аң менән сағыштырырға мөмкин. Ул бары тик һеҙҙеке генә. Бармаҡтың төп өлөшө - аңлаусы аҡыл. Ул да ҡулдан айырым. Шуға ла уйҙарығыҙ бары тик һеҙҙеке генә. Бармаҡ ус - юғары аң менән тоташа. Әммә был өлөш бары тик һеҙҙең генә милек түгел! Уның аша һеҙ минең менән дә, башҡалар менән дә, йәғни андар берлеге менән бәйләнешәһегеҙ.

Был өлкәне нисек атаһағыҙ ҙа тап шунда һеҙҙең гений йәшәй ҙә инде. Идеялар ҙа шунан сыға. Уңайлы итеп ултырып, күҙҙәрегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алыу менән һеҙ шунда күсәһегеҙ.

## Һеҙ - берҙәм Ғаләм үҙәге

Һуңғы биткә еткәс, мин һуңғы һүҙҙең, һығымтаның матур булыуын теләп мөрәжәғәт иттем - ул уҡыусыны илһамландырырға, уның өмөтөн уятырға, алға, яңы бейеклектәргә ынтылыш бирергә тейеш ине. Шул мәлдә миңә Лондондағы яҙыусы дуҫымдың хатын килтерҙеләр. Унда һоҡланғыс фекерҙәр бар ине. Уларҙы яйлап, һәр һөйләм артынан пауза эшләп, раҫлауҙарығыҙҙың мәңгелек залдары буйлап үтеп, кешелеккә, яҡындарығыҙға ярҙам итеүен аңлап уҡығыҙ.

- Мин үҙемде үҫеүсе һәм күпте белергә ынтылыусы булараҡ ҡәҙерләйем.
- Мин үҙемде тормошҡа, мөхәббәткә, шатлыҡҡа, тыныслыҡҡа һәм именлеккә лайыҡ булғаным өсөн яратам.
- Мин үҙемде Аллаһы Тәғәлә кеүек яратылғаным өсөн ихтирам итәм.
- Мин үҙемде уҡыуға һәләтле булыуым, хәҙер һәм ошонда тормоштан ҡәнәғәтлек ала белеүем өсөн маҡтайым.
- Мин үҙемде тыумыштан уҡ теләһә ниндәй ҡурҡыуҙарҙан, кире уйҙарҙан һәм кәмселектәр комплексынан өҫтөн булғаным өсөн лайыҡлы баһалайым.
- Мин үҙемде ысынбарлыҡта нисек бармын, шулай булып ҡалғаным, аҙым һайын ошо ысынбарлыҡты күрһәтә алғаным өсөн ихтирам итәм.
- Мин үҙемде яратыусы Аллаһы Тәғәләнең ҡәҙерле бер балаһы булғаным өсөн яратам.
- Мин үҙемдә тик яҡшы сифаттарҙы ғына күрәм: түҙемлек, шәфҡәтлелек, наҙлылыҡ һәм матурлыҡ.
- Мин үҙемә тоғро булырға ант итәм һәм хәтеремдә Аллаһы Тәғәләнең ҡәҙерле һәм һөйкөмлө балаһының - үҙемдең образымды һаҡларға һүҙ бирәм.
- Эйе, мин Аллаһы Тәғәләнең һөйөклө балаһы. Мин быны ҡабат-ҡабат таныйым һәм үҙемә ышанырға һүҙ бирәм.Рәхмәт Һиңә, Аллаһы Тәғәлә!

**Роберт СТОУН.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Спиртлы эсемлектәр тураһында

Ҡайһы берәүҙәр, араҡы - тормош эликсиры, барлыҡ ауырыуҙарҙан һәм проблемаларҙан дауа, тип иҫәпләй. Ысынлап та, кеше иҫерек саҡта бар донъяһын онота, "юғала", әммә был торошҡа мәңгелеккә китергә лә мөмкин бит.

Спирт ауыҙға килеп эләгеү менән һеҙ уны тиҙерәк йоторға, ҡабымлыҡ ҡабырға, һыу эсергә, организм шок хәленә килмәҫ элек уны алдарға тырышаһығыҙ. Әммә организм барыбер ҡаршылаша - күңел болғана, баш ауырта, хәлһеҙлек, һүлпәнлек тойола. Йәғни организм төрлөсә һеҙгә спирттың ағыу булыуы тураһында сигнал бирә. Әгәр араҡы файҙалы булһа, уны эскәндә организм ҡаршылашмаҫ ине, шулай бит?

Шул тиклем тырышып рекламаланған һыраға гормональ препараттар ҡушыла. Шуға күрә уға организм тиҙ күнегә һәм уны даими талап итә, үҙе интенсив рәүештә тарҡала башлай. Һыра эскән ирҙәрҙең мускулдары урынына май күҙәнәктәре үҫә (эстәрендә, күкрәктәрендә, янбаштарында), улар ҡатын-ҡыҙға оҡшай башлай, тауыштары ла нәҙегәйә, потенциялары кәмей. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың, киреһенсә, тауыштары ҡалыная, тиреләрендә төктәр үҫә, улар ирҙәргә оҡшай башлай.

Тағы ла, кеше бер генә йотом спиртлы эсемлек эсһә лә, ҡандағы эритроциттар (ҡыҙыл ҡан тәнсәләре) бер-береһенә йәбешә һәм баш мейеһенең нейрондары туҡланыуһыҙ ҡала, сөнки тар капилляр аша (кислород бирер өсөн) ни бары бер генә эритроцит үтә ала (организм бик рациональ). Тимәк, иртән һәләк булған нейрондарҙың ҡәберлеге барлыҡҡа килә - шуға күрә баш ауырта ла инде!

Организм, интоксикацияға юл ҡуймау һәм мейенең үле күҙәнәктәрен йыуып төшөрөү өсөн, баш һөйәге аҫтына һыу туплай башлай, һуңынан беҙ бәҙрәфкә йүгерәбеҙ - бушанабыҙ. Нимәнән?

## Электр энергияһы тураһында

Замана кешеһенең ерҙән айырылыуы (асфальт, ленолиум, аяҡ кейеме һ.б.), синтетика әйбер кейеүе һөҙөмтәһендә тәндә организмға бик зыянлы статик электр заряды туплана. Был тиҙ арыуға, ҡабыныусанлыҡҡа, баш ауыртыуына һәм башҡа ауырыҡһыныуҙарға килтереүе мөмкин.

Тәжрибәләр шуны күрһәтә, кеше ерҙән айырылып, теләһә ниндәй аҡыл йәки физик эш эшләһә, ыңғай - плюс заряд арта. Кеше одеял ябынһа, ул көсөргәнеше 100 вольтҡаса еткән зарарлы статик заряд менән зарядлана. Шуға күрә ергә тоташыу, ер менән тәбиғи бәйләнеш бик мөһим!

Академик А.А. Микулин, ергә тоташыу мотлаҡ кәрәк, хатта аяҡ кейемендә ток үткәреүсе табансалар булдырыу мөһим, тип яҙа. Бина эсендә ул металл тимерсыбыҡтың бер осон йылытыу батареяларына, икенсе осон тәнгә тоташтырып ҡуйырға тәҡдим итә. Аныҡлап әйткәндә, йоҡлаған ваҡытта йомшаҡ тимерсыбыҡтың бер осон аяҡтарығыҙға нығытырға йәки простыня өҫтөнән һуҙырға кәрәк, ти.

Юғары вольтлы линия сымдары аҫтында, көсөргәнеш трансформаторҙары эргәһендә, электромагнит полелары сығанаҡтарына (электр двигателдәре, телевизор, радиоалғыс, ҡыҫҡа тулҡынлы мейес һ.б.) яҡын булырға ярамай. Улар барыһы ла организмға кире йоғонто яһай. Әгәр электр ҡорамалдарын ҡулланмайһығыҙ икән, уларҙы розетканан һурып, һүндереп ҡуйырға кәрәк.

Шул уҡ ваҡытта яланаяҡ йөрөү, саф урман һауаһын һулау, йылғала һыу инеү бик файҙалы. Былар барыһы ла һеҙҙең магнит полеһын гармониялаштыра һәм балансҡа килтерә.

Тәбиғәт менән гармонияла, берлектә булырға кәрәк!

**Рауфан МОРТАЗИН.**

ҮӘТ ӘЙ!

# АМЕРИКАНЫ...

## уҙып киттек

**Енәйәттәр арҡаһында донъяла һәр минут һайын бер кешенең ғүмере өҙөлә. Кеше үлтереү менән бәйле енәйәттәр һаны буйынса беренсе урында Гондурас, йыл буйына ҡылынған енәйәттәрҙең абсолют һаны буйынса - Бразилия килә. Тәүге илдә 100 мең кешегә 82,1 үлем тура килһә, Бразилияла - 22,7 кеше.**

Ә бына үҙҙәренең ыңғай өлгөһө менән Европа халҡы һәм япондар ғорурлана ала. Шулай ҙа иң тыныс ил - Япония. Унда 100 мең кешегә ҡарата ни бары 0,5 кешенең генә ғүмере ҡыйылған. Был хаҡта "Комсомольская правда" гәзите хәбәрсеһенә Интерполдың Рәсәйҙәге бюроһының элекке етәксеһе Владимир Овчинский хәбәр итә. Был исемлектә Рәсәй урта тирәлә - беҙҙәге криминаль күрһәткес 100 мең кешегә 11,2 тура килә. Бөтә был мәғлүмәттәр БМО-ның "2011 йылда глобаль гомицидты тикшереү" тип аталған докладынан алынған (гомицид - кеше үлтереү). Үрҙә килтерелгән мәғлүмәттәр эсенә һуғыш ҡорбандары, сыуалыштарҙа һәләк булғандар, суд ҡарары буйынса үлем язаһына хөкөм ителгәндәр инмәгән. 2010 йылда Ер шарында енәйәтселәр ҡулынан үлеүселәр һаны 468 000 кеше тәшкил итә. Континенттар буйынса ҡараһаҡ, үлтереүҙәрҙең 36 проценты Африкаға, 31-е - Американың ике ҡитғаһына, 27-һе - Азияға, 5-е Европаға һәм бер проценты Океанияға тура килә.

Кемдәрҙе күберәк үлтерәләр? Донъя буйынса үлтерелгән кешеләрҙең 82 проценты - ир-ат, ә 18-е ҡатын-ҡыҙ енесенән. Владимир Овчинский әйтеүе буйынса, Рәсәйҙәге хәлдәр был тикшеренеүҙә күрһәтелгәнгә ҡарағанда күпкә хөртөрәк. Сөнки күп енәйәттәргә эштәр ҡуҙғатылмай, улар йәшерелә. Рәсәй ғалимдары иҫәпләүе буйынса, ысынбарлыҡта Рәсәйҙә үлтереүҙәр һаны һуңғы ун йыл эсендә арта барып, 2009 йылда ғына ла 46,2 меңгә еткән. Был һан БМО белгестәренә барып еткән булһа, Рәсәй гомицид буйынса тәүге урында килгән Бразилияны ла уҙып китер ине. "Статистика мәғлүмәттәрен боҙоп күрһәтеү арҡаһында ғына бөгөн Рәсәй иң тәүге урынды биләмәй - урта тирәлә килә", - ти белгестәр.

СӘЙӘСӘТ

# ВӘҒӘҘӘЛӘРҘЕҢ...

## ғәмәлгә ашырына өмөт бармы?

**Рәсәй Федерацияһы Президенты Д. Медведев 16 ғинуарҙа РФ субъекттары башлыҡтарын граждандар тарафынан һайлап ҡуйыу тураһындағы закон проектын Рәсәй парламенты ҡарауына сығарҙы. 2000 йылдар уртаһында "власть вертикален нығытыу" маҡсатында барлыҡҡа килгән федераль округтар, милли республикалар башлыҡтарын тәғәйенләп ҡуйыу, сәйәси фирҡәләрҙе теркәүҙә административ ҡаршылыҡтар ҡороу кеүек закон-ҡағиҙәләр, ысынлап та, федератив демократик хоҡуҡи дәүләт принциптарына ҡаршы килә. Быны ил башлыҡтары үҙҙәре лә таный башланы, бугай.**

Рәсәй тупрағында бер кеше ихтыяры менән еректерелгән федераль округтар, гөмүмән, федератив дәүләт өсөн ят күренеш. Бигерәк тә колониаль система юҡҡа сыҡҡандан һуң. Үндай институт РФ Конституцияһында ла ҡаралмаған, хатта Петр I идара иткән дәүерҙә лә булмаған. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, был институтты бөтөрөү идеяһын беренсе булып "питерсылар командаһы"нан Федерация Советы рәйесе В. Матвиенко күтәреп сыҡты һәм олигарх М. Прохоров уны һайлау алды программаһына индереп ебәрҙе. Әйткәндәй, был "үҙешмәкәрлек"кә Кремлдең фекере ишетелмәй әле.

Милли республикалар, шул иҫәптән өлкә һәм крайҙар башлыҡтарын тәғәйенләп ҡуйыу ғәмәле лә федератив дәүләт ҡанундарына һыймай. Үкенескә ҡаршы, заманында Конституцион мәхкәмә уның РФ Конституцияһына ҡаршы килеүен РФ Президентына (В. Путинға) аңлатырға батырсылыҡ итмәне генә түгел, хатта указды хуплап ҡуйҙы. Аҡрынлап был сәйәси анахронизмға күнектеләр шикелле, федерация субъекттары башлыҡтарының граждандар тарафынан туранан-тура һайлап ҡуйылыу зарурлығы Дәүләт Думаһына һайлауҙар алдынан ғына әүҙем күтәрелә башланы. "Ғәҙел Рәсәй", "Рәсәй патриоттары", "Яблоко" фирҡәләре был пунктты һайлау программаларына индерҙе. Шуныһы ғәжәп, республикалар башлыҡтары араһынан берәү ҙә ошоға тиклем дә, һуңыраҡ та бындай инициатива менән сығыш яһаманы. Күрәһең, уларға хәҙерге система отошлораҡ, сөнки бер кешегә, йәғни Кремлгә ярау еңелерәк бит.

Ә бит Рәсәйҙең федератив тәбиғәте уның өлкәләргә, хәҙерге тел менән әйткәндә, губерналарға бүленеүенән түгел, ә милли берәмектәрҙән тороуынан килә. Рәсәй Федерацияһында власть уның күп милләтле халҡы ҡулында, тигән конституцион принцип Төп законға тиктәҫкә инеп китмәгән. Тап Башҡортостан, Татарстан, Яҡутстан, Дағстан, Марий-Эл һ.б. кеүек республикалар уның федератив тәбиғәтен тәшкил итә. Тап милли берләшмәләрҙең төп халыҡтары үҙ дәүләтселегенә идара итеүенә өлгәшеү өсөн ошондай юл менән берләшергә мәжбүр булған. 1918 йылда большевиктар уларҙың милли үҙбилдәләнешкә хоҡуғын юҡҡа сығарғандан һуң империя тәҫөн һаҡлаған дәүләттә урыҫ булмаған халыҡтар өсөн башҡа юл ҡалмай. Сер түгел, элекке СССР һәм хәҙерге Рәсәй властары милли республикалар башлыҡтарының принципиһыҙлығына таянып, уларҙың хоҡуҡтарын өлкәләрҙекеге менән тиңләп ҡуйыу өсөн ҡулынан килгәндең барыһын да эшләне. Ғәмәлдә, бындай "матрешка принцибы" Рәсәй тәбиғәтенә тап килмәй. Мәҫәлән, 4 миллионлы Башҡортостан Мәскәү дәүләтенә XVI быуатта уҡ автономияны шарт итеп ҡуйып ҡушыла. Тап ошондай шарт менән 1919 йылда Совет власын таный. Көслө иҡтисади потенциалы булған Башҡортостанды хатта Ҡалмыҡстан йәки Ҡабарҙы-Балҡар республикаһы менән тиң ҡуйыу мөмкин түгел, уның статусын юғары ҡуйырға бөтә шарттар ҙа бар, тик быны күрергә, ғәмәлгә индерергә кешеһе генә табылмай.

РФ Конституцияһында нығытылған үрҙә аталған принциптар эшләмәй тороп, граждандар йәмғиәте тураһында һөйләү - буш хыял ғына. Ғәҙел һайлауҙар, граждандар мәнфәғәтен ҡүҙәткән федераль парламент, граждандарҙың бөтә ҡатламдарының да ихтирамына таянған (тимәк, коалицион) хөкүмәт булдырмай тороп, Рәсәйгә бер генә капиталист та инвестициялар һалырға ашыҡмаясаҡ. 2011 йылда илдән 80 миллиард доллар "аяҡланыуы" сәйәси режимға үҙ капиталистарыбыҙ ҙа ышаныс белдермәүе хаҡында һөйләй.

Граждандар РФ Президенты өсөн генә түгел, ә киләсәк өсөн тауыш бирәсәк 4 мартҡа күп ҡалманы. Кандидаттарҙың ғәмәлдә кемлеген, нимә вәғәҙә итеүен, уларҙың тормошҡа ашырыла ышаныс бармы-юҡмы икәнлеген, моғайын, һәр кем самалайҙыр. Капиталистик ысынбарлыҡта үткән 20 йыл ғүмер эсендә һүҙ бутҡаһына әүерелеп, ғәмәлгә ашмаған вәғәҙәләр һәр кемде уйландыра икәненә иманыбыҙ камил. Тик бөгөн власҡа килергә йыйынған ил башлыҡтарының да, йә төрлө кимәлдәге советтарға депутатлыҡҡа һайланасаҡ кешеләрҙең дә ошолар тураһында башына индереп сығарыуы шарт.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

ҺАЙЛАУҘАР

# ЭШЛЕКЛЕ КЕШЕ



**Эшҡыуарҙар - эше һүҙенән айырылмаған кешеләр. Улар ҡуйған маҡсатына өлгәшкәнсе, уға ныҡышмал бара. Һис һүҙһеҙ, шундайҙарҙың береһе - "Үҙәк баҙар" ТСК-һының генераль директоры, ҡала округы Советына депутатлыҡҡа кандидат, 2007 йылдан "Ғәҙел Рәсәй" фирҡәһе ағзаһы ИОСИФ МАРАЧ. Уның депутат булып эшләү тәжрибәһе бар - ул 2004 йылдан алып ҡала Советында халыҡ вәкиле булып тора. Уны алдына бурыстар ҡуйып, уларҙың үтәлеүенә өлгәшеүсе хужалыҡсыл кеше итеп беләләр.**

Спорт мастерлығына кандидат, һаман да спорттан айырылмай: Башҡортостандың Грек-рим көрәше федерацияһын етәкләй һәм Волга буйы федераль округының Грек-рим көрәше федерацияһының вице-президенты булып тора.

Иосиф Марачтың тормошонда мәрхәмәтлелек айырым урын биләй. Тыуған ҡалаһының патриоты булараҡ, уның артабанғы үҫеше өсөн ҙур көүәт күрә һәм РФ-ла иң яҡшы ҡалаларҙың береһе булыуын теләй.

"Минең ғаиләм, бергә эшләгән кешеләрем, ышаныс күрһәткән һайлаусыларым алдында йөкләмәләрем күп, - ти Иосиф Марач. - Мин уларҙың ошо ышаныслы аҡларға тырышам һәм үҙ ҡалама, республикама тағы ла күберәк файҙа килтерәсәгемә ышанам".

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Марач И.М. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

# Почему Уфа выбирает ЛДПР

**Одномандатный избирательный округ № 14 (Орджоникидзевский район)**

## Кандидат от ЛДПР - ЕГОРОВ Андрей Владимирович



**Родился 21 августа 1979 года в городе Уфа.**

**Образование - высшее профессиональное юридическое:**

В 1998 году закончил Топливно-энергетический колледж по специальности инженер. В 2005 году закончил Башкирский государственный университет по специальности "Юриспруденция".

**Трудовая деятельность:** С 1998 по 2003 год - работал в ОАО "Башкирэнерго" по специальности. В 2003 году возглавил юридическую организацию ООО "Регион-тендер", где и работает по настоящее время.

**Общественная деятельность:** Член ЛДПР с 2008 года. Является руководителем и координатором общественных приемных ЛДПР по Республике Башкортостан. Курирует вопросы взаимодействия и помощи гражданам, обратившимся в приемные партии, развития сети приемных в республике.

**Женат, воспитывает сына**

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Егорову А.В. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Микрюкову Е.М. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Гумерову И.Р. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

## Сергей КОННОВ: "НАМЫҪЛЫ ҺАЙЛАУҘАР ӨСӨН!"



**Ҡала округы Советына бер мандатлы 12-се һайлау округынан (Сипайлово биҫтәһе) депутатлыҡҡа кандидат**

**Коннов Сергей Дмитриевич** - "Өфө-матбуғат" МУП-ы етәксеһе. Юғары юридик белемле.

**Шәхси фекер:** Илебеҙҙә һайлауҙар тирәләй барған хәл-торошто күҙәтеп, шулай тием:

1. Әгәр һәр ҡайһыбыҙ аныҡ һәм ғәҙел гражданлыҡ позицияһында торһа ғына коррупцияны, әшнәлекте, етәкселәрҙең баш-баштаҡлығын тулыһынса туҡтатыу тураһында һүҙ алып бара аласаҡбыҙ.

2. Ҡурҡыу һәм өндәшмәй ҡалыу ваҡыты үтте. Кем генә, ниндәй генә һөнәр эйәһе булмаһын, әгәр етәксе уны: теге йәки был кандидат өсөн тауыш бирергә; РФ һәм БР ҡануниәтенә ҡаршы килеүсе ғәмәл ҡылырға; ихтыярығыҙҙан тыш агитация алып барырға мәжбүр итә икән, был фактты: видеоға йәки аудиоға яҙҙырығыҙ (кеҫә телефонына, плеерға, ноутбукка) һәм тейешле органдарға мөрәжәғәт итегеҙ, мәғлүмәтте Интернеттағы социаль селтәрҙәргә урынлаштырығыҙ.

3. Мин, үҙ сиратымда, РФ һәм БР ҡануниәтен боҙоуҙарҙы булдырмауға максималь ярҙам итәсәкмен. Мине һайлап, Һеҙ ҡала округы Советында Сипайлово халҡы мәнфәғәтенең намыҫлы, ныҡлы, ышаныслы яҡлауын табасаҡһығыҙ.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Коннову С.Д. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

## 17-се бер мандатлы һайлау округы буйынса депутатлыҡҡа кандидат

# АБДУЛЛИН Рәзиф Рәүеф улы



*Мин барамын ҡала Советына*
*"Өҫтәгеләр" эшен яҡтыртырға,*
*Тырышырға ябай халыҡ өсөн.*
*Тауыш бирһәгеҙ һеҙ белерһегеҙ*
*Күҙлектәге мыйыҡлының көсөн.*

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Абдуллину Р.Р. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

## ДОРОГИЕ УФИМЦЫ!

Я - **Галина ИШМУХАМЕТОВА** - 10 лет возглавляю газету "Уфимские ведомости" и журнал "Уфа", призванные информировать, просвещать и духовно обогащать горожан.

Я - коренная уфимка, и знаю все, что происходит в родном городе: как развивается культура и сохраняется историческое наследие, как на свои скромные доходы уфимцы выживают и ставят на ноги детей.

Нам, уфимцам, предстоит вместе обустроить достойную жизнь - без воровства и мошенничества, без обманутых дольщиков и нехватки лекарств, без грязи в подъездах и хамства в транспорте.

В каждом районе Уфы, необходимы кризисные центры для попавших в беду.

Нижегородке нужна дамба, доступные всем водоснабжение и канализация. Люди заслуживают благоустроенных квартир.

Депутаты Горсовета обязаны выступить с законодательной инициативой о принудительном лечении пьющих отцов и матерей, из-за которых страдают дети.

*Давайте объединимся для решения наших проблем.*

***Я желаю всем добра и удачи.***

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Ишмухаметовой Г.Г. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

**Одномандатный избирательный округ № 2 (Инорс)**

## Кандидат от ЛДПР - ШАЙМУХАМЕТОВ Салават Рустемович



**Дата рождения:** 5 декабря 1974 года

**Родился и вырос в городе Уфа.**

**Образование** - высшее, Уфимский государственный нефтяной технический университет, специализация "Инженер химик-технолог".

**Трудовая деятельность:**

С 1996 г. по 1998 г. - ОАО "Уфанефтехим", оператор технологических установок.

С 1998 г. по 2005 г. - индивидуальный предприниматель.

С 2005 г. по 2007 г. - ОАО "Торговый дом АВДОН", менеджер.

С 2007 г. по 2011 г. - ООО "Паллада", коммерческий директор

В 2011 году вступает в ЛДПР. Решение о вступлении принял по политическим взглядам и убеждениям, в других политических партиях не состоял. В рядах ЛДПР зарекомендовал себя с положительной стороны, имеет благодарности от лидера ЛДПР Владимира Вольфовича Жириновского.

**Женат. Воспитывает сына.**

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Шаймухаметову С.Р. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

# КОМАНДА НАШЕГО ГОРОДА



**Салават Гималетдинов**

Кандидат в депутаты Совета городского округа город Уфа по одномандатному избирательному округу № 5

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Гималетдинову С.Х. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".



Мин, **Фараджев Рөстәм Заурбек** улы, милләтем буйынса башҡорт, был тормошта бөтөн нәмәгә үҙ хеҙмәтем менән өлгәшәм һәм маҡсатыма ныҡышмал барам. Дөрөҫлөктө күҙгә ҡарап әйтәм, алдаҡҡа, һатлыҡ йәнлелеккә һәм битарафлыҡҡа түҙеп тора алмайым. Биргән вәғәҙәне үтәргә һәм ауыр хәл-торошта ҡалыусыларға ярҙам итергә бала саҡтан өйрәнгәнмен. Оло быуынды һәм илебеҙҙең ҡаһарман тарихын хөрмәтләү тәрбиәһе алғанмын.

Ни өсөн мин КПРФ сафындамын? Сөнки тап ошо партия ил, унын граждандары яҙмышына битараф түгел, бары тик КПРФ ҡына бушлай медицинаны һәм белем алыуҙы, льготаларҙы, ауыл хужалығын, илдең элекке ҡеүәтен тергеҙеүҙе, ер аҫты байлыҡтарын һәм сәнәғәтте дәүләткә ҡайтарыуҙы гарантиялай. Барыбыҙға ла балаларыбыҙҙың, ейәндәребеҙҙең киләсәге тураһында уйланырға һәм берән-бер дөрөҫ юл һайларға ваҡыт етте.

Ғаиләм менән үҙем тәҡдим ителгән 15-се округта йәшәйем, район проблемаларын ишетеп түгел, күреп беләм. Һайлау алды программамда ТКХ тарифтарын ҡайтанан ҡарау; бюджет өлкәһендә эшләүселәргә социаль гарантиялар; спорт майҙансыҡтары, бушлай балалар баҡсалары һәм секциялар төҙөү; бушлай белем алыу, БДИ-нан баш тартыу һ.б. кеүек бурыстар ҡуям.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Фараджеву Р.З. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

## Почему Уфа выбирает кандидатов от ЛДПР

**Программа, отвечающая чаяниям большинства населения**

На предстоящие выборы ЛДПР предложила Программу развития Уфы на ближайшие четыре года, реализация которой позволит вывести город на совершенно новый уровень экономического и социального развития. Где главной ценностью станет качественная составляющая жизни для большинства населения, а не для кучки олигархов и представителей крупного бизнеса, банкиров. Это и вопросы экологической безопасности, снижение тарифов и прозрачность финансовых операций управляющих компаний в сфере ЖКХ, решение проблем со строительством жилья для социально не защищенных групп населения, укрепление связи депутатов городского Совета с избирателями, введение института депутатских программ, направленных на адресную помощь организациям и гражданам, увеличение поддержки всем слоям общества: молодежи и студентам, молодым и многодетным семьям, занятым на производстве и труженикам сельского хозяйства, пенсионерам и инвалидам и многие другие проекты, которые будут внесены вновь избранными муниципальными депутатами от ЛДПР уже в марте текущего года.



**Ваш кандидат по избирательному округу № 10**

## ХУСАИНОВ Василь Галиевич

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Хусаинову В.Г. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

**Одномандатный избирательный округ № 8 (Ленинский район)**

## Кандидат от ЛДПР - ДМИТРИЕВ Андрей Витальевич



Родился 21 мая 1973 года в городе Уфа.

В январе 2011 года вступает в ряды ЛДПР. По поручению руководства республиканского отделения партии был направлен в Дюртюлинский район, один из самых сложных районов по применению административного ресурса на выборах, смог сплотить ряды местной партячейки, укрепить позиции ЛДПР в районе. Имеет множество благодарностей от жителей Дюртюлей.

**Основная цель:** работать на благо города и республики, сделать инфраструктуру города как можно более комфортной для людей, внести свой вклад в развитие сельского хозяйства путем внедрения высоких технологий, к производству которых планирует привлечь ведущие предприятия республики в этой области.

**Семейное положение:** женат, имеет двоих детей.

**Жизненный принцип - силен не тот, кто не упал, а тот, кто упав, смог подняться!**

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Дмитриеву А.В. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

## Почему Уфа выбирает ЛДПР

**Одномандатный избирательный округ № 4**

## Кандидат от ЛДПР - РЯБОВ Вячеслав Владимирович



**Дата и место рождения:** 17 октября 1981 года, г. Уфа

**Образование - высшее профессиональное:**

2001 - 2006г. - Институт права Башкирского государственного университета, специальность - юриспруденция, квалификация - юрист;

1998 - 2001г. - Уфимский энергетический техникум, специальность - программист.

**Трудовая деятельность:**

2005 - 2007 г. - ЗАО "МР", юрисконсульт.

С 2007 - по настоящее время - Группа Компаний "СЕЛЕНА", юрисконсульт.

**Общественная деятельность:**

Член ЛДПР с 23.07.2009 г. С 15.05.2011 г. - координатор Уфимского районного отделения Башкортостанского регионального отделения ЛДПР.

2 июля 2011 года - избран в состав Координационного Совета БРО ЛДПР.

Помощник депутата Государственной Думы Сухарева И.К.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Рябову В.В. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

## Почему Уфа выбирает ЛДПР

**Одномандатный избирательный округ № 7**

## Кандидат от ЛДПР - РУДАКОВ Юрий Аркадиевич



**Дата и место рождения:** 03 апреля 1980 года, г. Уфа

**Образование - высшее профессиональное:** 1997 - 2002 г. - Московский государственный университет коммерции, специальность "Юриспруденция", квалификация - юрист

**Трудовая деятельность:** 2003 - 2004 г. - республиканская организация Башкортостана Профсоюз работников нефтяной, газовой отраслей промышленности и строительства РФ, правовой инспектор. 2004 - 2005 г. - ООО " Агрус", менеджер. 2005 - 2011 г. - ООО ДОЦ "Орлёнок", юрист. С 2011 года по настоящее время - ООО "Автоклуб", юрист.

**Общественная деятельность:** Член ЛДПР с января 2011 года.

С 24.06.2011 г. - координатор районного отделения ЛДПР.

С сентября 2011 года - сотрудник аппарата БРО ЛДПР, ответственный за агитационно-пропагандистскую работу.

Помощник депутата Государственной Думы Сухарева И.К.

**Женат, воспитывает сына.**

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Рудакову Ю.А. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

*✓ Ҡатын һәм ир ике осраҡта күңел болоҡһоуына бирелә: бер-береһен оҙаҡ күрмәгәндә һәм бер-береһе эргәһендә оҙаҡ торғанда.*

*(Жан Ростан).*



*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

# ЕРҘЕҢ ТЫН АЛЫШЫН...

## йыһанға ишеттереүсе моң



**Ошо көндәрҙә баш ҡалабыҙҙа өс мәҙәниәт, өс бөйөк моң осрашты. Бөтә донъяға билдәле ҡурайсы Роберт Юлдашев һәм уның "Ҡурайсы" төркөмө Тываның "Хуун-Хуур-Ту" өҙләүселәр ансамбле һәм Санкт-Петербургтың рус халыҡ көйҙәрен оҫта башҡарыусы "Терем-квартет" төркөмдәрен ҡунаҡҡа саҡырып, ике көн дауамында Өфө тамашасыһын тере тауышлы йырҙар менән шатландырҙы. Был моң фестивале ике көн буйына шығырым тулы зал йыйҙы, ысын байрамға әйерелде.**

Концерт алдынан Роберт Юлдашев һәм Ҡыҙыл ҡалаһынан килгән төркөм етәксеһе Саян Бапа журналистар менән осрашты. "Милли көйҙәр бөгөнгө эстрада музыкаһына дәгүәсеме?" тигән һорауға Саян уйынлы-ысынлы: "Был да үҙенсә көрәш", - тине. Тывала халыҡ көйҙәренә ылығыусы йәштәр һаны арта барыуын билдәләп, был көрәштә кемдең өҫтөн сығыуына ишара ла яһап ҡуйҙы Саян. "Милли музыка хистәр менән бәйле, логикаға һәм аҡылға буйһоноп бармаған, интуитив ҡараш талап иткән сәнғәт төрө, - тине ул. - Шуға ла беҙ үҙ ансамблебеҙҙә тик милли инструменттарҙы ғына ҡулланабыҙ, бер йырҙы ла нота буйынса йырламайбыҙ, шулай уҡ репетицияларҙы мөмкин тиклем һирәгәйтеп, импровизацияға ныҒыраҡ таянырға тырышабыҙ..."

Концертта "Хуун-Хуур-Ту" төркөмөнөң сығышын тамашасылар тын да алмай тыңланы. Барыһынан бигерәк тыва музыкаһындағы ихласлыҡ тамашасы күңеленә хуш килде. Ҡунаҡтар үҙҙәре үк билдәләүенсә, уларҙың музыкаһы атанан улға күсә килеүсе тарихи хәтер, хис ташҡыны.

Фестивалдең икенсе көнөндә тамашасы "Терем-квартет" төркөмө сығышы менән танышты. Санкт-Петербургтан килгән был музыканттар Рәсәй халыҡтары көйҙәрен дә, рус һәм донъя классикаһы әҫәрҙәрен дә үҙ оҫталыҡ менән башҡарҙы. "Терем-квартет" мөхәббәт, бәхет кеүек төшөнсәләрҙе балаларса бер ҡатлы ихласлыҡ, юмор менән аңлата белә булып сыҡты...

Ҡурайсыбыҙ Роберт Юлдашевтың һәм уның "Ҡурайсы" төркөмөнөң сығышын тыңлағанда барлыҡҡа килгән дәрт, сәм һәм ҡыуаныс хистәрен ябай тел менән генә аңлатып булмаҫтыр, моғайын. Был көйҙәрҙе тел менән еткерер өсөн кәмендә иң көслө сәсән булыу талап ителә. Музыканың тамашасыға нисек тәьҫир итеүен тойоп, үҙҙәре лә бирелеп, донъяларын онотоп уйнаған, йырлаған һәм бейегән ҡурайсылар менән беҙ ысын мәғәнәһендә моң шишмәһендә һыуһын ҡандырҙыҡ.

"Моң ысын ҡиммәттәрҙе аңларға ярҙам итә, ул һыуһағанға шишмә һымаҡ тәьҫир итә", тигәйне Роберт Юлдашев журналистар менән матбуғат конференцияһында саҡта ысын ҡиммәттәр тураһында фекер төйөнөн тағатып. Уның фекеренсә, ҡурай моңон бөгөн барыһы ла тыңлай белмәй йә уны ҡабул итергә әҙер түгел. Быны бер сәбәбе - кешенең тәбиғәттән ситләшеүе. Ә ҡурайҙа бит - тәбиғәт тауышы, моңо. Шуға күрә Роберт Юлдашев ҡурай тыңларға өйрәтеүҙең башҡа саралары-на мөрәжәғәт итә: боронғо инструменттарҙан - дөңгөрҙә, думбыраны ҡулланып, сит уйҙарҙы дөңгөр ярҙамында дөңгөрләтеп, думбыра сыңы менән сирткеләп сығарып, күңелдең иң төпкө өлөшөнә ҡурай моңон ояләта.

Ике көн буйына дауам иткән музыка байрамының иң төп әһәмиәте нимәлә һуң шулай ҙа? Был һорауға күп кенә яуаптар ишетергә тура килде. Альфред исемле ағай әйтеүенсә, Роберт Юлдашевты Рәсәйҙең баш ҡалаһында ла тыңлайҙар. Күптән түгел Мәскәүҙә бер байкерҙың эргәһенән үтеп барышлай, таныш моң ишетелеп ҡала. Түҙмәй, был байкерҙан нинди көй тыңлауы тураһында һорай. Тегеһе Роберт Юлдашевтың ҡурай моңон тыңлауы тураһында әйтә. "Был көйҙө минә бер дуҫым тәҡдим иткәйне, бик оҡшаны", - тип өҫтәй байкер.

Концерттан сығып барышлай берәүһенә үҙ тәьҫораттары тураһында һөйләгән тамашасыларҙың кемеһенә генә мөрәжәғәт итһәк тә, барыһы ла был концерттан ҡәнәғәт булыуын әйтте. Билдәле ҡурайсы Азат Айытколовтың: "Роберт Юлдашевтың ҡурайсы таланты әле асыла ғына. Ул - ижади кеше, рәссам, шуға күрә лә сиктәр ҙә, бер төрлөлөк тә уның ижадына хас түгел. Тап ошо сифаттар ысын ижадсыны билдәләй. Уның моңон, стилен ҡалыптарға һалырға түгел, ә уға терәк булырға, ярҙам итергә кәрәк", - тигән һүҙҙәрен дә оло баһа итеп ҡабул итергә кәрәк.

Концертты ойоштороусы Заһир Ҡотлосурин әйтеүенсә, Роберт Юлдашев һәм уның "Ҡурайсы"лары Тыва музыканттары "Хуун-Хуур-Ту" егеттәре менән берлектә Рәсәйҙең бер-нисә ҡалаһына гастролдәргә сығырға йыйына. Был турне тап Башҡортостандың баш ҡалаһындағы ошо фестивалдән башланған да инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ни өсөн Аллаһы Тәғәлә кешегә моң биргән? Ошо һорау инеп сыҡҡаны барҙыр һеҙҙең уйығыҙға ла. Ниндәйҙер аңлатып булмаған тартыу көсөнә эйә булған моң тигән нәмәгә элек тә табынғандар, уға хәҙер ҙә таң ҡалалар, моң әҫәренән киләсәктә лә ҡотола алмаясаҡтар, моғайын. Сөнки моң - иң киткес матур картина һымаҡ, әммә был картинаны йөрәк менән "күрәләр". Шулай булғас, музыканы халыҡҡа еткереүсе, уны тыуҙырыусыны ла рәссам һымаҡ ҡабул итергә булалыр.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

"2-се Өфө педагогия колледжы" уҡытыусылары һәм хеҙмәткәрҙәре коллективы Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Ленин, ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, I дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм бик күп миҙалдар кавалеры

**Яҡупов Ғилман Ғирфан улының**

вафат булыуы сәбәпле, Ямалетдинова Наилә Ғилман ҡыҙының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

* * *

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты коллективы күп йылдар ошо институтта эшләгән һәм үҙенең ғилми эшмәкәрлеген башҡорт лексикографияһын үҫтереүгә бағышлаған телсе-ғалимә

**Суфьянова Нәсимә Фәтих ҡыҙының**

вафат булыуы сәбәпле, уның ғаиләһенең һәм туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

* * *

Өфө ҡала округы хакимиәте, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре

**Суфьянова Нәсимә Фәтих ҡыҙының**

ваҡытһыҙ вафат булыуы сәбәпле, туғандарының һәм яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупраҡтары еңел булһын!**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕР АЛДАҺАҢ...

## ғүмергә алдаҡсы булырһың

Белмәгән сибәрҙе алғансы, белгән йәмһеҙҙе ал.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡайһы саҡта ҡатын-ҡыҙ ир кеше менән яҡынлашыуҙан ҡурҡып ҡаса, ул оҡшамаған өсөн түгел, ә үҙе уға оҡшамауҙан ҡурҡҡан өсөн.

**(Константин Мелихан).**

Артыҡ ҡайнар мөхәббәт иң аҙағында беҙҙе күңел төңөлөүгә килтерә. Шуға ла ашҡаҙан өсөн төмле аҙыҡ нисек зыянлы булһа, кеше өсөн ҡайнар мөхәббәт тә шулай уҡ зыянлы.

**(Публий Овидий).**

Ҡатын һәм ир ике осраҡта күңел болоҡһоуына бирелә: бер-береһен оҙаҡ күрмәгәндә һәм бер-береһе эргәһендә оҙаҡ торғанда.

**(Жан Ростан).**

Ғаилә бөтәһен дә алыштыра. Шуның өсөн өйләнер алдынан уйла: һинә нимә мөһимерәк - бөтәһе ләме, әллә ғаилә генәме?

**(Фаина Раневская).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше Аҡһаҡалға килә һәм шулай тип һорау бирә:**

**- Аҡһаҡал, минә ни эшләргә, кәңәш бир. Мин бөтөн тәнемдә тартыныу тоям. Беләм, мин үҙемдең ролдә түгелмен, мин үҙемдең ысын тойғоларымды белдерә алмайым. Минең үҙем булғым килә...**

**- Һин, ысынлап та, үҙ тойғоларыңды баҫтыраһың, - ти Аҡһаҡал. - Бәләкәй сағыңда һине иламаҫҡа һәм көслө булырға өйрәткәндәр. Шулай итеп һине тойғоларыңды баҫтырырға өйрәткәндәр. Әгәр ҙә кеше аҡыл файҙаһына тойғоларын баҫтыра икән, тимәк, ул бары тик уйлай белеүсе машинаға әйерелә. Тартыныу тойғоho үҙеңдең уҡытыусыларыңдың һабағын яҡшы үҙләштереүең тураһында һөйләй. Уларҙы ғәйепләмә, улар һиңә изгелек эшләйбеҙ икән тип уйлағандар. Ләкин улар үҙҙәре лә аңламайынса һине көсөҙ булырға өйрәткәндәр. Ә бит бары тик көслө кеше генә йөрәгенең ташҡа әйләнеүенә ҡаршы тора ала. Көслө кеше генә үҙ-үҙе булып ҡала ала. Көслө кеше генә үҙенең тойғоларынан йәшенмәй. Илағыһы килһә - илай, шатланғыһы килһә - шатлана, көлгөһө килһә - көлә. Һинең эске донъяң тойғоларҙан тора, уларҙы тышҡа сығар һәм улар менән үҙеңсә, бер-берегеҙҙе аңлаған телдә һөйләш. Шул саҡта ғына һин үҙең булып йәшәйәсәкһең..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танытҡысы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5344
Заказ 600